ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4-10 ғинуар (һыуығай) 2020

№ 1 (887)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бәхетле булайыҡ!**



6

**Рухи хазинабыҙ һаҡланасаҡ...**



ауылдарыбыҙҙы һаҡлап ҡала алһаҡ 8-9

**Ейәнсәрҙәрҙең шатлығы...**

өләсәй селтәре



11

**Һәр кемгә ҡағыла**



13

**ТВ-программа** 14

***Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 2020 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылырға һуңлаған таныштарығыҙға хәбәр итегеҙсе: улар республиканың һәр ауылында, ҡалаһында 17 ғинуарға тиклем яҙылып, гәзитебеҙҙе февралдән алдыра башлай ала. ПР905 индекслы "Киске Өфө" биш айға 563 һумға төшәсәк. Бергә булайыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Һауа торошоноң ныҡлы үҙгәреүен, элекке һымаҡ бер миҙгелдең икенсе миҙгелгә ҡарата быуаттар буйы нығынған халыҡ һынамыштары һәм фараздарының бөгөн бөтөнләй тип әйтерлек тап килмәүен һиҙәһегеҙме?*

***Инбер ЯППАРОВ, география фәндәре кандидаты, БДУ доценты:*** Халыҡта көн, һауа торошон алдан фаразлауҙар, эйе, бар. Ҡайһы бер күҙәтеүҙәр тап килеп тә ҡуйғылайҙыр, ләкин мин үҙем был мәсьәләгә фәнни күҙлектән ҡарайым һәм тәбиғәт күренештәрен оҙаҡ йылдар күҙәтеү һөҙөмтәһе аныҡ фаразлауҙарға нигеҙ булып тора тип әйтә алмайым, сөнки фараздарҙың тап килгән саҡтары ла, тап килмәгәндәре лә бар. Һәр тап килгән күҙәтеү-фараздарҙы дөйөмләштереп, шуға ышанып ҡына йәшәп булмай. Ул ваҡытта беҙгә метеорологтарҙың да кәрәге булмаҫ ине. Ә бына һауа торошоноң үҙгәреүе менән бәйле миңә йыш һорау бирәләр. Яуабым шундай: беҙ хәҙер урта кимәлдәге - 30 йыллыҡ климат циклының икенсеһенә күскән осорҙа йәшәйбеҙ. Бындай циклдарҙың 11, 33, 50 йыллыҡтары бар. Тап бына ошо күсеү осоронда була ла инде ғәҙәти булмаған һауа торошо күренештәре: һауа температураһы ғәҙәттәгенән 2-3 градусҡа күтәрелә, ләкин был, әле ҡабатларға яратыуҙарынса, глобаль йылыныу түгел! Йә булмаһа, икенсе йылына йәй ямғырлы һәм һалҡын килә. Был күренеште лә мин аномаль хәл тип әйтмәҫ инем, сөнки ул дөйөм һауа торошоноң уртаса йыллыҡ күрһәткестәре сигенән сыҡмай. Әйткәндәй, һауа торошоноң үҙгәреүен, һыу баҫыуҙар, ҡойон кеүек стихиялы тәбиғәт күренештәрен глобаль йылыныу процесы менән аңлатыусылар күп хәҙер. Әгәр был ысынлап та шулай икән, ҡайҙа һуң донъя океаны кимәленең күтәрелеүе хаҡында рәсми күрһәткестәр? Боҙлоҡтарҙың иреүе хаҡындағы теория яҡлы ғалимдар ҙа бар. Был процеҫка ла мин тәбиғи эҙмә-эҙлелек тип ҡарайым. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙгә тәбиғәтте өйрәнеүҙе ентекләберәк ойоштороорға кәрәк. Йылдарыбыҙҙың нисек килерен күрәҙәләү генә етмәй, беҙ һәләкәтле тәбиғәт күренештәрен дә алдан күҙалларға өйрәнергә тейешбеҙ. Ғәҙәти булмаған (аномаль) тәбиғәт күренештәренең сәбәптәре бик күп төрлө бит ул. Уға ер өҫтө рельефы ла, уның урманлы-таулы булыуы ла, хатта теге йәки был урындың төҫө лә тәьҫир итеүе ихтимал. Бөтөн ошо күҙәтеүҙәргә нигеҙләнеп, климат картаһы төҙөргә һәм шуның менән файҙаланырға булыр ине. Үкенескә күрә, беҙ фәнгә иғтибар бирелеп еткерелмәгән осорҙа йәшәйбеҙ, ғалимдар эшмәкәрлеген дәртләндереү саралары юҡ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ШАҒИР ҺҮҘЕ

## БУЛАЙЫҠ ГЕЛ ИЗГЕ ДОҒАЛА!

*Өр-яңы йыл елеп килә Ерғә -*
*Быуат үлсәмендә бер тамсы.*
*Тик тарихта уның кеүеге юҡ -*
*Юҡ көнөнә көнө оҡшашы!*

*Имен генә килһен Сысҡан йылы,*
*Сусҡаһына инде упкә юҡ.*
*Тыуыр йәндәр тыумай ҡалмаҫ бер ҙә,*
*Киткәндәргә - бәхил, күптәр юҡ...*

*Беҙ бәхетле: быуатташтар булып,*
*Замандаштар булып йәшәйбеҙ.*
*Донъя малы йыйнап, ваҡыт ҡыуып,*
*Өлгөрмәгән булып сәсәйбеҙ.*

*Беҙ өлөшлө - ошо изге Ерҙә*
*Ейер ризыҡ, юлдар көткәнгә.*
*Уйламаған ерҙән бирә бит ул*
*Шөкөр, тиеп, сабыр иткәнгә.*

*Өр-яңы йыл ишек ҡағыр мәлдә*
*Булайыҡ гел изге доғала.*
*Бәндә тәҡдиренә яҙғанса гел -*
*Йылдар үлсәмендә һынала...*

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**




*Баш ҡаланың бар мәҙәниәт һарайҙарында балалар өсөн шыршы байрамдары үтте.*

12+

ӘЙҘӘГЕҘ...

# СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!

**Һуңғы ваҡытта тормошобоҙ тотош стрестарҙан ғына торған кеүек: ваҡыт шул тиклем тиҙ аға, бер нәмәгә өлгөрөп булмай, ахырҙа, үҙебеҙҙе "ашай" башлайбыҙ. Ә кешенең эмоциональ фоны туранан-тура уның организмына йоғонто яһай. Хатта табиптар ҙа "Сирҙәрҙең 80 проценты - психосоматиканан", тип белдерә. Ни өсөн тап шулай килеп сыға һәм ауырыуҙарҙың иҫ-аҡыл көйләлөгөнә бәйле булыуының сәбәбе ниҙә?**

Кеше - физик тыш, тән генә түгел. Кеше - һәр ваҡыт энергия тараткан һәм ҡабул иткән энергия мәғлүмәтле йән эйәһе. Ғалимдар кеше тәненең энергетик ҡатламын фотоға төшөрөүгә өлгәшкән. Бындай прибор совет физиотерапевтары - ирле-ҡатынлы Кирлиандар тарафынан уйлап табылған. Шуға күрә ысул да Кирлиан ысулы тип атала.

Әгәр үҙебеҙҙең төрлө диапазонлы энергиялар үҫешкән йән эйәләре булыуыбыҙҙы аңлаһаҡ, энергияны һаҡлау ҡануны йоғонтоһонда булыуыбыҙҙы төшөнәсәкбеҙ. Был ҡанунға ярашлы, бер генә энергия ла әллә ҡайҙан алынмай һәм бер ҡайҙа ла юғалмай: ул бары тик бер тороштан икенсеһенә күсә. Шулай итеп, үҙебеҙҙең иҫ-аҡыл көйләлөгө менән төрлө: ыңғай йәки кире (тәҙөүсе йәки емереүсе) энергияларҙы үҫтереү мөмкинлегенә эйә булыуыбыҙҙы аңларбыҙ. Был нисек сағылыш таба? Ғалимдар һыуҙың мәғлүмәтте хәтерендә ҡалдырыу үҙенсәлеген раҫлаған. Был осраҡта һыу билдәле энергиялар йоғонтоһонда үҙенең молекуляр структураһын үҙгәртә. Молекулаларҙың торошо үҙгәргәндә һыу молекулаларының эске энергияһы диапазоны ла үҙгәрә. Һыуҙың үҙенсәлекле сифаты тап ошонда ла инде.

Беҙҙең атай-олатайҙар һыуҙың төрлө сифатлы мәғлүмәт һаҡлау үҙенсәлеген белгән. Һыуҙың был сифаты беҙҙең тәнебеҙҙә нисек эшләй һәм организмға нисек билдәле бер тонус бирә һуң? Тәнебеҙ 70-80 процентҡа һыуҙан тора. Тимәк, теләһә ниндәй хис-тойғоноң энергияһы бар һәм ул, организмдағы һыуға йоғонто яһап, уның эске молекуляр торошон үҙгәртә. Йәғни организмдағы һыу үҙгәреп, үҫтереү йәки емереү процестарына шарттар тыуҙыра. Ҡыҙғыусанлыҡ, асыу, үпкәләү, ярһыу, ҡурҡыу кеүек емергес хис-тойғолар төрлө сирҙәрҙең нигеҙе булып тора ла инде.

Барлыҡ изге яҙыуҙарҙа кешенең үҙен аңларға һәм эске донъяһын камиллаштырырға тейешлеге тураһында яҙыла. Был гармонияға, тынысланыуға, хис-тойғоларҙы һәм аҡылды контролдә тотоуға килтерә. Замана кешеһе, матди донъя хакимлығына бирелеп, эске донъяһын гармонияға килтереүгә иғтибарҙы аҙ бүлә. Ул һәр саҡ ҡәнәғәтһеҙлек белдерә, үҙендә кире көйләнеш, асыу, үпкә һаҡлай, уны һәр саҡ төрлө ҡурҡыу оҙатып йөрөй. Йәш ваҡытта организм ныҡ булһа ла, тиҫтәләрсә йылдарҙан һуң сәләмәтлек ҡаҡшай, сирҙәр барлыҡҡа килә башлай, үлемесле ауырыуҙар көсәйә. Быларҙың барыһының да сәбәбе - эске донъяның үҫешмәүе һәм ошоға бәйле тормош алып барыу.

Шуға күрә, хәҙерге психологтар тыныс булырға, төрлө тормош хәл-торошон күңелгә яҡын алмаҫҡа, һәр саҡ ыңғай көйләнештә булырға саҡыра һәм төрлө юлдар тәҡдим итә. Барлыҡ донъяуи диндәрҙең рухи тәжрибәһе эске донъяны таҙартыуға һәм күңелде медитация аша тынысландырыуға йүнәлтелә.

Замана кешеһенә үҙенең эске донъяһына күберәк ваҡыт бүлергә, уны программа көйләнешенән, ҡалыптарҙан, донъяуи ҡараштарҙан таҙартырға кәрәк. Психологтар "парадигманы үҙгәртеү" тигән термин ҡуллана. Йәғни, тормошҡа күп нәмәләргә ҡарашты үҙгәртергә кәрәк. Аңды үҙгәртеп (был шәхси характергә эйә, йәғни кеше үҙен үҙе генә үҙгәртә ала), кеше автоматик рәүештә тормошона килеп ингән ауырыуҙарҙан арына, яҡын кешеләре һәм тотош йәмғиәт менән гармонияла уның ҡаҙана ала. Моғайын, донъяла бәхеткә ынтылыу нигеҙе ошолор.

**Айбулат УРАҘБАХТИН.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һауа торошоноң ныҡлы үҙгәреүен, элекке һымаҡ бер миҙгелдең икенсе миҙгелгә ҡарата быуаттар буйы нығынған халыҡ һынамыштары һәм фараздарының бөгөн бөтөнләй тип әйтерлек тап килмәүен һиҙәһегеҙме?



(Башы 1-се биттә).

***Ҡасим ЯНБАЕВ, хәрби хеҙмәт ветераны, һәүәҫкәр фенолог, Ейәнсура районы Үргә Бикбирҙе ауылы:*** Күптәнге ғәҙәт буйынса әле лә һауа торошо көндәлеге алып барам: һауа температураһын, яуым-төшөмдө билдәләйем. Шул яҙмаларға ҡарап, элегерәк йәй нисек килерен ҡыш "холҡона" ҡарап күҙалларға була ине, ләкин һуңғы йылдарҙа тәбиғәткә хас бындай тәртип һәм дә гармония тамам боҙолдо. Һигеҙенсе йыл инде беҙҙең районда ҡоролоҡ хөкөм һөрә. Ер кипте. Үткән йыл үлән, сәскә әҫәре лә булманы хатта. Мин умартасылыҡ менән шөғөлләнәм. Һәр төрлө йәшел үҫенте, сәскә булмаһас, ҡортсолоҡ та уңманы. Ҡоролоҡ башланһа, ете йылға һуҙыла ла бөтә, тигән боронғо һынамыш та үҙен аҡламаны: беҙҙә ул, әйтеүемсә, һигеҙенсе йыл дауам итә хәҙер. Бындай оҙайлы ҡоролоҡ сәбәбе, минеңсә, дөйөм климат үҙгәрештәренә лә бәйлелер, әлбиттә, ләкин урындағы шарттар һәм сәбәптәр йоғонтоһо барыбер көслөрәктер. Ямғыр болоттары ҡапҡара булып яуырға ҡабарып сыға ул, тик беҙгә килеп етә алмай, таралып юҡҡа сыға ла ҡуя. Бының сәбәбе беҙҙең район биләмәһен ике яҡлап ҡамап ятҡан Иштуған менән Таналыҡ һыуһаҡлағыстарына бәйлелер, тигән уйҙамын. Яуырға тулышҡан болоттарҙы ошо яһалма һыу ятҡылыҡтары тартып ала тора. Ғилми хеҙмәттәрҙә бындай ҡоролмаларҙың эргә-тирәһендә ятҡан райондарҙың микроклиматы төрлө үҙгәрештәргә дусар ителә, уларҙың биләмәләрендә ҡоролоҡ башланыу, ваҡ йылғалар ҡороу, йәшеллектең яйлап юҡҡа сығыу хәүефе бар, тип әйтелә. Беҙҙә бит хәҙер ҡар ҙа яумай киләндереп. Элегерәк улай булманы: йырып сығҡыһыҙ итеп көрт һалып ҡуя, уның бейеклеге ҡойма-ҡөртәләүҙәр менән типә-тин була ине. Ә хәҙер иң ҡарлы тигән йылды ла уның ҡалынлығы 20-30 сантиметрҙан артмай. Тәбиғәт көрсөгө менән бәйле ҡыр хайуандары, ҡош-ҡорт бөттө. Мин һунарсымын да, шуға күрә районның кейек һәм ҡош-ҡорт донъяһы менән яҡшы танышмын. Хатта ҡуян да юҡ, бүре лә бөттө. Һунар ҡоштары: һуйыр, ҡор, урман селе, ялан селе күп ине элек, бөгөн хатта бытбылдыҡ менән тартай ҙа юҡ, исмаһам. Ҡыр сусҡаһы менән төлкө генә тороп ҡалды. Кесе Һүрәмдә мин элек бер сәғәт эсендә 20-30-лап бәрҙе, бағры ҡармаҡлап ала инем, рәхәтләнеп һыу инә инек, хәҙер Кесе Һүрәм дә бөтөүгә табан бара. Ә бит уға 32 шишмә ағып төшә ине, хәҙер шуларҙан ике генә ҡушылдығы тороп ҡалды. Бына ошондай экологик проблемалар һис һүҙһеҙ һауа торошона - климатҡа тәьҫир итә лә инде, сөнки тәбиғәт донъяһында бөтә нәмә эҙмә-эҙлекле рәүештә сәбәп-эҙемтә сылбыры менән бәйле.

***Мөхәмәтәәле ИМАНҒОЛОВ, хеҙмәт ветераны:*** Һиҙәбеҙ генә түгел, уның хәүефле эҙемтәләрен, михнәт-зыяндарын үҙ елкәбеҙҙә йыл әйләнәһенә тип әйтерлек татып йәшәйбеҙ бит инде. Дөрөҫөн әйткәндә, был үҙгәрештәр ныҡлап ҡына бынан бер-ике тиҫтә йыл элек, йәмғиәтебеҙҙә сәйәси ҡыйралыштар, аңлайышһыҙ үҙгәртеп ҡороу ғибрәттәре менән бер осорҙараҡ һиҙелә башланы. Әлбиттә, мин бында шул замандағы буйраҡ һәм болғаҡтан файҙаланып, ҡырағай хосусилаштырыу ысулы менән ил байлығына хужа булып алған һәм әле лә бөтөнләй сик-самаларҙы белмәгән олигархтарҙың ғонаһлы ғәмәлдәре, әҙәм балаһының әҙәп тигәндә онота барыуы, намыҫ, ыждан, оят кеүек әхлаҡ категорияларының күп осраҡта юҡҡа сығыуы ныМаҡ яҙыҡ күренештәр менән бәйләнеш эҙләргә йыйынмайым. Әммә ләкин климаттың боҙолоуында кешелектең холоҡ сифаттары боҙоҡлоғон да

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Иҫке йылдың һуңғы көнөндә Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин республика һәм баш ҡала халҡын Яңы 2020 йыл менән ҡотлап, изге теләктәрен еткерҙе.

✓Өфөлә Башҡортостан Республикаһының фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт премияларын тапшырыу тантанаһы уҙҙы. Республикала фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт премиялары ике йылға бер тапҡыр тапшырыла, уларҙың күләме 500 мең һум тәшкил итә. Дүрт коллектив лауреат исемен алды. Улар - техноген ҡалдыҡтарҙы утилләштереү, нефть скважиналарын диагностикалау, ашҡаҙан аҫты биҙен һәм бауырҙы дауалау өлкәһендә яңы технологиялар уйлап табыусылар.

✓Башҡортостандан 114 уҡыусы Мәскәүгә балаларҙың Яңы йыл байрамына - Кремль шыршыһына барып ҡайтты. Өс көнлөк сәфәрҙән һуң уҡыусыларҙы аэропортта Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин ҡаршы алды. Уның билдәләүенсә, был юлы Башҡортостан делегацияһы Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында һан яғынан иң күбе булған.

✓Башҡортостанда күп балалы 50 ҡатын-ҡыҙ "Әсәлек даны" миҙалын алды. Награда менән бергә аҡсалата премия тапшырылды (һалым ҡайтармаһы менән 8,7 мең һум). Миҙал 1998 йылда булдырылды, ошо ваҡыт эсендә уға 8 меңдән ашыу әсә лайыҡ булды. Былтыр 300 ҡатын-ҡыҙ миҙал менән бүләкләнде. Республикала бөтәһе 46 меңдән ашыу күп балалы әсә иҫәпләнә.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһы беренсе тапҡыр 17 йәшкәсә юниорҙар йыйылма командаларының Биш милләт хоккей турнирын ҡабул итә. Ярыштар "Өфө-Арена"ла 2020 йылдың 5-9 февралендә уҙғарыла. Турнир наградалары өсөн Рәсәй, Финляндия, Швеция, Чехия һәм АҠШ командалары көрәшә. "Уйындарҙың тура трансляцияларын YouTube-каналында һәм Рәсәйҙең Хоккей федерацияһы сайтында ҡарарға мөмкин", - тип белдерҙеләр Рәсәй Хоккей федерацияһының матбуғат хеҙмәтендә.

✓Ҡаты коммуналь ҡалдыҡтарҙың яңы системаһы индерелгәндән алып республиканың баш ҡалаһы һәм Өфө районы биләмәһендә дөйөм майҙаны 5,5 гектар тәшкил иткән 25 рөхсәтһеҙ сүплек бөтөрөлгән. Ләкин район биләмәһендә законһыҙ сүплектәр ҡалған, уларҙы тиҙҙән муниципалитет бюджеты аҡсаһына бөтөрөргә ниәтләйҙәр.

күрмәү мөмкин түгел, сөнки климат үҙгәрешенә ҡағылышлы ниндәй генә мәҡәлә уҡыма, унда иң беренсе сәбәп итеп кеше факторы күрһәтелә. Әлбиттә, кешелек ҡылығына бәйле булмаған башҡа объектив факторҙар ҙа етерлек, ләкин әҙәм балаһы үҙенә бәйле сәбәптәрҙе генә лә юҡ итеү, һис булмаһа, кәметеү буйынса эш алып барһа, дөйөм хәл бер аҙ яҡшыра төшөр ине, кем белә...

Һауа торошо буйынса боронғо һынамыштарға килгәндә, уларҙың, ысынлап та, тап килмәгәндәре күп хәҙер, ләкин бөтәһе лә тип тә әйтеп булмай, тап килеп ҡуйғандары ла бар, ул нигеҙҙә беҙҙең ерлектә, Урал - Иҙел биләмәһендә генәлер тип тә уйлайым. Уралтауыбыҙға һыйынып йәшәйбеҙ бит, ул ышыҡ булып, ҡурсалап тора беҙҙе әлегә. Ләкин ҡасанғаса? Әгәр кеше хаттин ашыуҙан туҡтамай, үҙен генә уйлап, экологияға һаман да төкөрөп ҡарауын дауам итһә, сал Уралыбыҙ ҙа ғәфү итмәҫ быны. Әҙәм балаһы бөтөнләй рәхәткә өйрәнде: йәйәү йөрөй торған ергә лә машина ҡыуа, машина өҫтөнә машина ала, ағыулыҡ кимметләнеүгә лә ҡарап тормай, уның зарарлы ҡалдыҡтары, газ бүлендектәре менән һулар һауабыҙҙы ағыулай...Мин тәүҙә транспорт ағыулығынан ул тиклем зыян юҡтыр, тип уйлай инем, ләкин экологтар, ғалимдарҙың ошо юҫыҡтағы мәҡәләләрен уҡып, иҫем китте: тап ана шул углеводородтар, углерод моноксиды, азот оксиды, көкөрт ҡатышмалары һәм башҡа ана шундай йөҙҙән ашыу төрҙәге химик берләшмәләр һөрөмө тап әлеге климат үҙгәрешенә йоғонто яһаусы озон ҡатламы йоҡарыуға (ә озон ҡатламы, билдәле булыуынса, ер йөҙөндәге барса тереклекте ультрафиолет нурҙарҙан һаҡлай), һыу, һауа, тупраҡтың бысраныуына, кеше сәләмәтлегенең ҡаҡшауына килтерә икән. Ә инде ер аҫты ҡаҙылмалары табыусы тау-байыҡтырыу комбинаттары кеүек предприятиелар, атом электр станциялары килтергән зыян хаҡында әйтеп тә торорға түгел. БМО-ның климат буйынса халыҡ-ара конференциялары ла экологияны һаҡлау эшендә бизнес мәнфәғәттәренән уҙып, әллә ни эшләй алмай, йәмәғәтселек тә шаулап ала ла тына... Шулай булғас...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*БЫЛ АЙҘА...*

**Ҡыштың иң һыуыҡ айы иҫәпләнгән был ай тураһында уның халыҡ телендә йөрөтөлгән боронғо исеме лә асыҡ һөйләп тора - һыуығай. Элек-электән йылдар буйы тупланып килгән халыҡ һынамыштарын өйрәнеп, бөтөн миҙгелдәргә лә хас һауа торошон ата-бабаларыбыҙ алдан әйтеп белеп торған. Улар йылдың тәүге айының тәүге ун ике көнөндәге һауа торошона ҡарап та йылдың тотош ун ике айына ла ҡылыҡһырлама бирә алған.**

# ҺЫУЫҒАЙ...

## булһын ине айыҡ ай



Беҙҙең замандарҙа ла оло быуын кешеләре араһында һирәкләп булһа ла бар алдан күрә белеүселәр, тик хәҙер уларҙың фаразы күп ваҡыт раҫҡа сыҡмай ҡалыуы ла бер ҙә ғәжәп түгел, сөнки климат тамырынан үҙгәрә, тәбиғәт көтөлмәгән холоҡ-фиғеле менән йылдың-йылы кешелекте аптырата, хәүефләндерә, уйландыра. Шулай ҙа йыл башынан алып һынамаҡ өсөн генә булһа ла һыуығайҙағы һәр көндөң һауа торошон махсус дәфтәргә теркәй барып, уның йәй миҙгеленә - уңыш осорона тәьҫирен сағыштырып ҡарарға булалыр. Был ауылда хаҡлы ялда ятҡан өлкән кешеләргә үҙенә күрә бер мауыҡтырғыс шөғөл дә булыр ине. Мәҫәлән, элекке һынамыштарҙан шундай-шундайҙары һаман да үҙ көсөндәме: "Ғинуарҙа ҡар әҙ булһа, уңыш булмаҫ", "Ғинуар һыуыҡ килһә, июлдә ҡоролоҡ, эҫе булыр", "Ғинуарҙа йыш ҡар яуып, буранлап торһа, июль ямғырлы килер", "Был айҙа йондоҙҙар асыҡ күренһә, көн һыуытыр", "Мейестәге утын шартлап янһа, көн һыуытыр", "Ғинуар йылы килһә, яҙ һуңға ҡалыр", "Ғинуарҙа көндәр һыуыҡ торһа, февралдә йыш буранлар", "1 ғинуар төнө йондоҙло булһа - йәй уңышҡа" һ.б. Һауа торошон күҙәтеүҙәрегеҙ мәлдәрендә осраған ҡыҙыҡлы күренештәр, мәғлүмәттәр хаҡында "Киске Өфө" гәзитенә яҙып ебәрә, башҡа уҡыусылар менән фекер уртаҡлаша алаһығыҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ.

Яңы йыл байрамы **(1)** Бөтөн донъя тыныслыҡ көнө менән тап килә, шуға ла быны изгегә юрап, йылыбыҙҙың төклө аяғы менән хәйерле килеүен, уңышлы һәм бәрәкәтле булыуын теләйек. Һыуығый - оҙайлы каникулдар, ял мәле. Халыҡ уны мөмкин тиклем файҙалы, сәләмәт рухта үткәрһен өсөн республика етәкселеге башҡарма ведомстволарҙан әүҙем мәҙәни һәм спорт-масса саралары, күмәк ғаилә байрамдары ойоштороуҙы талап итте, был көндәр имен, тыныс булһын өсөн айырыуса эскелек күренештәрен, алкоголь һатыуҙы сикләү тураһында махсус закон ҡабул итеү ҙә бик урынлы, ләкин был тыйыуҙар йәшереп контрафакт алкоголь продукцияһы, өй шарттарында әҙерләнгән көмөшкә һатыусыларҙы туҡтатыр микән? Тап бына уларҙың, тыйылған спиртлы эсемлектәр менән законһыҙ рәүештә "итәк аҫтынан" сауҙа иткән һәм йыш ҡына шуның менән һанһыҙ күп кешеләрҙең ағыуланыуына, үлеменә сәбәпсе булған намыҫһыҙ әҙәмдәрҙең "эшмәкәрлеге"нә контролде көсәйтергә кәрәктер, сөнки спиртлы эсемлектәрҙе йыш, даими ҡулланыусы ауыл ерендә йәшәүселәр араҡыны ҡаланыҡылар кеүек магазиндан һатып алмай, ә арзан хаҡҡа ситтән килтерелгән шикле контрафакт эсемлекте алыпһатарҙан, йә көмөшкәсенең өйөнән барып ала. 20 йыл буйына инде һәм айырыуса һуңғы 5 йылда илдә легаль булмаған алкоголь эсемлектәр әйләнеше сәскә ата, был йүнәлештә баҙар әүҙем үҫешә, тип танырға мәжбүр эксперттар. "Легаль булмаған алкоголь продукцияһы баҙарҙың 70 проценты самаһын тәшкил итә", тип белдергәйне былтыр РИА агентлығына интервьюһында "Айыҡ Рәсәй" федераль проекты етәксеһе Солтан Хәмзәев. Хәйер, быйыл да был һан әллә ни күпкә кәмемәгәндер, сөнки, ти ул, Рәсәйҙә алкоголь ҡулланыу кәмене тип белдереүсе РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы легаль алкоголь мәғлүмәттәре менән генә эш итә, ә контрафакт һәм суррогат ҡулланыусы контингент рәсми статистиканан ситтә тороп ҡала. Шуның өсөн дә легаль булмаған алкоголле эсемлектәр әйләнеше тамыр йәйгән ауыл ерҙәрендә көрәш һәм иҫкәртеү сараларын, мәҫәлән, көтөлмәгән рейдтар, штраф санкциялары ярҙамында бермә-бер көсәйтергә кәрәк, ҡайһы бер алыпһатар һәм көмөшкәселәрҙе хатта енәйәт яуаплылығына тарттырыуҙан да тартынып торорға ярамай. Юғиһә, тап ошо эскелек проблемаһын сәбәп итеп, яңы йыл каникулдарын күп күреүсе, уға теш ҡайраусылар ҙа күбәйеп китте. Улары булһа ла Жириновский ише сәйәсмән һәм кеҫә яҡтарын ғына ҡайғыртыусы бизнесмендар, әлбиттә. Йәнәһе лә, оҙайлы ял ил иҡтисадын ҡаҡшата икән. Былай ҙа бөлгөнлөктән сыға алмаған иҡтисадты бер-ике аҙнала ғына алға ебәреп булһа икән! Ә бит иҡтисадтың мөһим тармаҡтары иҫәпләнгән производство һәм предприятиеларҙа эш туҡтамаясаҡтыр, моғайын.

Айыҡ һәм сәләмәт тормош рәүеше беҙгә көн дә кәрәк, ә бына оҙайлы ял көндәре - айырыуса, сөнки балаларҙың да ата-әсәләре менән бергә файҙалы һәм күңелле ял итергә тулы хоҡуҡтары бар. Ә бының өсөн ғинуар календары бик йомарт: Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн фән һәм техника, "Музей һәм балалар" аҙналыҡтары **(4-10)**, Балалар киноһы **(8)**, Балалар уйлап табыу **(17)** көндәре, Балалар телевидениеһы һәм радиоһының тыуған көнө **(18)**, Ҡар көнө. Ҡышҡы спорт төрҙәре көнө **(19)** ата-әсәләр, уҡытыусылар, тренерҙар һәм башҡа яуаплы кешеләр булышлығында балаларҙың ялын мауыҡтырғыс итмәксе. Бынан тыш ғинуарҙа тағы ла Халыҡ-ара "рәхмәт" **(11)**, Ҡурсаулыҡтар һәм милли парктар **(11)**, Прокуратура хеҙмәткәрҙәре **(12)**, Рәсәй матбуғаты **(13)**, Иҫкесә Яңы йыл **(14)**, Рәсәйҙә ҡышлаусы ҡоштар **(15)**, Халыҡ-ара ҡосаҡлашыу **(21)**, Ҡулдан хат яҙыу **(23)**, Рәсәй студенттары (Татьяна көнө - **25**), Халыҡ-ара интернетһыҙ **(26)**, 1944 йылда Ленинград ҡалаһын блокадалауҙы өҙгән **(27)** көндәр билдәләнәсәк.

2020 йылдың ғинуары - көнсығыш календары буйынса Аҡ тимер ҡомаҡ йылын, ә ҡомаҡ йылы 12 йыллыҡ мөсәл циклын башлап ебәрә. Шуға ла йондоҙнамә юраусылар һыуығайға матур өмөттәр бағлай һәм яңы йылды көнсығыш йондоҙнамә буйынса уның билдәһе булған ҡомаҡтарға хас яҡшы мәғәнәлә әрһеҙлек, тынғыһыҙ эшсәнлек, түҙемлек кеүек сифаттар һәм йәшәүгә, маҡсатҡа ныҡышмалы ынтылыш менән башлап ебәреүселәргә уңыштар ғына юлдаш булыр, тап ана шундайҙар тормошонда осрап торған теләһә ниндәй хәлдәрҙән дә сығыр юлдарын табыр, тип күрәҙәләй. Шулай булһын, тип теләйек!

**Һыуығайҙа тыуғандар:**

**1 -** Башҡортостандың халыҡ шағирәһе, С.Юлаев исемендәге БР Дәүләт премияһы лауреаты **Факиһа Туғыҙбаеваға - 70 йәш** (1950).

**2 -** (иҫкесә 14) - шағир, Башҡорт милли әҙәбиәте классигы, Башҡорт автономияһы өсөн милли-азатлыҡ хәрәкәтенең әүҙем эшмәкәре, 1917-1919 йылдарҙа Башҡорт хөкүмәте ағзаһы, "Тулҡын" Бөтөн башҡорт йәштәре берлеге рәйесе **Шәйехзада Бабичтың тыуыуына - 125 йыл** (1895-1919).

**9 -** Башҡортостандың халыҡ шағиры, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Марат Кәримовҡа - 90 йәш** (1930).

**16 -** яҙыусы, прозаик, партия һәм дәүләт эшмәкәре, С.Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Яныбай Хамматовтың тыуыуына - 95 йыл** (1925-2000).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 2019 йылда "Тыуған урам" республика программаһын тормошҡа ашыра башланылар. Мендән ашыу кеше йәшәгән тораҡ пункттарҙа бер үҙәк урам ремонтлана, дөйөм алғанда, был республикала 560 саҡрымдан ашыу тәшкил итә. Шулай уҡ тораҡ пункттарға, яңы биҫтәләргә инә торған юлдарҙы төҙөкләндереү буйынса эш башланған. Урындағы карьерҙарҙың материалдарын файҙаланып, юлдарға ваҡ таш һәм ҡом түшәйҙәр.

✓Өфөлә 2020 йылда ашығыс ветеринария ярҙамы үҙ эшен башлай. Башҡортостандың баш дәүләт ветеринария инспекторы Азат Йыһаншин әйтеүенсә, йыл аҙағында Башҡортостан районтарының ветеринария хеҙмәттәренә 40 автомобиль тапшырыла - ветеринарҙар малдарҙы ҡарау йәки уларға прививка яһау өсөн алыҫ ауылдарға бара ала. Ике "Ларгус" Өфөлә йәнлектәр өсөн ашығыс ветеринария ярҙамы ойоштороуға йүнәлтелә. Хеҙмәт тәүлек әйләнәһенә эшләйәсәк.

✓Киров районының үҙәктән алыҫта ятҡан Искино, Атаевка, Локотки ауыл биләмәләрендә яҡтылыҡ бағаналарына рөхсәтһеҙ урынлаштырылған реклама баннерҙарын алыу буйынса өмә үткәрелде. Ҡануниәткә ярашлы, рөхсәтһеҙ урынлаштырылған иғландар, листовкалар өсөн административ штраф ҡаралған.

✓Ҡытайҙа Xintai Cup халыҡ-ара турниры Башҡортостан шашкасыларының ҙур уңышы менән тамамланды. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында беренсе урында - ғәмәлдәге чемпион Тамара Танһыҡҡужина, өсөнсөлә - Әлиә Әминева. Ир-егеттәр араһында Өфөнән 19 йәшлек Марсель Шәрәфетдинов өсөнсө урынды алды. 14 йәшкәсә ҡыҙҙар араһында икенсе урын - Өфө уҡыусыһы Руфина Таулыҡаевала.

✓Башҡортостан рапирасылары Сочиҙа "Юг Спорт" федераль спорт әҙерлеге үҙәгендә фехтование буйынса Рәсәй кубогында бөтә төр миҙалдарҙы яуланы. Алтын миҙал - Өфө ҡыҙы Анастасия Ивановала, бронза - Башҡортостан спортсыһы Аделина Заһиҙуллинала. Ир-егеттәр араһында алтынды Өфөнән Олимпия чемпионы Тимур Сафин яуланы. Бронза миҙалды Башҡортостан спортсыһы Тимур Арыҫланов алды.

ҠЫҪҠАСА

# ТИҘ ЯРҘАМҒА...

✓ **Декабрь аҙағында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров бер нисә республика клиник һәм үҙәк ҡала, район дауаханаларының баш табиптарына 37 яңы ашығыс медицина ярҙамы машинаһы асҡыстарын тапшырҙы.** Билдәләнеүенсә, һуңғы йыл ярым эсендә республикала тармаҡҡа 200-гә яҡын ашығыс ярҙам машинаһы килде. "С класлы биш автомобиль - реанимация ярҙамын күрһәтеү өсөн кәрәкле ҡоралдар менән йыһазландырылған реанимобилдәр. Уларҙы ауыр сирлеләрҙе республика клиникаларына алып барыу өсөн дә файҙаланыу ҡаралған. Бөгөнгә 190-дан ашыу тиҙ ярҙам автомобиле 5 йылдан күберәк файҙаланылған. Был һан кәмей, сөнки беҙ автопаркты әүҙем яңыртабыҙ, бөтә саҡырыуҙарҙың 98 процентында пациентҡа 20 минут эсендә килеп етәләр", - тип һөйләнә һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин.

✓ **Имамдар, православие руханиҙары, ғаилә менән эшләгән белгестәр, опека һәм попечителлек органдары, отставкалағы судьялар, балалар омбудсмены аппараты, психологтар "Мәғариф" милли проектының "Һәр кем өсөн яңы мөмкинлектәр" федераль проекты буйынса курс үтергә тейеш.** Шул рәүешле белгестәр ғаилә медиаторҙарына әүерелә, тип хәбәр итте республика хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Борис Беляев. "Уҡытыу М.Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның Өҙтәмә белем биреү институты майҙансығында ойоштороло. Тап ошо кешеләр ғаиләләр һәм уларҙың проблемаларын хәл итеү өҫтөндә эшләй, шуға күрә заманса шарттарҙа медиатив технологияларҙы, медиация процедураларын белеү мотлаҡ", - тине вице-премьер. Курс тамамланғас, "студенттар" имтихан бирергә, квалификацияны күтәреү тураһында таныҡлыҡ алырға һәм ғаилә медиаторҙары сафын тулыландырырға тейеш.

✓ **Киләһе йылда Өфөнән халыҡ-ара йүнәлештәр буйынса яңы авиарейстар асылыуы ихтимал.** Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе Тимур Мөхәмәтйәнов һүҙҙәренсә, хәҙер Италияға, Ҡаҙағстанға һәм Азия илдәренә пассажирҙар ағымын баһалау буйынса эш алып барыла. Дәүләт комитеты рәйесе Австрия менән тура авиабәйләнештең кәрәкле булыуын да билдәләне. "Һауа судноһының уртаса тәьмин ителеше 70 процент сиктән кәмемәй. Был йүнәлеш республикала һәм күрше төбәктәрҙә йәшәүселәр араһында һорау менән файҙалана. Татарстан, Пермь, Удмуртстан туристары беҙҙең аэропорт аша Евросоюзға оса", - тине ведомство башлығы. 2020 йылдың 30 мартында Өфөнән Ереванға тура рейс асыла, тип тә хәбәр ителгәйне.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# АВТОБУСТАР - БАЛАЛАРҒА



**Йыл һуңында Өфөлә Башҡортостан муниципалитеттары өсөн федераль аҡсаға һатып алынған мәктәп автобустарын тапшырыу тантанаһы уҙҙы. 37 машина асҡысын Башҡортостан хөкүмәте вице-премьеры Фәнүр Йәғәфәров тапшырҙы. Автобустар ошондай хеҙмәткә мохтаж тағы мең баланы мәктәптәргә йөрөтә аласаҡ, тип билдәләне ул.**

Башҡортостандың Мәғариф министрлығы мәғлүмәте буйынса, 21 муниципалитет (Баймаҡ, Балаҡатай, Белорет, Благовар, Бөрйән, Ғафури, Дүртөйлө, Иглин, Ишембай, Ҡалтасы, Ҡариҙел, Ҡырмыҫҡалы, Ҡыйғы, Кушнаренко, Тәтешле, Туймазы, Өфө, Хәйбулла, Нефтекама, Салауат), шулай уҡ Өфө коррекция мәктәп-интернаты, Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернаты, Илеш коррекция мәктәп-интернаты автобуслы булды. Яңы автобустар ГЛОНАСС спутник навигацияһы һәм тахографтар менән йыһазландырылған. 2019 йылда республика бөтәһе 143 автобус алды. Башҡортостанда 2749 тораҡ пункттан 872 мәктәптең 41951 уҡыусыһын 1436 автобус йөрөтә. Һуңғы өс йылда автобус автопаркы федераль һәм төбәк бюджеттары аҡсаһына даими тулыландырыла, был файҙаланыу ваҡыты үткән автобустарҙы ваҡытында иҫәптән сығарырға, шулай уҡ яңы маршруттар индерергә мөмкинлек бирә, тип билдәләнеләр Мәғариф министрлығында.

# ХӘБӘР ИТЕГЕҘ!

**"Стоп суррогат" акцияһы иғлан ителгәндең тәүге көндәрендә республика Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйына дәүләт комитетының "Ҡыҙыу бәйләнеш"енә халыҡтан рөхсәтһеҙ алкоголь таратыу урындары хаҡында 275 шылтыратыу килде, "Хәүефһеҙ мөхит" порталына 574 сигнал ҡабул ителде. Дөйөм алғанда, 849 мөрәжәғәт алынды.**

Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйына дәүләт комитеты рәйесе Алексей Гусев билдәләүенсә, ялған алкоголь һатырға тырышыуҙан тыш, легаль һатыусылар яғынан ҡануниәтте боҙоу осраҡтары булыуы ла ихтимал. Әйтәйек, байрам көндәрендә хәмер һатыу ваҡыты сикләнә, шулай уҡ 1 ғинуарҙан араҡыға, коньякка һәм башҡа ҡеүәтле спиртлы эсемлектәргә минималь хаҡ арта. Әүҙемселәр рейдтар ваҡытында ошо ҡағиҙәләрҙе үтәүгә лә иғтибар бирә. "Был акция бер тапҡыр ғына үткәрелергә тейеш түгел. Ошо эште артабан да дауам итәсәкбеҙ", - тине "Берҙәм Рәсәй"ҙең төбәк башҡарма комитеты етәксеһе Рөстәм Әхмәҙинуров.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, акцияның шарттары буйынса, йәшерен рәүештә суррогат етештереү һәм һатыу тураһында хәбәр иткән граждандарға аҡса түләнә. Ялған алкоголь етештереүселәр хаҡында мәғлүмәт өсөн - 50 мең һум, һатыусы тураһында - 2 мең һум. Мәғлүмәтте "Берҙәм Рәсәй"ҙең "Халыҡ контроле" партия проектының stopsurogat@mail.ru электрон почтаһына, "Хәүефһеҙ мөхит" порталында, Башҡортостан Республикаһының Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитетына (тәүлек әйләнәһенә) һәм +7 (347) 218-09-87 телефоны буйынса (эш көндәрендә иртәнге 9-ҙан киске 7-гә тиклем) ебәрергә мөмкин.

# ИҪКЕ ТӨРКИ ТЕЛЕН...

**8 ғинуарҙа Өфөлә Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана "Иҫке төрки телен өйрәнеү курсы" проектын башлай. Курсты китапхананың ҡулъяҙмалар һәм һирәк китаптар бүлеге мөдире, филология фәндәре кандидаты Флүр Сибәғәтов алып бара.**

Курсты асыу өсөн Башҡортостандың тыуған яҡты өйрәнеүселәр ойошмаһы рәйесе, Башҡортостан Республикаһы Милли музейының генераль директоры, тарих фәндәре кандидаты Марат Зөлҡәрнәев саҡырылған. "Иҫке төрки теле - революцияға тиклемге осорҙағы яҙма тел, ул шулай уҡ "Волга буйы төрки теле" тип йөрөтөлгән, уны башҡорттар, татарҙар һәм башҡа халыҡтар ҡулланған, - тине ойоштороусылар. - Билдәле булыуынса, революцияға тиклемге архивтар, шул иҫәптән ревизия документтары, иҫәп алыуҙар, генеалогия яҙмалары - иҫке төрки телендә".Иҫке төрки телен өйрәнеү милләттәштәребеҙгә шәжәрә төҙөгән саҡта нәҫел яҙмаларын тикшереүҙә һәм өйрәнеүҙә ярҙам итер, тип раҫлай ойоштороусылар. Беренсе этапта 10 дәрес үткәреү күҙаллана. Дәрестәр Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхананың ҡулъяҙмалар һәм һирәк китаптар бүлегендә ойоштороло (Өфө, Ленин урамы, 4, 1-се ҡат). Көндөҙгө сәғәт 3-тә башлана.

# КИЛӘСӘК ӨСӨН ЭШЛӘРГӘ!

**Өфөлә икенсе Республика мәғариф форумы февралдә ойоштороло һәм ул балалар һаулығына арнала. Был хаҡта "Мәғариф сәғәте"ндә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте.**

"Былтырғы форумда төп мәсьәләләр тураһында һөйләшһәк, биш көнлөк уҡыу тураһында ҡарар ҡабул итһәк, икенсе форумды тулыһынса сәләмәтлеккә арнарға тәҡдим итәбеҙ. Әйҙәгеҙ, киләсәк өсөн эшләйек, беҙгә уҡыусылар һәм студенттар диспансерлашыуы менән эшләү, балаларыбыҙҙың психик һәм әхлаҡи һаулығын нисек һаҡларға кәрәклеген аңлау зарур. Был эшкә ҡушыла башлағыҙ", - тип мөрәжәғәт итте республика етәксеһе кәңәшмәгә килгән министрлыҡ һәм ведомство етәкселәренә. Ошо йүнәлештә эш алып барыла, тип билдәләне Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин. "Мәғариф министрлығы менән берлектә мәктәптәрҙең стоматология кабинеттарын тулыһынса яңырттыҡ, был ремонтлауҙы ғына түгел, ә заманса стоматология ҡоралмалы менән йыһазландырыуҙы ла үҙ эсенә ала. Ҡайҙалыр ошондай кабинеттар балаларҙы ҡабул итә башланы ла инде, - тип хәбәр итте министр. - Диспансерлаштырыуға килгәндә, әле Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ҡатнашлығында өс яҡлы эш алып барабыҙ. Уҡыусылар өсөн психотерапия үҙәген булдырыуға, 12-нән 18 йәшкә тиклемге ҡыҙҙар һәм малайҙарҙың репродуктив сәләмәтлегенә йүнәлтелгән комплекслы программаны бойомға ашырыуға ла ҙур әһәмиәт бирелә". Максим Забелин шулай уҡ республика етәксеһенең иғтибарын ата-әсәләрҙең күбеһенең дәүләт стоматологияһына ышанмай ҡарауына йүнәлтте. "Ысынында, мотлаҡ медицина страховкаһы дәүләт программаһы буйынса хәҙер шәхси клиникаларҙан ҡалышмаған материалдар менән эш итәбеҙ. Дауалау, иҫкәртеү, тешләнеште төҙәтеү - былар ҙың барыһын да эшләйбеҙ. Ошо мәғлүмәтте уҡыусыларыбыҙҙың ата-әсәләренә еткерергә кәрәк", - тип мөрәжәғәт итте министр Радий Хәбировҡа.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓28 декабрҙә "Вся Уфа" телеканалының алып барыусыһы Денис Ғәниев бер тәүлек тура эфирҙа эшләйәсәк һәм Гиннестың рекордтар китабына инәсәк. Үҙ тарихында Өфө рекордтар китабына бары бер тапҡыр - Европаның көнсығыштағы иң сикке географик нөктәһе булараҡ ҡына эләккән. Тура эфир көндөҙгө сәғәт 12-лә башлана.

✓Дим районының "Ярҙам" халыҡты социаль хеҙмәтләндереү үҙәгендә "Тормош тәме " ("Вкус жизни") клубы эшләй башланы. Президент гранты фонды конкурсында еңгән был проект оло йәштәгеләрҙең осрашыу һәм аралашыу урыны буласаҡ. Унда төрлө тематик кисәләр, оҫталыҡ дәрестәре үтәсәк, шулай уҡ психолог менән шәхси консультациялар ойоштороласаҡ, интернетҡа сығыу мөмкинлеге буласаҡ.

✓"Йәш профессионалдар" (WorldSkills Russia) V Асыҡ төбәк чемпионаты сиктәрендә Башҡортостандың һөнәри белем биреү учреждениелары студенттары араһында үткән ярышта Өфө машиналар эшләү һәм Өфө авиация техникумы уҡыусылары призлы урындар яуланы. Чемпионат барлығы 585 вәкилде йыйҙы һәм унда төп категория уҡыусылар араһында - 62, юниорҙар араһында 24 компетенция билдәләнде.

✓Баш ҡаланың Еңеүҙең 50 йыллығы исемендәге скверында "Уфанет" компанияһы, Совет районы хакимиәте, ҡала Советы депутаты Светлана Родионова менән берлектә "Живи активно" проекты ҡатнашыусыларын Яңы йыл менән ҡотланы. Йыйылыусылар төрлө конкурстарҙа, ярыштарҙа ҡатнашты, әйлән-бәйлән уйнаны. Сара һуңында Ҡыш бабай әүҙем тормош алып барыусы скандинавса атлаусыларға киске күнекмәләрҙе хәүефһеҙ үткәреү өсөн ут ҡайтарыусы йәбештергестәр бүләк итте.

✓Киләһе ял көндәрендә "Урал легендаһы" поезды составына бер нисә вагон өҫтәйҙәр. Был хаҡта Башҡортостандың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе Тимур Мөхәмәтйәнов хәбәр итте. Башҡортостанда Өфө - Яңы Абҙаҡ маршруты буйынса "Урал легендаһы" хәрәкәте тергеҙелде.

✓2020 йылда Өфөнән Волгоградҡа тура авиарейстар асыла. Герой-ҡаланан Башҡортостандың баш ҡалаһына беренсе самолет 13 ғинуарҙа юллана. Юлға 2 сәғәт 35 минут ваҡыт китә. Ташыусы киләһе йылда йәнә бер рейс асыласы тураһында белдерҙе. Мартта Өфөнән Пермгә осорға мөмкин.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Берләштерелгән бюджеттан ватандаштарҙың ҡайтыуына тип бирелгән аҡса булып та, улар өсөн бер тин дә тотонолмауы программаға илке-һалҡы ҡараш булыуын күрһәтә.***

*КӨНАУАЗ*

# ҠАЙТЫҒЫҘ, ТИБЕҘ ҘӘ УЛ...

**Сит илдәрҙә йәшәгән ватандаштарыбыҙҙы тыуған илгә ҡайтарыу темаһы күптән инде, Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы үткәрелә башлаған замандарҙан килә. Әммә саҡырыуға ҡушылыусылар әллә ни күп түгел. Хатта республикаға ҡайтҡандарының да ҡайһы берҙәре, бюрократик кәртәләрҙе үтә алмайынса, быға тиклем йәшәгән ерҙәренә кире китергә мәжбүр.**




Былтыр Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең 383-сө ҡарары менән "Башҡортостан Республикаһында хеҙмәт баҙарын көйләү һәм халыҡтың мәшғүллегенә ярҙам итеү" дәүләт программаһының "Сит илдәрҙә йәшәгән ватандаштарға Башҡортостан Республикаһына үҙ теләктәре менән күсеп ҡайтыуҙа ярҙам күрһәтеү" өҫтәмә программаһына үҙгәрештәр индерелде. Уға ярашлы, программала сит илдәрҙә йәшәгән ватандаштар, уларҙың ғаилә ағзалары, шулай уҡ РФ территорияһында ҡануниәткә ярашлы даими йәки ваҡытлыса йәшәүсе ватандаштарыбыҙ ҡатнаша ала ине. Өҫтәмә программа республикаға һаулыҡ һаҡлау, мәғлүмәт-коммуникация технологиялары, мәғариф, ауыл хужалығы, спорт өлкәһендә белем алыусы студенттарҙы һәм хеҙмәткәрҙәрҙе даими йәшәүгә йәлеп итеүгә йүнәлтелгән. Башҡортостанға иректе күсенеү (йәки баш тартыу) мөмкинлеген билдәләнгән категориялар буйынса БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ҡабул итә. Күсенеүселәрҙең килеп урынлашыу сығымдарының бер өлөшө республика бюджеты иҫәбенә ҡаплана. Компенсация Дәүләт программаһында ҡатнашыусы таныҡлығының мөҙҙәте үткәнгә тиклем Халыҡтың мәшғүллек үҙәгенә мөрәжәғәт итеүселәргә бирелә.

Шулай уҡ федераль кимәлдә сит илдәрҙә йәшәгән ватандаштарыбыҙҙы ҡайтарыу буйынса 2020-2022 йылдарға иҫәпләнгән программа раҫланды. Был документҡа ярашлы, ошо йылдар арауығында 197,5 мең ватандашыбыҙҙы ҡайтарырға мөмкин. Рәсәй Федерацияһы субъекттарына күсереүҙең төбәк программаларын финанслау өсөн 300 миллион күләмендә субсидия биреләсәк. Өс йылда был сумма өсөн барлығы 900 миллион һум бүлеү ҡаралған. Шулай уҡ Рәсәй Эске эштәр министрлығының сит илдәрҙәге вәкиллектәр вәкилдәренең, ваҡытлыса эшмәкәрлек төркөмдәренең, дипломатик вәкиллектәрҙең, консуллыҡ учреждениеларының эшен тәьмин итеү маҡсатында йылына 69,7 миллион һум, программала ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына дәүләт ярҙамы өсөн йыл һайын дөйөм сумма - 2,3 миллион һум ҡаралған.

Күреүегеҙсә, ҙур күләмдә аҡсалар бүленә, программа эшләй, ләкин унда төбәктәр нисек ҡатнаша һуң? Былтыр, мәҫәлән, юғары квалификациялы медицина хеҙмәткәрҙәрен ҡайтарырға тырыштылар һәм төбәктәргә был маҡсатта дөйөм алғанда 300 миллион һум аҡса бүленгән. Ни өсөн тырыштылар, сөнки Рәсәй Эске эштәр министрлығы документтарына ҡарағанда, 2019 йылдың тәүге яртыһында Кавказ республикалары, аныҡлап әйткәндә Ингушетия, Дағстан, Адыгея, Ҡарасәй-Черкессия, Ҡабарҙы-Балҡар, Төньяҡ Осетия-Алания программаны үтәүгә тотонмаған да. Әлбиттә, уларға квота ла ҙур булмаған - 20-125 кенә кеше. Алтай крайына 1 меңдән артыҡ, Приморье крайына - 1582. Асыҡланыуынса, Чечняға ғына ватандаштары ҡайтҡан. Документтан күренеүенсә, ватандаштарын ҡабул итеү буйынса Башҡортостан Республикаһы, Пермь һәм Ставрополь крайы, Киров, Кострома, Новгород өлкәләре, Еврей автономиялы өлкәһе тейешле кимәлдә эшләмәгән.

Башҡортостанға был маҡсатта берләштерелгән бюджеттан 850 мең һум аҡса бүленеп, планға ярашлы 180 кеше ҡайтарылырға тейеш булһа, йылдың тәүге яртыһына ғәмәлдә 35 кеше (19,4 процент) ҡайтарылған, әммә улар өсөн бүленгән аҡсаның бер тине лә тотонолмаған. Татарстан Республикаһында хәлдәр тағы ла ҡыҙығыраҡ - унда быйыл 3 миллион 17 мең 600 һум бүленеп, план буйынса 150 кеше ҡайтырға тейеш булһа, ғәмәлдә йылдың тәүге яртыһына 307 кеше ҡайтҡан (204,7 процент), шул уҡ ваҡытта бирелгән субсидияның бер тине лә тотонолмаған.

Ирекһеҙҙән һорау тыуа: программа тураһында ҡайтыусы халыҡ хәбәрҙар түгелме, әллә һаман да бюрократик кәртәләр аша үтеү ҡамасаулаймы? Икенсе яҡтан, республикаға юғары белемле белгестәр генә түгел (улар белемгә ярашлы сит илдәрҙә лә яҡшы эш урыны таба, яҡшы эш хаҡы ала, лайыҡлы тормошон тәьмин итә ала), ә ябай граждандар ҙа ҡайтырға тырыша (тыуған еренән яҡлау, терәк эҙләй). Тәүге категория үҙенең хоҡуҡтарын, ҡайҙа, нисек мөрәжәғәт итергә кәрәклеген белһә, икенсе категория иһә күп нәмәне белмәй тиергә мөмкин, шул сәбәпле тыуған ерендә лә төрлө күнелһеҙлектәр килеп сығып тора. Үрҙә килтерелгән миҫалдар буйынса һығымта яһағанда иһә, берләштерелгән бюджеттан ватандаштарҙың ҡайтыуына тип бирелгән аҡса булып та, улар өсөн бер тин дә тотонолмауы программаға илке-һалҡы ҡараш булыуын күрһәтә һәм ул аҡсаларҙың икенсе маҡсатҡа йүнәлтелеүе ихтимал тигән шик тыуҙыра.

Был йәһәттән РФ Эске эштәр министрлығы эште ҡаты тоторға, йәғни бирелгән субсидия маҡсатҡа ярашлы тотонолмағанда төбәктәргә финанс яза биреүҙе күҙаллай. Ул нисек тормошҡа ашырылыр: ошо сумма кире алынырмы, әллә штраф ҡына һалынырмы - әлегә билдәһеҙ. Баҡтиһәң, "Ватандаштарыбыҙҙы тыуған илдәренә ҡайтарайыҡ!", тип саҡырыу ташлау ғына етмәй, был йүнәлештә контролдә тоторға ла кәрәк икән...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ЯҢЫ ЙЫЙЫЛМАЛА...

● **Башҡортостанда 2020 йылдың 1 мартынан яңы тыуған сабыйҙар өсөн бүләк йыйылмаһына янғынды иҫкәртеү приборы индерелде, тип хәбәр итте Башҡортостан Республикаһының Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты.** Тәүҙә был приборҙар аҙ тәьмин ителгән ишле, шулай уҡ балаһы булған һәм социаль хәүефле хәлдә тип билдәләнгән ғаиләләргә бушлай бирелә ине. Былтырғы йылдың өсөнсө кварталынан был ҡорамалдар яңы тыуған сабыйҙар өсөн бүләк йыйылмаһы менән бергә тапшырыла. Ун бер меңдән ашыу кеше янғынды иҫкәртеү сараһын алған да инде. Бөгөнгә республикала бюджет аҡсаһы иҫәбенә 120 меңдән ашыу янғынды иҫкәртеү ҡорамалы ҡуйылған.

● **2020 йылдың 1 ғинуарынан ата-әсә түләүенең уртаса күләме 1677 һумға тиклем арта.** Республика Мәғариф министрлығының тейешле бойороғо 9 декабрҙә Башҡортостан Республикаһының рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылып сыҡты. "Башҡортостан Республикаһы биләмәһендә урынлашҡан дәүләт һәм муниципаль белем биреү ойошмаларында баланы ҡараған һәм тәрбиәләгән өсөн ата-әсә түләүенең бер айға уртаса күләмен билдәләргә", - тиелә документта. Билдәле булыуынса, бер йыл элек 2019 йылға мәктәпкәсә учреждениеларҙа баланы ҡараған һәм тәрбиәләгән өсөн ата-әсә түләүенең уртаса күләме 1617 һум тип билдәләнгәйне.

● **2020 йылда Башҡортостан өсөнсө һәм артабанғы балаһы тыуған ғаиләләргә пособие түләүгә бәйле сығымдарҙы берлектә финанслау өсөн федераль бюджеттан аҡса аласаҡ.** Федераль аҡса бүленәсәк төбәктәр исемлегендә 75 субъект бар. Уларҙа тыуымдың дөйөм коэффициенты күрһәткесе 2-нән артмай, халыҡтың тәбиғи һәм миграция кәмеүе күҙәтелә. Владимир Путиндың "Рәсәй Федерацияһының демография сәйәсәтен тормошҡа ашырыу буйынса саралар тураһында"ғы май указында ғаиләләргә ай һайын аҡсалата түләү ҡаралған. 2020 йылда түләүҙәрҙе берлектә финанслау өсөн аҡсаның дөйөм күләме 55,3 миллиард һум тәшкил итәсәк, шул иҫәптән 45,8 миллиард һумы - федераль бюджеттан, 9,5 миллиард һумы - Федерация субъекттары ҡаҙнаһынан.

● **Башҡортостан Хөкүмәте хуплаған ҡарар проектына ярашлы, 2020 йылдан алты ҡатҡа тиклемге күп фатирлы йорттарҙа капиталь ремонт өсөн түләүҙең минималь күләме - бер квадрат метр өсөн 6,9 һум (хәҙер - 5,2 һум), ә алты ҡаттан бейегерәк йорттарҙа бер квадрат метр өсөн 7,5 һум (хәҙер - 5,8 һум) була.** "Башҡортостанда күп фатирлы йорттарҙы ремонтлауға тарифтар - илдә иң түбәндәрҙең береһе, ставкалар 2014 йылдан бирле үҙгәрмәгән. Түләүҙең минималь күләме 46 төбәктә артҡан, 2020 йылда Рәсәйҙең тағы 27 субъектында тарифтар ҡиммәтләнә", - тине вице-премьер һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Борис Беляев. 2021-2022 йылдарҙа түләүҙең күләме инфляция кимәленән сығып үҙгәртелә.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Быуындағы кимерсәк ауыртһа

❖ Бер литрлыҡ быяла һауыт ҡыҙыл балсыҡ һәм бер литрлыҡ быяла һауыт кәбәк (он кәбәге) бергә ҡушып болғатыла, бутҡа хәлендә була. Ауыртҡан ергә 1,5 сәғәткә тиклем ваҡытҡа бәйләп ҡуйыла. Аҙаҡ ул урынға май һөртөлә.

### Һуған да ҙур шифа

❖ Үксәләге тире тупаҫланһа, төнгөләккә сей һуған бәйләп ятығыҙ, нәтижәһе яҡшы.

### Баш ауыртып яфалағанда

❖ Һындырғылап ваҡлап арыш икмәгенә яңы ҡайнап сыҡҡан һыу ҡойоғоҙ ҙа, өҫтөн ябығыҙ. Килеп сыҡҡан йылы "бутҡаны" кизе-мамыҡ сепрәккә тигеҙ итеп йәйегеҙ ҙә, икмәкле яғы менән маңлайға ҡуйығыҙ. Икмәк кибеп өлгөрмәҫтән уны алыштырып тороғоҙ. Икмәкле сепрәкте бер минут ял итеп, 20 минут тотоғоҙ. Был бик файҙалы дауа.

### Ҡабаҡ һыуы эсегеҙ

❖ Йыуан эсәк, эс кибеүҙән һәр саҡ интеккәндә яңы сығартылған ҡабаҡ һыуын 2-3 стакан эсегеҙ. Эс йомшара.

❖ Бөйөр насар эшләгәндә, бәүел ҡыуығы ауыртҡанда ҡабаҡты сей килеш ашағыҙ.

❖ Бауыр ауыртҡанда, ҡабыҡланғанда, бауырға бәйле шешенеү булһа, ҡабаҡ йомшағын сей көйө ашау менән бергә дөгө, тары, манный менән бергә ҡабаҡ бутҡаларын да ашау файҙалы.

### Ҡан тамырын холестериндан таҙартыу

❖1 стакан укроп орлоғо, 2 ҡалаҡ бесәй үләне тамыры, 2 стакан бал ҡушып, 2 литр ҡайнар һыу ҡойоп, термоста 2-4 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм ашауҙан ярты сәғәт алда 1 ҡалаҡ эсергә.

❖Көнөнә 2-3 киви емешен ашау ҙа холестеринды кәметә, тәндәге С, Е витаминдарын арттыра. Бынан тыш, даими рәүештә киви ашау ҡанды шыйығайта, йөрәк өйәнәге, башҡа ҡан һауыу, ҡан ойошоуға бәйле ауырыуҙарҙы булдырмаҫҡа ярҙам итә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

**Туй әйберҙәренең традицион йыйылмаһында урын тартмаһы (тартҡы) үҙенә башҡа бер урын алып торған. XX быуатта уның ярҙамында йортта урындыҡ өҫтөнә йыйылған түшәкте биҙәгәндәр.**

Туй барышында ҡыҙҙы яңы йәшәү урынына әҙерләгәндә тартҡыны кәләш ултырған аттың эйәр өҫтөндәге түшәк йәки сергетыштан (ат япмаһы) аша һалғандар. Оло быуын кешеләре тартҡыларҙа сигелгән үҙенсәлекле орнамент фигуралары сихыр һәм боҙомдарҙан һаҡлауҙан тыш, никахлашҡан ир һәм ҡатындың яҡшы тормош ҡороп китеүҙәрен тәьмин итә тип иҫәпләгән. Урын тартмаһы яңы ғына өйләнешкән кешеләрҙе яман күҙҙәрҙән ҡурсыған.



*Урын тартмалары. Үремдәр рәүешендәге биҙәктәр.*

Тартҡы эшләгәндә ҡыҙыл буҫтау таҫмаһына (оҙонлоғо 1,5 м тирәһе, киңлеге 15-17 см) нағышланған ҡара йәки төҫлө бәрхәт таҫма (9-10 см) тегеп ҡуйғандар. Төрлө төҫлө ебәк еп, нәҙек гәрез ярҙамында ҡайығандар. Орнаментҡа тәңкәләр, мәрйендәр, уҡа, ҡош мамығы ҡушылып киткән. Киң ҡаймаға епкә теҙелгән сәйләндәр, муйынсаҡтар, йөн ептән эшләнгән суҡтар тегелгән. Тартманың осо ҡыҙҙарҙың елкәлегенә оҡшаш яртылаш оҙонса түңәрәк формаһына яҡынайтып эшләнгән, аҫҡы яғы сәсәктәр менән тамамланған.



*Тартҡылағы биҙәк фрагменттары.*

Музейҙарҙа XIX быуат аҙағы һәм XX быуат башындағы боронғо әйберҙәр һаҡланып ҡалған. Венгрия этнография музейының башҡорт коллекцияһында Д. Месарош тарафынан 1909 йылда Тупаҡ ауылында (Әбйәлил районы) һатып алынған ебәк менән ҡайылған тартҡы бар. Ҡара бәрхәт таҫмала, кәкерсәктәрҙән торған ғәҙәти комбинациялар "көмбәҙе" кеүек 22 ҡусҡарлы фигура урынлашҡан. Биш тамға аша ҡабатланып килгән алты тажлы оя биҙәктәрҙе орнаменталь композицияға берләштерә. Нағыштың сағыу гаммаһында ҡыҙыл, һары, йәшел, шәмәхә һәм башҡа төҫтәр бар. Был урын тартмаһының үҙенсәлеге - ҡыҙыл ҡаймаһында ҡайылған ваҡ ҡына ике осло ырғаҡтар сылбырында. Тарайтылған өҫкө өлөшөнә йөн ептән оҫта үрелгән оҙон сәсәк беркетелгән.



*Венгрия музейындағы тартҡының орнаменталь рәтен тәшкил иткән тамғалар.*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

**Яңы йыл байрамы менән бер-беребеҙҙе ҡотлағаныбыҙҙа "Яңы йыл менән! Яңы бәхет менән!" тигән һүҙҙәр йыш ҡабатлана. Ғәҙәтебеҙгә инеп киткәнгә шулайҙыр, тим. Ә бәхет тигәнебеҙҙең иҫкеһе-яңыһы бармы икән? Бигерәк тылсымлы, алтын-көмөштән дә затлыраҡ, һис бер үлсәмгә һыймаҫ, ҡарар күҙгә күренмәҫ, ҡасан һәм ҡайҙан килере беленмәҫ бер үтә ҡәҙерле ҡунаҡтай тойола ул бәхет тигәнебеҙ. Бөйөк Рәмиебеҙҙең шиғриәт донъяһында ул тап ошолай нарыҡланған да инде: "Бәхет һәр саҡ һуңлап килер ҡунаҡ..."**

# БӘХЕТЛЕ БУЛАЙЫҠ!



*Сыбыртҡыһы мусала.*
*Уны белгән кеше юҡ*
*Ярай нисек булһа ла...*

Ә шулай ҙа уның ҡасан булһа ла бер тап һине һайларына өмөт итәбеҙ, күңелебеҙ түрендә үҫтергән аллы-гөллө хис баҡсаларыбыҙға йәм биреп, һайрар бәхет ҡошона балаларса ышанып йәшәйбеҙ. Ниңә, шулай түгелме ни: кеше ер йөҙөнә үҙ бәхетен эҙләп табыр өсөн килмәйме һуң?

Нимә һуң ул бәхет? Уның сере нимәлә? Кеше ошо бер туҡтауһыҙ үҙгәреп торған мөхиттә, төрлө хәүеф-хәтәр менән тулы фани донъяла бәхетле була аламы? Кешелек таңынан бирле инде әллә нисә мең йылдар менән һанарлыҡ ваҡыт уҙған, әммә аң-аҡылы камил һәр кеше бөгөн дә ошо хаҡта уйланмай ҡалмайҙыр ул. Боронғосараҡ әйткәндә, бән фәҡирегеҙ ҙә ошо бәхет тип атап йөрөтөлгән изге төшөнсәнең үҙ йәшәйешендәге һәм аңындағы сағылышы хаҡында бер кәлимә һүҙ әйтергә булды.

Минең йәштәштәрем - Бөйөк Ватан һуғышы тип аталған мең ғазаплы ҡырылыштан һуң тыуған быуын. Хәҙер инде ҡорҙаштарым да аҡһаҡалдар йәшенә етте. Алтылағы - алтмышта, тиҙәр. Олоғайһаҡ та, уҙған быуаттың 50-се, 60-сы йылдарын йыш иҫкә алабыҙ. Бала саҡ йылдарыбыҙ ул. Бәхетле инекме беҙ ошо инде бик тә алыҫ ҡалған дәүерҙә?

Бәхетле инек. Хатта ки ныҡ бәхетле булғанбыҙ, тим хәҙер ҙә. Әле лә хәтеремдә, кистәрен кәрәсин лампаһын тоҡандырып, ут алғас, ҡашыяҡта киске ашҡа ултырышабыҙ. Аш-һыуҙан бигерәк, атайыбыҙҙың ни һөйләрен көтәбеҙ. Ул бар нәмә хаҡында ла шул тиклем ихлас һәм мауыҡтырғыс итеп һөйләй белә, тыңлағандан тыңлағы килә. Ә уның һөйләр тарихтары бөткөһөҙ кеүек, мәҙәктәре лә уғата күп. Шиғырҙарҙы ла яттан һөйләй. Әле лә уның мәрәкәләп һөйләгән тауышы (әйле һөйләшендә) ап-асыҡ ишетелгәндәй миңә:

*Һигеҙ кеше бер сана -*
*Нейә китмәй был сана?*
*Китәр ине был сана -*
*Еккән аты бер сама.*
*Шунда утыра бер ғәжби,*
*Күлмәге юҡ, шурт вазми.*
*Кәрткә һалып уйнаған,*
*Үкенесе ҡалмаған.*
*Аныһы тағы нисауа,*

Беҙгә, ишле ғаиләлә үҫкән бәләкәй бала-сағаға, етә ҡала: рәхәтләнеп көләшәбеҙ. Атайыбыҙҙың ошолай кис ултырғандарыбыҙҙа ҡорған әңгәмәләре аша бала күңеленә һеңеп ҡалырлыҡ тәрбиә биреүен мин хәҙер яҡшы аңлайым. Ошо хаҡта иҫләйһең дә, тағы ла нығыраҡ инанаһың - ишле ғаиләлә тыуып үҫеү ҙә бәхеткә тиңдер, тип. Шөкөр, яҡын туғандарың менән һағынышып күрешеү ҙә ҡәҙимге көнитмешебеҙгә яңы бәхетле минуттар өҫтәй.

Кемдәр ауылда тыуып үҫкән, күмәк эштәрҙә ҡатнашыуҙың, ул нисек кенә көс һәм сыҙамлылыҡ талап итмәһен, ниндәй күңелле булыуын яҡшы белә. Күмәкләп бесән сабыу булһынмы, сәсеүҙә һәм уңыш йыйыуҙамы, ауыл өмәләрендәме - барыһы ла дәртле, дарманлы, сәмләнеп китеп, береһенән береһе уҙҙырырға тырышып, ярышып эшләү, ял иткән арала төрлө ҡыҙыҡ-мәҙәктәр һөйләп, мәрәкәләшеү, хуш еҫле яландарҙа бергәләшеп мәтрүшкә сәйен эсеү - былар ҙа һәр кемебеҙҙең хәтеренә үҙенә күрә бәхетле бер миҙгелдәр булып, теркәлеп барған икән.

Атайым, һуғыш инвалиды булһа ла, ғүмере буйы эшләне, беҙҙе лә ҡәҙимге йорт эштәренән бушатманы, үҙенсә баһа биреп, маҡтау һүҙҙәрен дә йәлләмәҫ ине. "Инде уландарым үҫеп-ҙурайып бара, ҡул араһына инделәр, ярҙамсыларым бар", тип атайым ҙурлаһа, шул ыңғайы инәйем дә, арҡабыҙҙан һөйөп, ихлас шатланыр булды. Атҡа менгәндәй тояһың үҙеңде шул саҡта - бала бәхетенең ләззәтен ошолай татыйһың шундай мәлдәрҙә.

Үҫмер ҡорона еткәс, мәктәп балаларын да төрлө эштәргә йәлеп итә инеләр ул замандарҙа. Мин әле лә ысын хеҙмәт мәктәбен үтеүҙе совет йәмғиәтенең иҫ китмәле бер ҡаҙанышы, тип иҫәпләйем. Мәктәп өсөн ҡышҡыға утын әҙерләү, яҙҙарын ағасы һирәгәйгән урмандарҙа ҡарағай ултыртыу, йәйге селләлә сөгөлдөр утау, бесән сабыу, картуф ҡаҙыу, макулатура, тимер-томор йыйыу - һанай китһәң, әллә күпме коллектив эштәрҙә ҡатнашып, хеҙмәт сынығыуы алғанбыҙ икән.

Шулай, 1964 йылдың ямғырлы, һалҡын көҙгө көндәренең береһендә, дәрестәр бөткәс, беҙҙе мәктәп директоры Кәрим Әкәмбатов ағайыбыҙ йыйып алды. "Совхоз баҫыуында мацепура менән алдан ҡаҙып ташланған картуф ямғыр аҫтында ята. Дәрестәрҙән һуң шунда картуф йыйырға барығыҙ", - тине. 5-се класта ғына уҡыһаҡ та, беҙҙе лә төрлө эштәргә ҡатнаштыралар. Быҫҡаҡлап ямғыр яуа ла яуа. Класташым Рафил менән икәүләшеп киттек бәрәңге сүпләргә. Башҡа бер кем дә килмәне баҫыуға. Шулай ҙа тырышабыҙ, биҙрәләребеҙҙе тултырабыҙ ҙа, трактор арбаһына илтеп һалабыҙ. Һөрөп ташланған ер бысраҡ, көскә-көскә атлап йөрөйбөҙ. Бер мәл баҫыу ҡырыйындағы юлдан үтеп барған "бобик" машинаһы туҡтаны ла, унан төшкән ыҫпай плащлы таныш булмаған бер ир-егет эргәбеҙгә килде. Беҙ дуҫым менән һағайып, уға төбәлдек. Был кеше беҙҙең бында ни эшләп йөрөүебеҙҙе һорашты, исем-шәрифтәребеҙҙе блокнотына яҙып алды ла, һалҡында ҡыҙарған, ҡарайып ҡатҡан ҡулдарыбыҙҙы ҡыҫып, маладис егеттәр икәнһегеҙ, тип, маҡтап та ебәрҙе. Тәүҙә бер аҙ шөрләберәк киткәйнек, хәҙер инде эсебеҙгә йылы инде. Көҙгө эштәр тамамланғас, иптәшем менән миңә мәктәп линейкаһында ВЛКСМ-дың Ҡыйғы райкомының Маҡтау грамоталарын тапшырҙылар, ә совхоз эшебеҙ өсөн 14-әр һум аҡса ла яҙған икән. Эй, рәхәт булды шунда: маҡталдыҡ та, байыныҡ та бит!

Ғүмеремдең байтаҡ йылдарын педагогик хеҙмәткә бағышланым. Уҡытыусылыҡ вазифаһы ла кешегә шәхес булараҡ күп мөмкинлектәр бирә, тәбиғи һәләттәрен үҫтерә. Иң мөһиме - һин йөрәгеңдә, күңелеңдә яралған ынйыларҙы башҡаларға өләшә алыу бәхетенә эйәһең.

2012 йылдың авгусы тормошомдағы иң гүзәл, иң ғәмле, иң бәхетле миҙгелдәрҙең береһе булып ҡаласаҡ. Шул айҙа күңелем түрендә йөрөткән бер оло хыялым ғәмәлгә ашты - бер төркөм арҡаҙаштарым менән данлы 112-се Башҡорт атлы дивизияһының яу юлдары буйлап Өфөнән Берлинғаса барып етеп, тиҫтәләгән туғандар ҡәберлектәренә ерләнгән башҡорт яугирҙары хөрмәтенә тере сәскәләр һалып, башҡорт данын бик күп замандаштарыбыҙ хәтерендә яңыртып, бөткөһөҙ сауаптар алып ҡайтыу насип булды.

Кеше тормошо шау бәхеттән генә тормай, әлбиттә. Донъялар беҙгә бер алдын, бер артын күрһәтеп ала. Бәләҡазаларҙан, яман хәлдәрҙән, иманһыҙ бәндәләр ҡылған яуызлыҡтарҙан да азат түгелбеҙ. Тик шуныһы: ауыр кисерештәр, ғазаплы мәлдәр беҙҙе урап ҡына уҙһа, ысын бәхеттең ни икәнен дә, уның ҡәҙерен дә һис белмәҫ инек. Йәнә бер фекер: һәр ҡайһыбыҙҙың яҙмышы үҙ ҡулында, шул уҡ ваҡытта башҡаларҙы бәхетле итә алғандарыбыҙ ғына ысын бәхет тойғоһон кисерә ала.

Хәтерләй китһәң, һәр кемебеҙ үҙ тормошондағы бәхетле мәлдәрен барлап, осона ла сыға алмаҫ ине. Эйе, балалар өсөн "Чук һәм Гек" әҫәрен ижад иткән Аркадий Гайдар менән килешмәйенсә булмай: бәхет тигәненде һәр кем үҙенсә аңлай ул. Һәм намыҫлы йәшәү, күп эшләү, тыуып үҫкән ғәзиз еренде, ватанынды ысын күңелдән һөйөү бар кешене лә бәхетле итә ала. Әйҙәгеҙ, туғандар, бәхетле булайыҡ!

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# БЕҘ ҮҘЕБЕҘ ҒӘЙНӘЛӘР!

**Ғәйнә ырыуы башҡорттарының килеп сығышы һәм боронғораҡ осорҙарҙағы тарихы ғилми яҡтан әлегә тиклем тулыһынса асыҡланып бөтмәгән. Ғәйнә атамаһы, башҡа бер башҡорт ырыуҙары исемдәренән айырмалы рәүештә, төрки этнонимдары араһында бөтөнләйгә осрамай, шулай уҡ урта быуаттарға ҡараған тарихи сығанаҡтарҙа ошо атама менән бәйле мәғлүмәттәр табылмаған. Географик яҡтан башҡа башҡорт ырыуҙарынан ситтәрәк йәшәүсе ошо ҡәүемдең ни сәбәпле ғәйнә тип исемләнеүе хаҡында ла төрлө фараздар бар.**




Билдәле башҡорт филологы, фольклорсы Ә.Н. Киреев, ғилми экспедицияларға сығып, урындағы халыҡ вәкилдәренән ғәйнәләрҙең космогоник легенда-риүәйәттәрен яҙып ала. Ошо ҡар һыҙҙарға ярашлы, ғәйнәләрҙең ата-бабалары мистик батырҙарға тинләнеп, "иң тәүге башҡорттар" рәтенә индерелә. Ошо хаҡта ғалим бына нисек яҙа: "Тол (Тулва) йылғаһы буйына ағалы-энеле Ғәйнә һәм Әйнә килеп сыға. Ҡайһы бер варианттарҙа улар күктән төшә, икенселәрендә - ҡарлы илдәрҙән килә. Улар изге болан менеп йөрөй. Бер саҡ болан туҡталып, тибенә башлай. Ошо урында ир туғандар яуыз хужабикә Тулава ("тул" - ут, "ава" - хужабикә, эйә) йәшерен киткән утты таба. Улар ут эйәһе менән алышҡа сыға. Туғандарҙың береһе һәләк була. Икенсеһе, Ғәйнә исемлеһе, ут эйәһе булған ҡатынды еңгәс, ер аҫтындағы утты өҫкә сығара һәм уны, болан тиреһенән яһалған тоҡҡа һалып, Тол йылғаһының көньяҡ ярына алып бара. Бында ул йәйләү ҡороп, үҙ илен нигеҙләй, Ғәйнә ырыуын башлаусы зат булып китә".

Ошо риүәйәттең бер вариантында ир туғандар ер аҫтына йәшерелгән ҡояшты сығара. Икенсе осраҡта улар ер аҫтынан һыу сығара, шунан Тол йылғаһы бар була. Ошонда йәшәгән халыҡты тулвин, йә иһә тулбуй кешеләре, тип атай башлайҙар. Быны беҙ ғәйнәләрҙең фин-угыр ҡәбиләләре менән булған боронғо бәйләнешенә бер дәлил итеп ҡарай алабыҙ. Ысынлап та, мари һәм мордва телдәрендә Тулва һүҙе "ут хужабикәһе", а карелдарҙа "һыу хужабикәһе (инәһе)" тигәндә белдерә. Ғалимдар В.И. Васильев һәм С.Н. Шитова ошо ғәйнә легендаһында көньяҡ Себерҙә киң таралған боронғо болан культы сағылышына иғтибар иткән.

Ғалим-этнограф Р.Ғ. Кузеев ғәйнә ырыуының тарихи тамырҙары хаҡындағы ҡарашын уларҙың боронғо риүәйәттәрендә һаҡланып ҡалған мәғлүмәттәр нигеҙендә белдерә. Шуға ярашлы, ғәйнәләр үҙҙәренең ата-бабаларының Булгарҙан сыҡҡан төп башҡорттар булып, Минзәлә яғынан күсеп килеүҙәре хаҡында һөйләй. XIX быуат башында рус тикшеренеүсеһе Н. Попов ғәйнә ырыуы вәкилдәренән уларҙың тархандар тоҡомонан булыуҙары хаҡындағы мәғлүмәтте яҙып алған. Р.Ғ. Кузеев та ғәйнәләрҙең "тарханлығын" венгрҙарҙың таръян этнонимы менән бәйле булыуына ишаралай. Ғәйнә этнонимына легендар Ғәйнә сығанаҡ икән, башҡорттарҙың йәнәй ырыуына уның бер туғаны Әйнә тап килә. Уныңса, был осраҡта венгр ғалимдары Д. Паулер, Д. Немет һәм Э. Мольнарҙың башҡорттарҙың йәнәй ырыуы атамаһының боронғо венгр ҡәбиләһе йенё исеменә тап килеүе хаҡындағы фекерен иғтибарға алырға кәрәк. Шуға нигеҙләнеп, Р.Ғ. Кузеев ғәйнә, йәнәй, юрмый һәм юрматы ырыуҙары башҡорттарының Урал араһында йәшәгән мадъяр ҡәбиләләре союзы - Бөйөк Венгрия (Magna Hungaria) менән бәйләнешле булыуын фараз итә.

Ғәйнәләрҙең артабанғы тарихы уларҙың IX-X быуаттарҙа Көньяҡ Урал киңлектәрендә таралып көн иткән башҡа башҡорт ырыу-ҡәбиләләре мөхите менән бәйле. Ошо хаҡта Р.Ғ. Кузеев былай тип яҙа: "Ғәйнә-тархандарҙың ата-бабалары, йәнәй, юрматы-юрмыйҙыҡылар кеүек үк, боронғо башҡорттарҙың (үҫәргән, бөрйән, тыңғәүер һ.б.) Урал янына миграцияһы айҡанлы уларҙың өҫтөнлөклө этник мөхите йөгонтоһона эләгә һәм улар менән бергә боронғо башҡорт этносының үҙәген тәшкил итә". Шулай ҙа улар, ғалим фекеренсә, Волга булгарҙарының мәҙәни мөхитенән дә айырылмай. Ошоға дәлил рәүешендә ул академик А.Н. Самойловичтың төрки халыҡтарының аҙналағы көн атамалары хаҡындағы тикшеренеү материалдарын килтерә. Баҡтиһән, Пермь башҡорттарында (ғәйнәләрҙә) һәм сыуаштарҙа (улар булгар теле варисҭары) аҙнаның дүрт көнө исемдәре тап килә икән: дүшәмбе - туған көн, шишәмбе - атланған көн, шаршамбы - ҡан көн, шәмбе - ҡоро көн. Был осраҡта А.Н. Самойловичтың ғәйнә башҡорттарының һәм сыуаштарҙың ата-бабаларының Хазар ҡағанаты дәүеренә барып тоташҡан боронғо мәҙәни бәйләнештәре хаҡындағы фекере ғәйнә риүәйәттәрендәге "Булгар иленән килгәнбеҙ", тигән мәғлүмәткә тап килә. Ошонан сығып, Р.Ғ. Кузеев ошондай һығымта эшләй: "Шулай итеп, беҙ ғәйнәләрҙең ата-бабаларының юрматы, юрмый, йәнәй, бүләр һәм кесе ырыуҙары кеүек үк, булгар-угыр солғанышында булыуын ныҡлы асыҡланған факт итеп билдәләй алабыҙ".

Ғәйнәләрҙең тарихи килеп сығышында Алтай, Урта Азия менән бәйле ниндәй ҙә булһа мәғлүмәт табылмауы был этник берләшмәнең Волга - Урал араһында автохтон ҡәүем булараҡ формалашыуы хаҡындағы һығымтаға килтерә. Күрәһең, ғәйнәләр ҙә, Р.Ғ. Кузеев билдәләп үткән ҡайһы бер башҡорт ырыуҙары менән бер рәттән, Көнсығыш Европа территорияһында, көнбайыш һундарҙың мәҙәни һәм этник йөгонтоһо мөхитендә халыҡтарҙың бөйөк күсеше дәүеренән үк (II-V быуаттар) боронғо иран (сармат-алан) һәм угыр сығышлы ҡәүемдәрҙең тығыҙ аралашыуы һәм ҡушылыуы (метисация) һөҙөмтәһендә формалашҡан.

Боронғораҡ осорҙарҙа үҙәрәк билдәләп үтелгән башҡорт ырыуҙары вәкилдәренең аралашыу теле лә башҡасараҡ булып, күп быуаттар арауығында үҙгәрә - ҡыпсаҡлаша барғандыр, тигән фекер ҙә урынлы. Был процестың Көньяҡ Урал араһында XII быуат ғалимы Мәхмүт Ҡашғари телгә алған төрки телле башҡорт ҡәбиләләренең үтеп инеүе менән бермә-бер бәйле булыуына шик юҡ. Әйтергә кәрәк, ошо тел белгесе ул заманда булгар, хазар, сувар (сыуаш) һәм бәшнәк халыҡтары телдәрен башҡа төрки ҡәүемдәре телдәренән айырылыбыраҡ торған икенсе төркөмгә индергән. Боронғо башҡорт теленең дә төркиҙәрҙең уғыҙ телләләр төркөмөнә яҡын булыуын шул уҡ М. Ҡашғари ҙа теркәп ҡалдырған. Шул ыңғайы "Суй-шу" ҡытай хроникаһында (VII б.) иҫкә алынған ба-шу-кили (башҡорт) ҡәүеменең уғыҙҙарҙың Теле конфедерацияһына ҡарауы хаҡындағы мәғлүмәттең әлеге фекерҙе ҡеүәтләп тороуын билдәләмәй булмай. Рәсәй лингвисы, тюрколог А.В. Дыбо ла ошондай уҡ һығымтаға килгән: "Башҡорт теле, үҙенең нигеҙендә уғыҙ теле булып, бер нисә тапҡыр ҡыпсаҡлашыуға дусар булған: монгол дәүеренә тиклем һәм Алтын Урҙа осоронда".

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне. (Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Дивизияның тыуыуы

Дәүләт Оборона Комитеты ҡарарын үтәү өсөн кисектергеһеҙ ойоштороу саралары билдәләү һәм ғәмәлгә ашырыу башлана, был эшкә республикабыҙҙың барса халҡы йәлеп ителә. Ошо трагик һәм бер үк ваҡытта героик дәүерҙе асығыраҡ һәм аныҡыраҡ күҙ алдына килтереү өсөн дәүләт архивтарында һаҡланған ҡайһы бер документтарҙы башҡортсаға тәржемә итеп, һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ.

**ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты бюроһы һәм БАССР Совнаркомының ике башҡорт атлы дивизияһын формалаштырыу тураһындағы ҡарары**

17 ноябрь 1941 й.

1. Дәүләт Оборона Комитетының ике башҡорт атлы дивизияһын формалаштырыу тураһындағы 1941 йылдың 13 ноябрендәге 894-се һанлы ҡарарын хупларға һәм тайпылышһыҙ үтәүгә алырға.

2. Дәүләт Оборона Комитетының атлы дивизиялар формалаштырыу буйынса ҡарарын үтәүҙе Башҡортостандың барса йәмәғәтселегенең мөһимдәрҙән мөһим бурысы итеп һанарға. ВКП(б)-ның райком һәм ҡала комитеттары секретарҙарына, район/ҡала башҡарма комитеттары рәйестәренә һәм райвоенкоматтарға хәҙер үк дивизияларҙы формалаштырыу өсөн урындағы милләттәрҙән - физик яҡтан таҙа, ныҡ һәм әхлаҡи тотороҡло, 40 йәштән олораҡ булмаған башҡорт һәм татарҙарҙан кешеләр һайлап алыуҙы тәҡдим итергә.

3. Атлы дивизияларҙы формалаштырыу һәм матди яҡтан тәьмин итеү буйынса ғәмәли эштәрҙе башҡарыу өсөн иптәштәр Ваһапов (рәйес), Буренкин (рәйес урынбаҫары), Ибраһимов, Спорыньин һәм Нәбиуллина (ағзалар) составындағы комиссия булдырырға. Райондарҙа һәм ҡалаларҙа - комиссиялар составында ВКП(б) райкомы, горкомы секретары, хеҙмәтсәндәр депутаттарының район/ҡала башҡарма комитеты рәйесе, район/ҡала хәрби комиссары.

4. Өлкә комиссияһына формалашыусы дивизияларҙы тәьмин итеүҙең барса төрҙәре буйынса саралар билдәләргә һәм 1941 йылдың 20 ноябренә ВКП(б) өлкә комитеты бюроһына һәм Башҡорт АССР-ы ХКС-ына раҫлау өсөн индерергә.

5. ВКП(б)-ның район һәм ҡала комитеттарынан, район/ҡала башҡарма комитеттарынан, район/ҡала военкоматтарынан атлы дивизияларға саҡырылыусы һәр кемде шәхси, йәмәғәт (колхоз) һәм район ресурстары иҫәбенә обмундирование һәм кәрәк-яраҡтар (аҡ дуплы ҡыҫҡа тун һәм ҡолаҡсын бүрек, итектәр, һырылған салбар, гимнастеркалар, ике пар эске кейем, уларҙың береһе йылы, ике пар йылы силғау, йөн бирсәткә-бейәләй, ике таҫтамал, ҡулъяулыҡтар, бил һәм салбар ҡайыштары, биштәр, котелок, фляга, кружка, ҡалаҡ һәм ҡырыныу приборы) менән тәьмин итеүҙе талап итергә.

6. ВКП(б)-ның район һәм ҡала комитеттарынан, район/ҡала башҡарма комитеттарынан, район/ҡала военкоматтарынан һәр бер саҡырылған яугирҙы иң яҡшы строевой ат, кәрәк-яраҡтар - ҡайыш нуҡта, йүгән, һоло тоҡсайы, щетка, ҡырғыс һәм бер центнерҙан да кәм булмаған һоло менән тәьмин итеүҙе талап итергә.

7. Формалашыусы дивизияларҙы мобилизацияһы тамамланған һәм фронтҡа китеүсе 74-се, 76-сы атлы дивизиялар базаһында Благовещен һәм Өфө райондарында дислокациялауҙы маҡсатҡа ярашлы, тип иҫәпләргә.

8. ВКП(б) өлкә комитеты бюроһы һәм Башҡорт АССР-ы Совнаркомы башҡорт атлы дивизияларын формалаштырыу эшенә айырыуса сәйәси әһәмиәт бирә һәм Ленин-Сталин партияһы эшенә ахырынаса тоғро, беҙҙең тыуған илебеҙҙе һуңғы тамсы ҡаны ҡалғанса, дошманды тулыһынса тар-мар иткәнсе һаҡларға һәләтле кешеләрҙән яугирҙар һәм командный-сәйәси состав туплап, большевиктарса ойошҡан боевой дивизиялар формалаштырыуҙы Башҡортостан партия ойошмаһының һәм Башҡортостан республикаһының барса хеҙмәтсәндәренең намыҫ эше, тип ҡарай.

ВКП(б) өлкә комитеты секретары И. Аношин
БАССР ХКС рәйесе С. Ваһапов

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне. (Дауамы бар).**

# РУХИ ХАЗИНАБЫҘ

## ауылдарыбыҙҙы

**Яңы тыуған йылыбыҙ ҙа ваҡиғаларға, байрамдарға, ығы-зығылы мәшәҡәттәргә бай булмаҡсы. Шуларҙың иң мөһимдәре - Халыҡ-ара фольклориада, Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығы, Бөтә Рәсәй Халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы. 2019 йылда башланған оло афәткә - эскелеккә ҡаршы көрәштең һөҙөмтәләре лә байрам кәйефе тыуҙырыр бер ваҡиға булыр, тигән өмөт бар. Ошолар тураһындағы һорауҙарыбыҙға был юлы Башҡортостан Республикаһы Стратегик тикшеренеүҙәр институты матбуғат секретары Ғәзиз ЙОСОПОВ, БДУ-ның Сибай филиалы уҡытыусыһы Гөлкәй СӘМЕРХАНОВА, Әбйәлил районы Хәлил мәктәбе уҡытыусыһы Радик ӨМӨТҠУЖИН ситтән тороп яуап бирҙе.**

**Яңы йылда беҙ көткән мөғжизәләрҙең иң мөһимдәре - халҡыбыҙ айыҡ булһын, эшле булһын, ишәйһен, үҙ еренә үҙе хужа булһын, тигән теләктәр бит инде. Ошолар хаҡында һеҙҙең һүҙ ниндәй булыр?**

**Радик Өмөтҡужин:** Тормоштоң уйын түгел икәнен аңлаған хәлдә лә, күңел тигәнең һәр саҡ мөғжизә көҫәй - хыялдарҙың уйламаҫтан тормошҡа ашыуы (йәғни мөғжизә булараҡ ҡабул ителеүе) еңеллек тойғоһо бүләк итә, аңлашылмаған көс барлыҡҡа килә. Әммә ваҡытлыса булған ҡыуаныс күңелде оҙаҡ ҡәнәғәтләндермәй, ул тағы ла кәйеф-допинг һорай. Шулай эгобыҙҙы әпеүләй торғас, был тормошта йәшәүебеҙ үҙе бер мөғжизә икәнен онота, асылыбыҙы юғалта башлайбыҙ, мөғжизәгә бай булған бала сағыбыҙҙан алыҫлаша барабыҙ, тәбиғәтебеҙҙән, асылыбыҙҙан, Хәҡикәттән, Хаҡ Тәғәләнән алыҫлашабыҙ. Ә инде халҡың өсөн мөғжизә көткәндә шәхси кисерештәреңдең бер сүп кенә икәне аңлашыла - үҙеңдең бөйөк халҡыңдың бәләкәс кенә улы булыуыңды төшөнәһең. Бөйөк халыҡ өсөн төп мөғжизә - ата-балаларҙың йолалары, иле, теле һаҡланыуы һәм мәңгелеккә табан барған юлы өҙөлмәүе. Ә беҙгә, милләттәштәребеҙгә, шул юлдан тайпылмай изге ғәмәлдәр ҡылып йәшәү, донъяны ихлас ҡабул итеү иң ҙур мөғжизә түгелме ни? Ә инде бөйөк халҡыңдың бөйөк улы булырға ынтылыу әлеге лә баяғы Хәҡиҡәттән ситләштерә, эго-нәфсебеҙ үҙ яғына тарта башлай. Үҙ минеңде еңеп, халҡыңдың кескәй генә өлөшсәһе булыу - бына ҡайҙа ул мөғжизә! Ата-бабаларыбыҙ быны бик яҡшы аңлаған, бер тел аша, ғөрөф-ғәҙәттәр аша, нығынған йолалар аша мәңгелектең ни икәнен яҡшы төшөнөп, йәндәрен аямай, Уралым, тип, ойошоп йәшәгән. Ул осорҙа глобалләштереүҙең аҫтыртын технологиялары, бәлки, примитивыраҡ булғандыр. Әммә парадокс шунда: ата-бабаларыбыҙҙың аңы-аҡылы бөгөнгө глобалләштереүгә лә ҡаршы тора алыр ине, тип уйлайым. Киләсәктә милләттәштәр ошондай аң-аҡылға эйә була алһын ине, тип хыялланам. Ул саҡта бөгөн оло бәлә итеп күргән эскелек тә, эшһеҙлек тә булмаясаҡ беҙҙең арала.

Эйе, айыҡ тормош, ғүмүмән, айыҡ аҡыл менән йәшәү үҙе мөғжизә бөгөн. Иҫерек аҡыл бөгөнгө балалар виртуаль донъяға ҡасҡан аҡыл менән бәрәбәр - алдай, ымһындыра, әммә ҡәнәғәтләндермәй. Интернет селтәре сарсар һыу һымаҡ бөтөн донъяны баҫып алған, унан ҡотолор әмәл юҡ. Ә бына иҫерек тормоштан бөтөнләй ҡотолғандар, ул юлға бөтөнләй аяҡ баҫмағандар үҙ үрнәге менән унан ҡотолоп була икәненә асыҡ миҫал. Миненсә, эскелеккә ҡаршы көрәшеүгә ҡарағанда, айыҡ тормош өсөн шарттар булдырыу күпкә отошлораҡ һымаҡ.

Ишәйеүгә килгәндә, беҙҙең ҙур ауылда былтыр бер генә бала тыуһа, быйыл бөтөнләй юҡ! Уйландыра, хафаландыра. Ауылда тыуырға тейешле балаларҙың яҙмышы тамырынан ҡырҡыла. Мөғжизәме был? Юҡ, был - ысынбарлыҡ!

**Ғәзиз Йософов:** Аҡыллы эштең башы хәмер була алмай, әлбиттә. Кеше, ғөмүмән, йыл буйы айыҡ йәшәһә, эш тә, кәсеп тә табыр, ишәйер ҙә, үҙ еренә хужа ла булыр. Ғалимдарыбыҙҙың быйылғы "Демографик доклады"нда шул һыҙыҡ өҫтөнә алынған: үҙенә ҡул һалыуҙарҙың төп сәбәбе - алкоголь! Эскән килеш эште лә боҙалар, һуғышалар ҙа, ғаиләләрендә көс тә ҡулланалар. Бигерәк тә Яңы йылда күптәр өҫтәлен хәмерһеҙ күҙ алдына ла килтерә алмай. Республикабыҙҙа тап Яңы йыл байрамында спиртлы эсемлек һатмауҙарын, әлбиттә, яҡшыға юрайбыҙ. Әммә: "Кешеләр барыбер көмөшкәселәрҙе, "фанфурщиктарҙы" байытасаҡ", - тигәнде лә ишетәбеҙ. Уларға ҡаршы закон саралары ла бар икәнен онотмайыҡ әле.

**Гөлкәй Сәмерханова:** Халыҡтың тормошо ыңғай яҡҡа үҙгәрһен өсөн ниндәйҙер тылсым, мөғжизәне көтөп кенә ятырға ярамай. Халҡыбыҙ айыҡ, эшле булһын өсөн әҙмә-эҙлекле, маҡсатлы эшләргә кәрәк. Әммә бында ла үҙгәрештәрҙең "өҫтән" төшөүен генә көтөп ултырырға түгел, бының өсөн һәр кем көс һалырға, тырышып эшләргә тейештер. Әле ҡасан ғына халҡыбыҙға афәт булып янаған эскелеккә ҡаршы аяуһыҙ көрәш башланыуы айырыуса һөйөндөрә. Республикала "Айыҡ ауыл" конкурстары үткәрелә, иҫерткес эсемлектәр менән сауҙа итеүсе легаль булмаған "нөктәләр" ябыла. Хәҙер хатта һатыу итеүселәрҙең исем-адрестары тураһындағы мәғлүмәт өсөн аҡсалата премия ла ҡаралған... Һуңғыһы менән бик килешеп етмәһәм дә, был - ирекһеҙҙән ҡабул ителгән сара тип уйлайым. Әммә тыйыу кире һөҙөмтә бирмәһен өсөн кешеләрҙе аңлы рәүештә эскелектән баш тартырға тейештер. Бының өсөн халыҡты спортҡа ылыҡтырыу өсөн төрлө спорт түңәрәктәре, спорт секциялары, тренажер залдары, фитнес клубтар даими (идеаль вариантта бушлай, йә арзан хаҡҡа) эшләргә тейеш.

Унан һуң, эш юҡ тип зарланып ултырыуҙан да файҙа юҡ, эшләйем, йәшәйем тигән кеше йүнен таба. Күп кенә таныштарымдың үҙ эштәрен асырға йөрөүе һөйөндөрә мине.

**Халҡыбыҙҙың күпселеге ауылдарҙа йәшәүен күҙ уңында тотҡанда, борсолоуҙарыбыҙ ҙа шул юҫыҡҡа төбәлгән.**

мәсьәләләр менән бер рәттән, ауыл биләмәләрен төҙөкләндереү, уға заманса төҫ биреү бурысы ла ҡуйылды бит. Быйылғы 2020 йыл Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров указы менән "Тораҡ пункттар эстетикаһы" йылы тип иғлан ителеүе лә осраҡлы түгел. Әлбиттә, проблемалар бар һәм уларҙы хәл итергә кәрәк. Мәҫәлән, ауыл халҡының үҙ шәхси хужалығында етештергән ит, һөт, май һәм бүтән малсылыҡ тауарҙарын тирә-яҡтағы төбәктәрҙән килгән алыпһатарҙар арзан ғына хаҡҡа алып китеп тора. Шуға ла ғалимдарыбыҙ ҡатнашлығында булдырылған агросәнәғәт кооперативтары программаһын әүҙемерәк эшләтеү кәрәк. Етештерелгән сеймал үҙебеҙҙә эшкәртелһен, шулай уҡ ситкә лә һатылһын. Мәсьәлә эшкәртеүҙә генә түгел, ә һатыуҙа, йәғни маркетингта ла.

**Гөлкәй Сәмерханова:** Ауылдарҙы һаҡлап ҡалыу өсөн иң тәүҙә унда йәшәү, ғаиләне аҫрау өсөн уңайлы шарттар булдырырға кәрәк. Әгәр ҙә ауылда медицина пункты юҡ икән, балаларға белем алыу өсөн көн һайын ҡырҡ бәлә менән күрше ауылдарға барып уҡырға, йә булмаһа, ата-әсәһен һағына-һағына интернатта ятып уҡырға тура килә икән, әгәр ҙә килем алырҙай эш шәү менән ҡалала йәшәүҙең тәме башҡа - береһе ебәрмәй, икенсеһе әүрәтә, ымһындыра. Колхоз-совхоздар бөткәненә ике тиҫтәләп йыл үтһә лә, бер тин эш хаҡы алмаған ауыл халҡы йүнен табып йәшәүен дауам итә: элеккенән күберәк мал көтә, ҡош-ҡорт үрсетә, йәшелсә-емештән уңыш йыя. Ауылда эштән күп нәмә юҡ. Халҡыбыҙ тырыш, эшкә шәп, ихлас. Тик... кәсеп итә белмәй. Күпме көс сарыф итеп тапҡан малын аҡсаға әйләндерә алмай. Быны аңлап алған сосораҡ милләттәштәребеҙ, ситтән килгән кешеләр әрһеҙләнгәндән-әрһеҙләнә: халыҡ етештергән тауарҙы осһоҙораҡҡа алып, ҡиммәткә осороп килем ала. Гел уйлайым, хөкүмәт ярҙамы менән элекке әҙерләү конторалары (заготконтора) тергеҙелһә, ауыл тын алып ҡалыр ине. Ни тиһәң дә, аҡса ауылда ла кәрәк бит.

**Урындарҙа ғәфү иткеһеҙ сәйәси күрәгаралыҡ эҙемтәһе булған оптималләштереү хаталары төҙәтелә башланы, ахры. Республиканың яңы етәкселегенең тағы ниндәй эштәрен хуплайһығыҙ? Башҡортостан Башлығы менән осрашырға тура килһә, эшләнеп етмәгән, эшләнергә тейешле ниндәй эштәр тураһында һөйләр инегеҙ?**

**Ғәзиз Йософов:** Башҡортостан Башлығы бөгөнгө проблемаларҙы ла күҙҙән ысҡындырмай, республиканың стратегик үҫешеүенә лә нигеҙ ҡора. Әйтәйек, Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһы юҫығында Рәсәй төбәктәренә айырым иғтибар бүленә башланы. Башҡортостан көндәре унда башҡорттар күпләп йәшәгән урындарҙа ғына түгел, ул субъекттарҙың үҙәктәрендә лә фәнни-ғәмәли конференция рәүешендә үтте. "Башҡорттар туғыҙ субъекттың төп халҡы" тип асыҡтан-асыҡ әйтелде. Башҡорт теленә айырым иғтибар бүленеүе балалар сегментынан да билдәле: мәҫәлән, бер йәшлек кенә ҡыҙым "Балалар" студияһының йәнһүрәтен айырылмай ҡараны. Был ысын мөғжизә булды беҙҙең ғаилә өсөн.

**Гөлкәй Сәмерханова:** Ысынлап та, Радий Хәбиров республикаға ҡайтыу менән "хаталар өҫтөндә" эш башланды кеүек. Бөтә өлкәлә лә тәртип урынлаша башлауын күрмәү мөмкин түгел. Уның "ҡул менән идара итеү" алымынан шундай һығымта яһала: һәр кеше, юғары вазифа биләгән түрә булһынмы, ябай эшсе булһынмы, үҙенең эшен намыҫлы һәм еренә еткереп башҡарһа, алға китеш буласаҡ, тәртип урынлашасаҡ. Әлбиттә, проблемаларҙың осо-башына сығыу - бер көнлөк эш

**Ауылдарыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу, элеккесә уның милләт бишеге булып ҡалыуы өсөн ни эшләргә? Мәҫәлән, ауыл хужалығы тармаҡтарын кооперативтарға берләштереү идеяһы ни өсөн ҡыйыуыраҡ юл яра алмай? Ҡала халҡы магазиндарҙан һаман булһа ситтән килтерелгән шикле сифатлы картуф, йәшелсә һатып ала. Уларҙың урынын үҙебеҙҙә ҡара тупраҡлы уңдырышлы ерҙәребеҙҙә үҫтерелгән продукция алыштырһын өсөн ниҙәр эшләргә кәрәк тип уйлайһығыҙ?**

**Ғәзиз Йософов:** Эйе, елкәһе соҡор булғандар ауылда йәшәй алмай. Әле ауыл хужалығы ауыр мәл кисерһә лә, БР Фәндәр Академияһының Стратегик тикшеренеүҙәр институты ғалимдары киләсәктә республикабыҙҙа агросәнәғәт үҫешәсәген билдәләй. Тимәк, ауылдарыбыҙ бөтмәйәсәк, уларҙы һаҡлап ҡалыу, эш урындары булдырыу тураһында Рәсәй кимәлендә, Путин кимәлендә лә һүҙ ҡуйыртыла хәҙер. Былтыр 31 майҙа РФ Хөкүмәте тарафынан "2020-2025 йылдарға ауыл биләмәләре үҫешенең комплекслы дәүләт программаһы тураһында" ҡарарға ҡул ҡуйылды. Был документта рәсәйҙәрҙең дөйөм һаны иҫәбендә ауыл халҡы өлөшөн 25 процент кимәлендә һаҡлап ҡалыу, бының өсөн ауыл халҡының мөшғүллеген тәьмин итеү, инженер һәм транспорт инфраструктураһын үҫтереү кеүек

юҡ икән - ауылдарҙы һаҡлап ҡалыу тураһында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел. Һәр кеше йәшәү өсөн уңайлы шарттар эҙләй. Шуға күрә хәҙерге заманда "Бөтәбеҙ ҙә ауылға, иптәштәр!" тигән ҡоро лозунг менән генә йәштәрҙе ауылға ҡайтарып булмай. Мәҫәлән, беҙгә төрлө ауылдарҙан мәктәп директорҙары уҡытыусы эҙләп мөрәжәғәт итә, әммә йәштәр ауылға ҡайтырға теләк белдермәй, сөнки унда перспектива юҡ тип иҫәпләй. Ауылдарҙағы шәхси һәм фермер хужалыҡтарының эшен алға ебәреүҙә уларҙа етештерелгән аҙыҡ-түлекте һатып алыуҙы ойоштороу ҙур ярҙам булыр ине. Хәҙерге ваҡытта кешеләр барыбер натураль аҙыҡ-түлеккә өҫтөнлөк бирә, әммә уларҙы ҡала магазиндарында табып булмай бит. Үҙебеҙҙә етештерелгән сифатлы аҙыҡ-түлек супермаркеттарға еңел генә үтеп инә алмай. Әлбиттә, сифатлы, химия менән эшкәртелмәгән аҙыҡ-түлек тиҙ боҙолоусан, ә был магазиндар һәм супермаркеттар өсөн отошло түгел.

**Радик Өмөтҡужин:** Ауыл урынында. Ул йәшәй. Уға бер ни ҙә булмаған. Бары эш (аҡса) эҙләп, уның йөрәге булырҙай бер өлөшө урбанизация ҡолона әйләнеп, ауылдан китергә мәжбүр булған. Быны мин әле ауылда йәшәп тә йөҙөм ҡалаға йүнәлгән кеше булараҡ яҙам. Ауылда йә-

✓ **_Халҡыбыҙҙың әле һаман уҡылмаған тарих биттәре бихисап. Шуларҙың береһе - төньяҡ-көнбайыш башҡорттары. Ғалимдар иҫәпләүенсә, унда меңәрләп милләттәштәребеҙ икенсе милләт булып яҙылып, "аҙашып" йөрөй._**

# ҺАҠЛАНАСАҠ...

## һаҡлап ҡала алһаҡ

түгел. Радий Фәрит улы кеүек етәксе менән күпкә өлгәшербеҙ, тигән өмөт бар, тик мөһим ҡарарҙар ҡабул ителгәндә халыҡ фекере лә иҫәпкә алынһа ине. Был тәү сиратта халҡыбыҙҙың матди һәм рухи байлыҡтары менән эш иткәндә кәрәк.

**Радик Өмөтҡужин:** Шәмдәр тураһындағы кинәйәне иҫләйһегеҙҙер. Бер бүлмәлә дүрт майшәм тыныс ҡына янған. Шул хәтлем тыныс булған был бүлмәлә, хатта уларҙың үҙ-ара шым ғына һөйләшкәне лә ишетелеп торған. Берәүһе һөйләй башлаған. "Мин - тынлыҡ. Ҡыҙғаныс, мине кешеләр һанға һуҡмай. Мин һүнәм, башҡа сара юҡ". Икенсеһе телгә килгән: "Мин - ышаныс. Мин дә бер кемгә лә кәрәкмәйем. Кешеләр минең турала ишеткеләре лә килмәй. Мин дә һүнәм". Талғын ғына ел был майшәмде лә һүндергән. Өсөнсө майшәм көрһөнөп кенә былай тигән: "Мин - мөхәббәт. Башҡаса яныр хәлем ҡалманы. Кешеләр мине аңламай, ҡәҙеремде белмәй. Улар иң яҡын кешеләре - туғандарын да күрә алмайҙар". Был шәм дә яйлап ирей-ирей һүнгән. Шул саҡ бүлмәгә бер бала килеп ингән һәм һүнгән өс шәмде күреп, ҡысҡыра башлаған: "Һеҙ ни эшләйһегеҙ? Мин ҡараңғылыҡтан ҡурҡам!" Дүртенсе шәм телгә килгән: "Ҡурҡма, илама! Әле мин янғанда һүнгән майшәмдәрҙе яңынан тоҡандырырға була". Балаларҙың илау тауышы бала табыу йорттарында ғына йышыраҡ ишетелһен ине, тип теләйек.

**Ә шулай ҙа ауырлыҡтарға бирешмәйбеҙ, бер аҡыл эйәһе әйтмешләй, "Ҡараңғылыҡты әрләп кенә ултырмайбыҙ, үҙебеҙ ҙә бәләкәй булһа ла шәм тоҡандырырға тырышабыҙ". Шул шәмегеҙ тураһында һөйләгеҙ әле…**

**Ғәзиз Йосопов:** Минең шәхси "шәм"ем - Өфөнөң 158-се гимназияһында уҡыған балаларға "Парламент дебаттары" тренингтарын үткәреүем. Бер йыл беҙҙең команда икенселек яуланы, икенсе йыл финалға үтә алды. Үҙем быңдай тренингтар кәрәклегенә ышанам. Беҙҙең балаларыбыҙ бер баланан да кәм түгел - дебаттарҙа үҙ фекерен яҡлай алырға тейештәр. Был - беренсенән. Икенсенән, башҡорт телен ҡулланыу даирәһе ни ҡәҙәре киң булһа - шул ҡәҙәре телебеҙ өсөн дә файҙалы. Беҙ 150 башҡорт студенты сит яҡтарҙа уҡығанда йыш ҡына Али Карнайҙың "Беҙ ҡайтырбыҙ!" тигәнен иҫкә төшөрә торғайныҡ. Ысынлап та, күп кенәбеҙ ҡайтты һәм ватанында, тыуған еренде файҙалы була алды. Ә ситтә ҡалғандар һаман да тыуған республикаһына ярҙам итеп йәшәйҙәр: улар ҡорған ойошмалар, үткәргән саралар беҙҙең ватаныбыҙҙы ситтәргә таныта, популярлаштыра. Ҡыҫҡаһы, милләттең һәр вәкиленең бына шулай бәләкәй генә үҙ эшен эшләүенә өлгәшергә кәрәк - тәрбиә саралары шуға йүнәлдерелергә тейеш. Булат ағай Рафиҡов әйткәнме әле: "Оло еңеү артынан ҡыуып ғүмереңде заяға үткәрмә, ә көн дә бер бәләкәй генә еңеү яуларға ынтыл", - тип. Был дөрөҫ бит.

**Гөлкәй Сәмерханова:** Был һорауға яуап биргәндә хәҙерге замандың иң мөһим тел проблемаһын, йәш быуынға рухи-әхлаҡи һәм патриотик тәрбиә биреү мәсьәләһен урап үтә алмайым. Уларҙы хәл итеүҙә, әлбиттә, беҙ, Сибай институты коллективы ла, шәм-усаҡтар тоҡандырабыҙ. Беренсенән, беҙҙең студенттарҙың күбеһе Көньяҡ Урал районларынан йыйылған һәм уларҙың 90-92 проценты - башҡорт. Һәм, әлбиттә, улар менән аралашыу башлыса башҡорт телендә бара. Икенсенән, уҡыу йортоноң эске һәм тышҡы биҙәлеше, халҡыбыҙҙың билдәле шәхестәренең бюстары һәм барельефтар тәрбиәүи маҡсатҡа йүнәлтелгән. Бынан тыш, беҙҙең бөтә факультеттарҙа ла, студенттарҙың ниндәй йүнәлештә белем алыуына ҡарамаҫтан, башҡорт теле туған тел һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыла, шулай уҡ Башҡортостан тарихы дәресе лә индерелгән. Башҡорт теле республикабыҙҙа дәүләт теле булараҡ ҡабул ителгән, шуға күрә ул дәүләт гербы, дәүләт гимны менән бер рәттән дәүләт ҡурсауында булырға тейеш. Был йәһәттән уға һуңғы ваҡытта иғтибар артыуы һөйөндөрә. Ә бына башҡорт телен туған тел булараҡ һаҡлау, киләсәк быуынға еткереү - ул һәр беребеҙҙең иңенә берҙәй бүлеп һалынған ҙур бурыс, һәр беребеҙ яндырырға тейешле бер шәм. Был ғәм, бурыс беҙҙең студенттар күңеленә ныҡлы һеңдерелә, тигәнде ышаныс менән әйтә алам.

**Яңы йылда ла республикабыҙҙа бик әһәмиәтле ваҡиғалар көтөлә. Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығын байрам итәсәкбеҙ - һеҙҙең ғаиләлә лә ошо яу тураһында хәтирәләр барҙыр?**

**Гөлкәй Сәмерханова:** Әлбиттә, илебеҙҙә һуғыш афәте ҡағылмаған ғаилә ҡалмағандыр. Атайыбыҙ яғынан ҡартатайыбыҙ Тусалин Зиннәт Хафиз улы, әсәйебеҙ яғынан олатайыбыҙ Солтанғужин Бәҙретдин Саҙретдин улы һуғышта ҡатнаша. Был афәт йылдары тураһындағы тарих мәңге тере беҙҙең ғаиләлә, ейән-ейәнсәрҙәрҙә.

**Ғәзиз Йосопов:** Олатайым да, ҡартатайым да фронттан инвалид булып ҡайтҡан. Ҡартәсәйемдең ағаһы һуғыштың тәүге көндәрендә үк һәләк булған. Ҡартатайым фронтта разведротала хеҙмәт иткән. Ғәҙәттә, разведротаға һуғыштар барған урындағы кешеләрҙе ҡабул иткәндәр, сөнки улар яу урынын яҡшыраҡ белгән: ниндәй шишмә, ниндәй һаҙлыҡ, кемдәр ышаныслы. Шул "ышаныслы" тигән кешеләр менән булған бер хәлде һөйләй торған булған ҡартатайым. Бер көн иртән уянһа, бүлмәлә үҙе генә ҡалған икәнен аңлаған, башҡа "ышаныслы" разведчиктар фашистар яғына ҡасып киткән. Улар өсөн ышаныслы булмағас, ҡартатайыма әйтеп тә тормағандар. Бер аҙна һорау алыуҙан һорау алыуға йөрөткәндәр аҙаҡ йәш башҡорт һалдатын. Ҡартатайым 1942 йылда яралана, атака ваҡытында эргәһендә снаряд шартлай. Шунан туғыҙ ай госпиталдә ятып сыҡҡас, Ишембайға ҡайта.

**Радик Өмөтҡужин:** Еңеүҙең 75 йыллығына ауылда ҡалған һуңғы ике һуғыш ветераны тураһындағы драмамды сәхнәлә күрһәм, үҙем өсөн ҙур еңеү булыр һымаҡ. Бөйөк Ватан һуғышы тураһындағы тарих онотолмаһын өсөн бер тамсы булһа ла өлөшөм булыр ине. Беҙ, тере ветерандарҙы үҙ күҙебеҙ менән күргәндәр, уларҙың тарихын киләсәк быуынға еткереүҙе үҙебеҙгә вазифа итеп ҡабул итергә тейешбеҙ. Тейеш нәмәләр күп, ә был бик мөһим тейеш нәмә!

**Быйыл Бөтә Рәсәй Халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы үтәсәк. Милләттең һәр вәкиле халҡыбыҙ иҫәбен лайыҡлы рәүештә тулыландырыу хәстәрен күрергә тейеш, тигәндә, һеҙҙең фекерегеҙ ниндәй булыр?**

**Ғәзиз Йосопов:** Халҡыбыҙҙың әле һаман уҡылмаған тарих биттәре бихисап. Шуларҙың береһе - төньяҡ-көнбайыш башҡорттары. Ғалимдар иҫәпләүенсә, унда меңәрләп милләттәштәребеҙ икенсе милләт булып яҙылып, үҙ асылынан ситләшеп, "аҙашып" йөрөй. Был ҡатмарлы хәл совет осороноң милли сәйәсәтендәге хаталар арҡаһында килеп тыуған бит инде. 1930 һәм 1950 йылдарҙа тел белгестәре был яҡтарҙа йәшәүселәрҙең айырым диалекттағы башҡорттар икәнен күтәреп сыҡҡан. Тик совет сәйәсәте тарафынан диалекттар инҡар ителә. Ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙа ла диалекттар бар, рус-украин телдәре лә рәсми танылмаған диалект менән бәйләнеп тора. Тик башҡалар менән сағыштырғанда беҙҙең "диалекттағылар" халҡыбыҙҙың кәм тигәндә дүрттән бер өлөшөн тәшкил итә. Әлбиттә, һәр кеше милләтен үҙе билдәләй. Белеүебеҙсә, үткән халыҡ иҫәбен алыуҙа хатта "эльфтар" килеп сыҡты. Минеңсә, ғалимдарыбыҙҙың һәм беҙҙең, журналистарҙың вазифаһы - халыҡҡа тулы мәғлүмәт еткереүҙә. Ҡулыбыҙҙа баһалап бөткөһөҙ, ҡырҡ томлыҡ "Башҡорт ырыуҙары тарихы" сығанаҡтары бар. Әлегә бер тәнҡитсе лә унда бер хата ла таба алманы.

**Гөлкәй Сәмерханова:** Эйе, беҙҙе мөһим һәм етди сара көтә. Был сараға әҙерлек этабында бигерәк тә йәштәр араһында аңлатыу эше алып барылырға тейеш, тип уйлайым. Әммә был, дөрөҫ булған хәлдә лә, фекеребеҙҙе уларға "көсләп тағыу" тигәнде аңлатмай. Йәштәр, иңдәренә һалынған яуаплылыҡты тулыһынса аңлап, үҙҙәре өсөн үҙҙәре яуап бирергә өйрәнергә тейеш. Бигерәк тә уларға милләттең киләсәгенә балта сабыусы аяныс күренеш - ул ҡатнаш никахтар икәнен төшөндөрөргә кәрәк. Ҡатнаш никахҡа ҡоролған бер ғаилә лә беҙҙең милләт һанын арттырмай, ҡыҙғанысҡа ҡаршы.

**Радик Өмөтҡужин:** Иҫәп алыу һәр саҡ һағайта. Дөрөҫ, объектив булыуынан бигерәк, халҡыбыҙҙың аңлы булыуын, киләсәккә, мәңгелеккә күҙ төбәп, Уралда борон-борондан кемдәр йәшәүен онотмауын күрге килә. Иҫәп алыу кампанияһы үтер ҙә китер, һөҙөмтәләре нисек булыр - шул уйға һала. Бер риүәйәт иҫкә төшһә, өмөт уяна, һүнгән шәмдәр кире тоҡана. Ул риүәйәт былай. Аллаһы Тәғәлә халыҡтарға ер өләшкән мәлдә башҡорт, ихласлығына хужа була алмай, тирә-яғына һоҡланып йөрөп, ерһеҙ тороп ҡалған. Хоҙай әйтә булыр: үҙемә тип ҡалдырған еремде һиңә бирәм! Ожмахҡа тиң ерҙә йәшәйбеҙ, уяу булайыҡ, һаҡ булайыҡ!

**Яңы йылда шулай уҡ Башҡортостаныбыҙ Бөтөн донъя фольклориадаһын ҡаршылаясаҡ. Һеҙ йәшәгән төбәктә ошо ваҡиғаны ҡаршылауға әҙерлек һиҙеләме?**

**Ғәзиз Йосопов:** Фольклориадаға беҙ әҙерлекле килербеҙ тип тойола. Фольклорҙы һаҡлауҙа һәм уны тергеҙеүҙә, яңы быуынға еткереүҙә, әлбиттә, беҙҙең "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының оло өлөшө бар. Һуңғы йылдарҙа улар республикалағы бар мәҙәни сараларҙың уртаһында ғына түгел, ә башында бара. Йолалар ҡайтарыла, һуңғы ваҡытта һәр ырыуға ярашлы милли кейемдәрҙе тергеҙә башланылар. Фольклориада ваҡытында ла һәр урында ҡунаҡтарҙы улар ҡаршы алып торасаҡтыр, моғайын.

**Гөлкәй Сәмерханова:** Бөтөн донъя фольклориадаһын Башҡортостанда үткәреү - ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған йолаларыбыҙҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе бөтә донъяға танытыу сараһы. Мәшһүр "Урал батыр" эпосы булған халыҡтың мәҙәниәтен донъя кимәлендә белергә тейештәр! Әлегә әҙерлек эштәре башланып ҡына тора, саралар иң юғары кимәлдә үтергә тейеш.

**Радик Өмөтҡужин:** Фольклор - ауыҙ-тел ижады, уның асылы ауылдарҙа һаҡланған. Бөгөн, ысынлап та, уларҙы йыйыу, аяҡҡа баҫтырыу, халыҡҡа ҡайтарыуҙа ағинәйҙәр ҙур тырышлыҡ һала. Бөтә төбәк өсөн яуап бирә алмайым, ә бына ауылда урамдар араһында берәй ижади конкурс, йәиһә, ауылдаштар байрамы үткәрелһә, үҙе бер фольклориадаға әйләнә лә китә. Халыҡ уны ниндәйҙер отчет өсөн эшләмәй, бары тоҡана ла, дәртләнә лә - асылына ҡайта. Һай, ихлас та инде халҡыбыҙ!

Ә ҡала фольклоры бармы? Мәҫәлән, тәүге трамвай тураһында берәй халыҡ әкиәте, таҡмаҡ, йә булмаһа, әстәғәфирулла, эпос бармы? Юҡ һәм булмаясаҡ та. Тимәк, милләтте, уның рухи хазинаһын һаҡлайбыҙ тибеҙ икән, ауылдарҙы һаҡлау кәрәк. Был кире ҡаҡҡыһыҙ хәҡиҡәт!



***✓ Ҡулында тағы өс улы ҡалһа ла, үҙе кеүек ҡара тырыш булған, башлағандың осона сыҡмайынса, еңмәйенсә ҡуя белмәй торған, шул уҡ ваҡытта әсәһе кеүек сабыр ҙа, күберәк уйлап аҡыл менән эш итергә яратҡан уртансыһын яҡын күрә.***



Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА

# УТ ХӘТЕРЕ

(Повесть)

Был хәбәрҙән оло ҡатын тағы тертләне. Урындыҡ ситендәге, йәғни сәй артындағы үҙ урынына килеп кенә терәлгән булһа, ҡабаттан тороп уҡ китте. Был көндөң килеп етеүенән генә түгел, был хаҡтағы һүҙҙән дә ҡурҡып ҡан ҡалтырап йәшәй бит ул. Быйыл улар олоҫонда хеҙмәткә йыялар. Биш-алты йылға бер тура килә был йыйын. Йәрәбғә уларҙың Дәүләтҡоло менән Ҡазыханы тура килә. Шуға, ятһа ла, торһа ла уландарының әләкмәүен теләп доға ҡыла.

- Ҡасанғараҡ булыр икән? - Әсәһе кеүек үк баҫалҡы Дәүләтҡол, хәбәр үҙенә ҡағылмағандай ғына ҡыҙыҡһына.

- Ҡар ятыуғараҡ булыр, тип уйлайым. Сана юлы төшкәндә күтә торғайнылар күҙгә булғанда. Унсама халыҡты аҙыҡ-түлеге, ҡорал-аты менән алып китеүгә лә шулай яй.

- Мин өйөрҙө һинең йылҡыға ҡушайым, атай, айғырҙы айырып алайым. Айғырһыҙ өйөр һинең өйөр айғырға тиҙерәк баш һалыр, тием. Ҡарайғырҙы, китер булһам, менеп китермен.

- Ауыҙыңдан ел алһын... - тип әйтеп өлгөрҙө Ғәйниә, ҡартының ҡырҡыу ҡарашынан ауыҙын япты ла.

- Шулайтырһың. Ваҡ малыңды ла әпкилеп ҡуш, малайҙарың үҫә төшкәнсә ҡарашырбыҙ. Һин, Ҡазыхан, үҙебеҙҙә йөрөгән анау турайғырҙы алырһың, өйөр башына ҡаршы сығып, бейәләрҙе айырып аптырата. Менгегә өйрәткәйнегеҙ ҙә бит әле?

- Эйе, өйрәткәйнек, - Ҡазыхан да тыныс, ул да ағаһы кеүек үк яҙмышына күнгәнме, әллә килер көндө ирҙәрсә һалҡын ҡанлы булып ҡабул итәме.

- Икегеҙҙең берегеҙ китеп бара торған булһа... бөтөн яҡтан да әҙер торайыҡ, тип әйтеүем, - Баҙамша ауыр ҡаштарын күтәрә төшөп, тәрән көрһөндө лә, алдындағы сәй тәгәсен ҡул һырты менән тупаҫ ҡына этеп, ҡуш усын алға һуҙҙы. Был табын да, һүҙ ҙә тамам тигәнгә ишара ине. Улдары уның артынса турайышып ултырып, доға ҡылыуға әҙерләнде.

- Әлхәмдү лилләәһил-ләҙии әтғәмәнәә үә сәҡанәә үә джәғәләнәә минәл-муслимиин.

Ирҙәр әпәр итеп ҡуҙғалышты. Шул ҡалҡыныуҙарынан кейенешеп тышҡа сыҡтылар. Баҙамша ишек тәңгәленә килеп етеүгә ҡыҙы йәһәтләп тире толобон алып бирҙе, ҡолаҡсынлы бүреген һуҙҙы. Ҡатыны көлдөксә артындағы йылы саңдауҙа кибеп ултырған кейеҙ ҡуңыслы, күн башлы йомшаҡ итектәрен аяҡ аҫтына ҡуйып өлгөрҙө. Ҡарт та уландары артынан ыңғайланы.

Аулаҡ ҡалған ҡатын-ҡыҙ табынды ҡабаттан тәрбиәләп ашарға ултырҙы. Ул арала шаршау артындағы һикенең йомшаҡ ҡаралтыһы араһында сумып йоҡлаған бала уянып тауыш бирҙе. Киленен сәй яһауҙан айырмай, ҡыҙын торғоҙҙо Ғәйниә:

- Аяғын тота һал, өшөгәнсе йөрөткән дә ҡуйған Балапан, бәләкәй икән тип уйламай ҙа ҡустыһын. Саҡ йылындырып һалдым баламды.

Еҙбикә юрған-түшәктәр аҫтынан ике йәштәрҙәге түп-түңәрәк тос малайҙы һөйрәп алды ла, күтәреп, көлдөксә артына алып китте. Күп тә тормай унан еҙ тасҡа сөбөрләткән тауыш ишетелде.

- Ана ла һаң, балаҡайым, ҡыҫталып ятҡан. Ҡул-аяғы туңып киткән ине шул, әйтәм бит, ағаһы-алабарман, үҙе менән тиң күреп, ат өҫтөндә алып тик йөрөгән.

Бәләкәсте урындыҡҡа алып килеп ебәргәс, табын бөтөнләй йәмләнеп китте. Малай иркәләнеп килеп әсәһенә һырынды ла, йәһәт кенә ҡулын уның иҙеүенә тығып ебәрҙе. Уның был ғәҙәтенән ҡатындар көлөштө.

- Асыҡҡан бит балам! Тамағын туйҙыра һалығыҙ, - шулай тиһә лә, өләсәй, тусҭаҡ төбөндәге һурпаға ит киҫәктәре тетеп һалып, килене алдына шылтырҙы, - Имсәккә алдатма, ашап алһын башта, унан имеҙерең.

Шәмсиҡәмәр улын тупылдатып һөйәһөйә итәгенә ултыртып, ағас ҡалаҡ менән аш һоғондорҙо. Малай ҡош балаһындай булып ауыҙын асып ҡына өлгөрҙө, ситкә киткәндәрен бармағы менән тығып ебәрҙе, ауыҙ-моронон һурпа тоҙлоғона буяп шыяланы. Ҡатындар быны ла хуплап ҡына торҙо:

- Ана, беҙҙең Бурансы бурап һала!

- Ҡолонсағымды! Тамаҡ туйҙырған ғына булыуы!

Ейәненә ҡарап ултырған Ғәйниәнең шатлығы ла, хәсрәте лә бер тиргәлә, шунда уҡ йәштәренә лә төйөлдө:

- Э-эй, атағыҙ шул бәләнән арынып тороп ҡына ҡалһа ине лә... Бабағыҙ ҙа әләкмәһен ине...

Шәмсиҡәмәр ҙә, алдында уҫлаптай булып ятып имеп маташҡан улының ҡырылғандан шырт булып сығып килгән сәс төпһәләрен һыпырып, бошоноп бер нөктәгә ҡарап ҡалды. Йәш ҡатын ҡәйнәһе ураған һайын һамаҡлаған был бәләне күҙ алдына ла килтерә алмай. Нисек инде уның ире ҡайҙалыр оҙаҡҡа китә? Ул бит Ҡәмәренән, улынан айырылып ҡырҙа ҡунып та ҡала алмай. Ҡалғанда ла, ҡайныһынан әрләнә-әрләнә төндә ҡайтып килә. Ул бит шундай!

Еҙбикә әсәһе менән еңгәһенең күңелен күтәреү өсөн нимә уйлап табырға белмәй, бармаҡтарын ғына йыбырлатып ҡустыһын үҙенә саҡыра:

- Кил әле, Бурансы, кисәге йырҙы йырлап күрһәтәйек өләскә.

Имеүе лә ошо ләззәттән айырылырға теләмәгән ғәҙәт кенә булып, буш имсәкте тылҡып ятҡан малай, йәһәт ҡуҙғалып апаһы яғына сыҡты. Үҙенең уймаҡ ауыҙы йырылып ике теҙем ап-аҡ үткер һөт тештәре күренде.

- Йә, башла: Атай... минә...

Бурансы, икеһе тулып өс менән киткән малай, һаҡауыраҡ тел менән ашығып таҡмаҡларға кереште:

- Атай минә ат билде!

Эйәлдә лә ҫап тине!

Артабан онотоп апаһына ҡарағайны, унылы әләктереп алды:

- Ҡайҙа... матур...

- Ҡайҙа матуй ҡыҙ күленә,

Ҡоҫаҡта ла ҡайт, тине!

Ҡатындар өй шаулатып тағы көлөштө. Өләсәйҙең бар шомдары сығып осто, ул ҡатын-ҡыҙҙың иң ябай, иң ғәҙәти тормош кинәнестәрен кисереп онотолдо, ейәнен йомшаҡ мул түшенә ҡыҫып һөйөп, балтырына шапылдатып һуға-һуға бот сапты:

- Йә инде! Ҡолонсағымды! Ҡайһылай ғына тәтелдәп торған булыуы! Телеңдән һөйөнгөрө! И-и-ий, аҫыл һөйәгем минең, йән киҫәгем...

* * *

Йыйынға ҡәлғәнән атлы казактар оҙатыуындағы бер төркөм хәрби кейемдәгеләр килде. Олоҫ һәм ауыл старосталары уларҙы артыҡ тауыш-тынһыҙ ҡаршы алһа ла, хөрмәт йөҙөнән баш эйә биреп сәләмләне. Сит диндәге кафыр халыҡ менән берәү ҙә ҡул биреп күрешмәне, яурын ҡағышманы. Хәрбиҙәр ҙә быны тиреләре менән тойоп йөрөй, бында көтөлгән ҡунаҡ түгеллектәрен дә, хәлдәренән килһә, хәҙер өҙгөләп ташлаясаҡтарын да. Шуға ла һәр береһе дәрәжәһен тоторға, хөкүмәт кешеләре икәнлектәрен күрһәтеберәк йөрөргә тырышалар.

Йыйынды ойоштороусы Яҡшымбәт старшинаның ялсылары килеүселәрҙең аттарын алып китте, үҙҙәрен хужа әйҙүкләп йортҡа саҡырҙы. Оҙата килеүсе ҡоралды һаҡ тышта ҡалды.

Тәржемәсе булып йөрөгән суҡынған татар ете Сапаулланы бындағыларҙың барыһы ла белә. Уны хужалары Сергей тип йөрөтә. Башҡорттар иһә һаман үҙҙәренсә Сапау ти ҙә ҡуялар. Егет әфәндеһе алдында улай тигәнде өнәп етмәй, әленән әле "Мин Сергей Борисович" тип төҙәтә. Әле лә шул әҙәм, килеүселәр һыуһын ҡымыҙҙан баш тартҡас, сара башланыуын белдереп уртаға сыҡты.

-Старшина әфәнделәр, хәрби хеҙмәткә йыйыу сходы батша ғәли йәнәптәре генерал-майоры Владимир Алексеевич Кар ҡулы аҫтында үтәсәк, - тине ул саф татарса. Унан әлеге ҡорһаҡлы генерал янындағы башҡа хәрбиҙәрҙең дә исем-шәрифтәрен атап, ҡаршы яҡҡа теҙелешеп ултырған башҡорттарҙы ла төртөп күрһәтеп таныштырып сыҡты.

- Яҡшы, - тип һүҙ алды генерал, - белеүегеҙсә, 1762 йылда Рәсәй державаһының батшаһы Петр III егерме биш йыллыҡ хәрби хеҙмәт индергәйне. Был яуаплылыҡтан дворяндар, дин әһелдәре, сауҙагәрҙәр азат ителде. Былардан тыш, башҡа халыҡ егерме йәштән алып утыҙ биш йәшкәсә хәрби хеҙмәтен үтергә бурыслы. Һеҙҙең арала, йәғни башҡорттар араһында, хеҙмәткә йыйыу үҙегеҙ билдәләгән сират буйынса һәр улысҡа өс-биш йылға бер тура килә. Һайлау тәртибен дә үҙегеҙ булдырҙығыҙ, шунлыҡтан, һайланған ир-егеттәр өс көн эсендә ҡәлғәгә йыйылып бөтөргә тейеш.

Киндер тоҡ эсенә исемдәр яҙылған туҙ киҫәктәре йыйылды ла, уны һелкеп ҡат-ҡат болғатҡас, тәржемәсе ҡулын тығып әләккәнен алып уҡый, генералдың писаре ҡағыҙына теркәй барҙы:

- Абдрахман Мотаулла улы, Ҡасай ауылы Шайтан-Көҙәй олоҫо...

- Саптар Ҡарабай улы, Яҡуп ауылы Шайтан-Көҙәй олоҫо...

- Көсөк Баһаҙир улы, Ҡасау ауылы Шайтан-Көҙәй олоҫо...

- Ҡазыхан Баҙамша улы, Ыҫмайыл ауылы Шай...

Артабан бер нәмә лә ишетмәҫ булды Баҙамша. Уға төкөлөп тигәндәй ултырған ауыл старшинаһы, йәштән дуҫ булып аралашҡан Бәшир, хәлен төшөнөп ҡарап ҡуйҙы. Ҡәрҙәшенең һүҙен йыға алмай бында алып килгәненә лә үкенде, бигерәк төҫө ҡасып ағарыуына ҡарағанда, хәле хөртәйеп китмәһен тип шөпһәләнде. Нимәнән ҡурҡалар ине - шул килде. Ауылдарынан өс егет, шулар араһынан Баҙамшаның бер улы, хеҙмәткә әләкте.

* * *

Ғәйниәнең башы тубал булды. Аяҡтарын саҡ һөйрәп алып йөрөнө, бары ҡартының ҡәтғи тыйыуынан ғына сеңләүен баҫып, улын юлға әҙерләй. Ә бер урам эсендәге кескәй өйҙә, бығаса айырылышып өйрәнмәгән һәм һағыштың, юғалтыуҙың ни икәнен белмәгән йәштәр, иртә үк уянһалар ҙа, көҙгө таңдың яҡтыра биргәнен көтөп, һыйынышып ята бирәләр.

- Һин китһәң мин ҡалайтып бер үҙем йоҡлармын икән, Ҡазыхан, ҡәйнәмдәр янына инмәһәм, - ти, Шәмсиҡәмәр, инде иларын илап, һөйләшерен һөйләшеп бөткәс, һүҙ ялғап.

- Бурансы ҙурайып бара. Унан... йәйгә тиһең бит әле... тағы бер иш булыр яныңа, - Ҡазыхан беләгендә ятҡан ҡатынына борола биреп, юрған аҫтында уның эсенә ҡулын һала. Әлегә бер нәмә лә һиҙелмәгән был ҡорһаҡта уның тағы ла бер орлоғо - улымы-ҡыҙымы ята бит.

- Был балалар аяҡҡа баҫҡансы, һин ҡайтҡансы... мин ҡартайып китермен микән, ә, Ҡазыхан? Һин ҡайтып мине яратмай ҡуйһаң?

- Юҡты һөйләмә, Ҡәмәр, мин һине тешһеҙ ҡарсыҡ булһаң да ошолай ҡосаҡлап ҡына ятасаҡмын.

- Китсе, нишләп мин тешһеҙ ҡарсыҡ булайым, - ҡатын үпкәләгән булһа ла, иркәләнеп иренә һыйына бирә лә, түшәктәрендә саҡ ҡына арыраҡ ятҡан улына ҡулын һуҙып, юрған аша ҡағып ҡуя, - Бурансы һине таптырып ҡыйнар инде...

Ҡазыхан тап шул хаҡта уйлап ятҡанлыҡтан, яуап бирмәй. Ике күҙ ситенән һарҡып төшкән йәштәрен әллә ҡатыны күрмәй, әллә ҡараңғы, тип уйлай.

* * *

Ҡазыханды атаһы, ике ағаһы һәм ҡустыһы Өфөгәсә оҙатып килде. Башҡорттарҙың Себер, Ырымбур һыҙымында ике йыллап сик һаҡлауынан тыш, ошолай, һирәкләп, Рәсәй халҡына ҡағылған оҙайлы хеҙмәткә лә алалар ине. Үҙе ете йыллыҡ Пруссия походында йөрөп ҡайтҡан Баҙамша ситкә хеҙмәткә китеүҙең нимә икәнен яҡшы белә. Улар ҙа бит "барып һуғышырға ла ҡайтырға" тип сығып киткән ерҙән оҙон ете йыл донъя гиҙеп, Пилау ҡалаһы аҫтындағы ҡаты бәрелештән тере ҡалып, инде илдәрен, ғаиләләрен ҡабат күреүгә өмөт өҙөп бөткән ерҙән ҡайтырға рөхсәт алдылар. Ә улының нисә йылға киткәне лә билдәһеҙ. Утыҙ йыл әүәлге баш күтәреүҙән һуң башҡорттарҙы ситтәге оҙайлы хеҙмәткә күпләп алғайнылар. Һуңғы йылдарҙағы халыҡ араһындағы шау-шыуҙы белеп әллә, быйыл саҡырылған егеттәр һаны ла бермә-бер артҡан. Элегерәк, йәрәбә һәр ауылда айырым үткәндә, башҡорттар үҙҙәре генә хәл иткәндә, сыҡҡан исемде алыштырырға, килешергә, мал йә аҡсаға урынына икенсе берәүҙе ялларға ла була ине. Хәҙер ҡәлғәләрҙән хәрби состав килеп ойоштора ла, йәрәбә күрһәткестәре шунда уҡ ҡағыҙға төшөрөлә бара. Был осраҡта исем-шәрифе аҡҡа төшкән ир-егеткә атҡа атланырға ғына ҡала. Былай ауылдарында унар, ун бишәр йыл хеҙмәт үтеп ҡайтҡандар ҙа, ҡайҙалыр күршеләрҙә биш-алты йыл ғына үткәреп килгәндәр ҙә бар ти. Шундайға өмөт итә Баҙамша ла. Ҡулында тағы өс улы ҡалһа ла, үҙе кеүек ҡара тырыш булған, башлағандың осона сыҡмайынса, еңмәйенсә ҡуя белмәй торған, шул уҡ ваҡытта әсәһе кеүек сабыр ҙа, күберәк уйлап аҡыл менән эш итергә яратҡан уртансыһын яҡын күрә. Улай тиһәң, итен ҡырҡып алғанда ла тыныс ҡалыр Байтуллаһынан да, кәрәктә лә, кәрәкмәгәндә лә ауыҙы йырыҡ булған Дәүләтҡолонан да, "гөлт" итеп ҡыҙып-тоҡанып барған яндырай Балапанынан да, хатта бөгөн-иртәгә кейәүгә китеп барырҙай Еҙбикәһенән дә айырылғыһы килмәй ҡарт атаның. Ул шул балаларға йән биргән, йәндәй күреп үҫтергән, әхирәткә лә шулар ҡулынан оҙатылһын ине тип теләй бит.

Хәрби гарнизонға инеп урынлашҡан егеттәрҙе ике көндән тағы бер тапҡыр ғына туғандары менән күрешеүгә сығарҙылар ҙа, башҡаса күрһәтмәнеләр. Аҙнаға яҡын ятып, алып килгән ат аҙығы ла, үҙ ризыҡтары ла бөткәс, инде улын тағы бер күреүҙән тамам өмөтө өҙөлгән Баҙамша улдарын эйәртеп ҡайтып китте. Ай самаһынан Ҡазыхандан килгән хат аша уның башта Петербургта, ярты йыл самаһынан Мәскәү ҡалаһына күсерелеүен белделәр ҙә, уға ҡыҙы тыуып Айым тип атауҙары, илдә Яйыҡ казактарының баш күтәреүе арҡаһында болғаныш барыуы, башҡорттарҙың да тыныс булмауы тураһында яҙып һалдылар. Өсөнсө хатын һалдат Польша сигенән һала, Суворов тигән янаралға ярҙамға ебәрелеүҙәрен, рус-поляк яуына инеп барыуҙарын бәйән итә. Дүртенсе хат булғандырмы-юҡмы, ошо тәңгәлдән был ике сиктең бәйләнеше өҙөлә.

**(Дауамы. Башы 52-се һанда).**

✓ ***Ошо ауыр йылдарҙа ҡиммәтле ғаилә ҡомартҡыһын һаҡлап ҡалыу өсөн ҡыҙҙар әсәләре теккән селтәрҙе сепрәккә төрөп, өйҙөң бүрәнәһе араһына ҡыҫтырып ҡуйған. Шунан һуң ғаилә икенсе ауылға күсеп киткән...***

*АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ*

# БЕР КҮРЕШЕҮ - БЕР ҒҮМЕР



**Мерәҫ тигән ауыл Баймаҡ ҡалаһына күренеп торғандай яҡын ята, төнгө уттары Ирәндек һыртына теҙелгән йондоҙҙарҙай емелдәй. Мерәҫкә еткән саҡта Граф күленә, Әпек (Бәхтегәрәй) ауылына барған юлдар киҫешә, ләкин ул көндө бөтә юлдар ҙа Баймаҡ районы ағинәйҙәрен Мерәҫкә алып барҙы.**

Мерәҫтең хөрмәтле хеҙмәт, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт өлкәһе ветерандары һәммәһе лә тиерлек "Ағинәй " йәмәғәт ойошмаһы ағзалары. Уларҙы барлап китәйек: Зәлифә Ҡаһарманова, Миңнур Мифтахетдинова, Мәрйәм Сырлыбаева, Зәкиә Нәҙербаева, Миңзәлә Ямантаева, Ғилминур Утарбаева, Гөлсәсәк Хоҙайбирҙина, Бәҙерниса Хәмитова, Рәйлә Рәхмәтуллина, Фирҙәүес Үҙәнбаева, Мәғрифә Кейекбаева, Нәсимә Дауытбаева, Фәрхәнә Йәнтүрина, Зөлфиә Үзбәкова, Фәүзиә Рыҫмөхәмәтова, Рафиға Әсмәндийәрова - барыһы өсөн дә был кисә хикмәтле бер осрашыу булды. Баймаҡ районы Ағинәйҙәр ҡоро рәйесе Хөрмә Биктимерова, ҡурайсы Фәнил Шәрипов, Мерәҫ ауыл биләмәһе башлығы Т. Хафизов телмәр тотто унда.

Мәғрифә Мерәҫ ауылы баш ағинәйе булараҡ матур йылмайып һүҙ башлап ебәргән сәхнә аллы-гөллө милли кейемле ағинәйҙәр менән тулды. Бына Мәфрүзә "Юлғотло" йырын йырлай, алтмыш йәшен туйлаған Бәҙерниса "Бишбармаҡ" бейеүен йәштәрҙән дә былайыраҡ елеп йөрөп бейей, Ғилминур Ирәндек түшенә ятып илартырлыҡ итеп тыуған яҡты данлаған шиғырын уҡый, Зөлфиә менән Фәрхәнә икеһе бергә тып баҫып "Әхирәттәр" бейеүен тетеп бейеп ташланы, Фәнил менән Зөфәр донъяны онотторол Мерәҫ ҡурайҙарын һыҙып ебәрҙе... Шуның аҙағында Дилбәр һылыу Мерәҫ ағинәйҙәре исеменән "йолаларҙы түкмәйсәсмәй йәш быуынға еткерәбеҙ", тип һүҙҙе йомғаҡлап ҡуйҙы. Уҙған йылды барлап ҡараһалар, байтаҡ көн үтелгән, апаруҡ йөн тетелгән булып сыҡты. Ул да булһа, баймаҡтарса "шым ғына" итеп Ишмырҙа ҡатындары "Бәпес ҡоймағы" йолаһын сәхнәләштергән, Таулыҡайҙар "хикмәтле Сыңғыҙҙар" менән бергә "Ҡар һыуына барып" аптыратҡан, Аҡморон ағинәйҙәре ғәм халыҡты "Әбейҙәр сыуағы"на йыйып күңелдәрен асҡан, ә Ҡарамалы-Ишмөхәмәт ауылы ҡатын-ҡыҙҙары түңәрәк өҫтәл уратып ултыртып "Ҡәйнә менән килен" әңгәмәһен тәҡдим иткән. Мерәҫ ауылы ағинәйҙәре ҡарап тора буламы - "Ҡорамала - күҙ нурҙары" тип исемләнгән тамаша сарпыһын күрһәтте. Мерәҫ мәҙәниәт йорто бынса сағыу йәйғорло ҡорамаларҙы күргәне лә булмағандыр, сәхнә ысынлап та балҡып тора ине!

Иң ныҡ хәтергә уйылғаны - ҡорама ҡороу ултырмаһына йыйылған ҡатын-ҡыҙҙың юрау-теләк әйтеү өлөшө булды. Әйтәгүр, тамаша - уйын, ысынға алһаң, бойом! Бойомға ашырлыҡ саф теләктәр менән күңелде биләне ағинәйҙәр, сәхнәгә сыҡҡан береһе үҙенең ҡул эштәрен тотоп һамаҡлап инде: "Ике кеше күрмәһен, икендегә етмәһен", "Кеше-ғара күргәнсе, ҡара көсөк өргәнсе, эште тиҙерәк бөтәйек!", "Эшем башы - эшҡары, дошман башы тышҡары", "Күргәндәр күреп ҡалһын, күрмәгәндәр тороп ҡалһын!", "Минең ҡулым түгел, Ғәйшә-Фатима ҡулы", "Кеше-ғара күрмәһен, ҡара кеше һиҙмәһен", "Минең ҡулым түгел, әүлиә-әмбиәләр ҡулы", "Эш башланым - башҡары, дошман һүҙе ташҡары!", "Ике һыуҡыр күрмәһен, икендегә етмәһен, күрһә-күрһен күҙлеһе, ул да булһын йүнлеһе!", "Осоп барған ҡош күрҙем, тик ятҡан бер таш күрҙем" (ҡош кеүек етеҙ эшләйек, таш кеүек ауыр булмайыҡ, йәнәһе)... Был юрамаларҙың һәр ҡайһыһын иғтибарға алып, уйға һалһаң, моғайын, мәғәнәһенә төшөнөргә һәм иҫ төбөнә һалып ҡуйырға ла мөмкиндер. Һис юғы, бергә йыйылған саҡта әйтеп, мәғәнәһен-асылын күмәкләп сискәндә туған тел серҙәре буйынса һабағы ҙур булыр.

Унан тағы бер күренеш өҫтәлде: эш башлағанда бер кеше сәхнәгә йүгереп килеп инде лә йылт әйләнеп кире сығып ҡасты, үҙе шул ыңғайында "Хәлдәр нисек?" тип һөрәнләп китте. Йәнәһе, эш башлағанда кем килеп инә, шуның йөрөшөнә ҡарап эштең барышын юрайҙар, һәм "аяғың еңел булһын!" тип теләп ҡалалар. Йүгерә-атлай йөрөгән кеше килеп инһә, эшебеҙ ырамлы булыр, тип һөйөнәләр. Шунан инде, эш башланғас, хужабикә төп бурысты уртаға ҡуя: "Ҡыҙыма бирнәлек ҡорама ҡорамаҡҡа йыйылдыҡ. "Ҡыҙ кешегә бирнәне етенән әҙерләһәң дә етмәй, алты йәштән әҙерләһәң, артып ҡала", тигән һүҙ бар халыҡта. Шуны уйлап, Аллаһыға тапшырайыҡ", - ти ул.

Мерәҫ ауылы мәҙәниәт йортонда йыр-бейеү төнгә хәтле барҙы. Ләкин ил күңелен күлдәй йәйерлек аң-белем, халыҡсан ирәбәлек, илаһи ихласлыҡ менән тулы кисәнән һуң йөрәктәргә ғәм, уй йөкмәп, мөхәббәт һәм өмөт нуры алып ҡайтыштыҡ. Бер күрешеү - бер ғүмер, баҡыяс һеҙгә, мерәҫтәр! Мерәҫ булған ерҙә башҡорт йәненә терәк булһын!

**Сәрүәр СУРИНА.**

*ҮӘТ БИТ ӘЙ!*

# ЕЙӘНСӘРҘӘРҘЕҢ ШАТЛЫҒЫ...

## өләсәй селтәре









**Башҡортостандың Әбйәлил районында иҫке өйҙө һүткәндә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының боронғо биҙәүесе табылған. Яңауыл ауылынан Мәҙинә Яҡупова һөйләүенсә, туғандары һаҡалды Асҡар ауылында элек өләсәләре Мәфтуха (ире буйынса Сөләймәнова) йәшәгән ташландыҡ йортта тапҡан.**

"Өләсәйебеҙ 1906 йәки 1910 йылда тыуған. Ул беҙгә йыш ҡына бәләкәй сағында апаһы менән бергә кулактарҙы ситкә һөргән осорҙа өйҙөң мөйөшөнә ҡиммәтле биҙәүес йәшереп ҡалдырыуҙары тураһында һөйләй торғайны", - ти ханым. Уның билдәләүенсә, ошо ауыр йылдарҙа ҡиммәтле ғаилә ҡомартҡыһын һаҡлап ҡалыу өсөн ҡыҙҙар әсәләре теккән селтәрҙе сепрәккә төрөп, өйҙөң бүрәнәһе араһына ҡыҫтырып ҡуйған. Шунан һуң ғаилә икенсе ауылға күсеп киткән, уларҙың йортонда башҡа кешеләр йәшәгән, һуңынан өйҙә янғын сыҡҡан, ә һуңғы йылдарҙа ул бөтөнләй ташландыҡҡа әүерелгән. Ошо йылдар буйына улар йәшерелгән биҙәүес тураһында онотмаған, ләкин береһе лә әсәләренең селтәрен эҙләп ҡарарға ҡыймаған. Мөмкинлек килеп сыҡмаған. Өләсәләре Мәфтуха 1986 йылда 83 йәшендә донъя ҡуйған. Бына күп йылдар үткәс, ҡомартҡы табылған. Шуныһы ғәжәп: ул бөтөн көйө һаҡланған. "Шулай ҙа селтәрҙең нигеҙе серегән, муйынсаҡтары, мәрйендәре һәм тәңкәләре ҡойолоп тора, ләкин ошондай ҡиммәтле мираҫтың табылыуы бик мөһим", ти Мәҙинә. Һаҡал XIX быуат аҙағындараҡ тегелгән тип фаразлана, әммә унда боронғораҡ - 1794 йылғы тәңкәләр ҙә бар.

- Ошо боронғо һаҡалды беренсе тапҡыр ҡулыма алғас, хәйер, уны тотоп та булмай, бөтә нәмәһе ҡойолоп тора ине, был минең өсөн мөғжизә кеүек булды. Мин ниндәйҙер энергетика тойҙом. Боронғо әйберҙәр иҫ киткес матур бит ул. Күп ғаиләләрҙә боронғо селтәрҙәр, сулпылар һәм биҙәүестәр һаҡлана, уларҙы юғалтмаҫҡа, мәҙәниәтебеҙ өсөн һаҡларға кәрәк, сөнки улар - ата-бабаларыбыҙ аманаты, - тип һөйләй Мәҙинә Яҡупова.

Хәҙер биҙәүес Мәҙинәнең өлкән апаһында. Ханымдар биҙәүесте реставрацияларға һәм вариҫтарына иҫтәлек итеп ҡалдырырға теләй.

Әйткәндәй, элек башҡорт ҡыҙҙары был биҙәүесте ғаиләлә булған ҡиммәтле әйберҙәр - көмөш тәңкәләр, сулпылар, мәрйендәр, сәйләндәр, ҡабырсаҡтар менән семәрләп теккән. Селтәр төрлө районда ҙа төрлөсә - һаҡал, яға, муйынса тип йөрөтөлгән. Уға ҡарап, башҡорттарҙың йәшәгән төбәге, социаль хәле билдәләнгән. Ҡайһы бер биҙәүестәр бер ат йәки һыйыр хаҡына торошло булған.



**"Башинформ".**

✓ *Ислам динен тотҡан боронғо ата-бабаларыбыҙ "Мин һиңә шуны теләйем", тип түгел, ә "Аллаһы Тәғәлә һиңә шуны насип итһен", йә иһә "Мин һиңә Алланан шуны-шуны һорайым" тип әйтер булған.*

*ИНТЕРНЕТТАН*



# ЯБЫҒАМ, ТИҺӘҢ...

■ Инженерҙар һәм ғалимдар заманса технологиялар ҡулланыу кеше өсөн хәүефле булыуын иҫкәртә. Голланд тикшеренеүселәре асыҡлауынса, бөгөн бик популяр булған Wi-Fi үткәргесһеҙ бәйләнеш стандарттары сәләмәтлеккә зыян килтереүе лә ихтимал. Нидерландтарҙағы Вагенинген ҡалаһы университетының бер төркөм ғалимдары Wi-Fi тулҡындары тәьҫирендә ағастарҙың япраҡтары ҡойолоуға иғтибар итә. Инженер Алистер Филипс фекеренсә, Wi-Fi-ҙың сигналдары кеше организмына ла насар йоғонто яһай һәм хатта түлһеҙлеккә килтереүе ихтимал. Бындай хәүефкә ноутбукты тубыҡтарына ҡуйып эшләргә яратыусылар дусар була. Ғалимдар әйтеүенсә, радиотулҡындар баш мейеһе эшмәкәрлеген дә насарайта.

■ Ғалимдар, йөҙҙәрендә миңдәре булған кешеләр ҡартлыҡҡа бирешмәй, тип белдерә. Һуңғы мәғлүмәттәргә ярашлы, тәндәрендә 100-ҙән ашыу миңе булған ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәрҙең һөйәктәре нығыраҡ була, тимәк, улар остеопороз сиренә бирешмәй. Бынан тыш, бындай кешеләрҙең йыйырсыҡтары аҙыраҡ була һәм шуға ла улар үҙ йәшенән уртаса 7 йәшкә йәшерәк күренә. Әлбиттә, миңле кешеләргә тире яман шеше лә янай, шуға ла уларға табиптар ҡояшта оҙаҡ ҡыҙынырға кәңәш итмәй. Әммә Лондон тикшеренеүселәре миңдәрҙең ыңғай яҡтары күберәк тип иҫәпләй. Ғалимдар хәҙер миңдәрҙең йөрәк һәм күҙҙәр сәләмәтлегенә йоғонтоһон тикшерә.

■ Канаданың төрлө университеттары ғалимдары көртмәле һутын ҡартайыуға ҡаршы аҙыҡ-түлек исемлегенә индергән. Ҡомаҡтарҙа үткәрелгән лаборатор тикшеренеүҙәр барышында көртмәле һутының ҡандағы шәкәрҙе түбәнәйтеүе һәм туҡымаларҙың инсулинға тәьҫирен көсәйтеүе асыҡланған. Был һутты 3 көн дауамында ҡабул иткән ҡомаҡтарҙың ҡандарында глюкоза күләме 35 процентҡа кәмегән. Тимәк, көртмәле һуты күп кешеләрҙә шәкәр диабеты һәм артыҡ ауырлыҡты булдырмауҙа ярҙам итәсәк.

■ Сәләмәт тормош алып барыусыларҙан айырмалы рәүештә, чипсы, йомортҡа, тоҙло ашамлыҡтарҙы күпләп ашаусылар араһында инфаркт кисереүселәр йышыраҡ осрай. Канаданың Онтарио провинцияһының Гамильтон университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәрҙә 5 меңдән ашыу сирле һәм 11 мең һау-сәләмәт кеше ҡатнашҡан. Йышыраҡ емеш-еләк, йәшелсә, соя продукттары ашаған һәм ит, ҡыҙҙырылған аҙыҡтарҙан баш тартыусылар үҙҙәрен йөрәк сирҙәренән һаҡлай икән. Канада ғалимдары фекеренсә, донъялағы һәр өсөнсө инфаркт - дөрөҫ туҡланмауҙан.

■ Бөгөн ананас ауырлығын кәметергә теләүселәр араһында киң ҡулланыла. Уның составындағы бромелайн организмға аҡһымдарҙы тарҡатырға, тимәк, ябығырға ярҙам итә. Бынан тыш, ананас цинк, кальций, магнийға бай, улар нервы системаһын тынысландыра һәм кәйефте күтәрә. Банан составындағы мескатил да кәйефте күтәреүсе булып һанала. Был емештәге тирозин аминокислотаһы ауыртыуҙы баҫа, хәтерҙе яҡшырта һәм аппетитты кәметә.

■ Эштә тиҙ арыйһығыҙмы? Улайһа көн һайын бер ус сәтләүек ашағыҙ һәм шунда уҡ хәтерегеҙ яҡшырыр, бар мәсьәләләрҙе лә еңел хәл итә башлаясаҡһығыҙ. Сәтләүектәрҙең магнийға бай булыуы уларҙы интеллектуаль эш менән шөғөлләнеүселәр өсөн файҙалы итә лә инде.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# АЛЛАҺ НАСИП ИТҺЕН, ТИӘЙЕК



**"Хыял" һүҙе ғәрәпсәнән руссаға воображение, фантазия, иллюзия, привидение, ә "хыялый" - фантазер тип тәржемә ителә. Динебеҙ менән бергә килеп ингән башҡа бихисап һүҙҙәр һымаҡ уҡ, был һүҙ беҙҙең туған телебеҙҙә шул көйөнсә һаҡланып ҡалған. Һәр тереклектән айырмалы, Аллаһы Тәғәлә әҙәм балаһын фекер йөрөтөү һәләтлеге менән бүләкләгән. Шунлыҡтан, беҙ ғүмеребеҙ буйы уйлап, фекерләп, ниҙер хаҡында һәр саҡ хыялланып йәшәйбеҙ, гел генә нимәгәлер өмөт итәбеҙ. "Өмөтһөҙ - шайтан", тигән әйтем йөрөй халҡыбыҙҙа. Был әйтем юҡҡа ғына килеп сыҡмаған. Тәкәбберләнеп, Аллаһы Тәғәләнең бойороғон үтәмәгәне өсөн шайтандарҙың башлығы - Иблис Раббыбыҙ тарафынан ләғнәтләнгән, һәм ул әхирәттә мәңгелек тамуҡ утында яныуға дусар ителгән. Тап ана шуға күрә шайтан - өмөтһөҙ. Ә әҙәм балаһының һәр кемеһенә Аллаһы Тәғәләгә иман килтереп, Уның ҡушҡандарын үтәп, тыйғандарынан тыйылып ғүмер итергә мөмкинлек бирелгән. Кемебеҙ әлегә тере, һәммәбеҙ ҙә - өмөтлө, әлхәмдүлиллаһ!**

Бөгөн, әлбиттә, тик яҡшы хыялдар һәм изге ниәттәр хаҡында һүҙ бара. Ҡысҡырып белгертеп йөрөмәһәк тә, һәр кемебеҙҙең эсе тулы хыял. Бөгөнгә, иртәгәһе көнгә, киләһе аҙнаға, киләһе йылға һәм унан да алдағы ваҡыттарға барыбыҙ ҙа ниндәйҙер пландар төҙөйбөҙ, хыял итәбеҙ. Бала сағыбыҙҙа үҫеп еткәс ниндәйҙер һөнәр эйәһе, уңышлы, бәхетле кеше булыу теләге менән янһаҡ, үҙебеҙ ҙурҙар рәтенә инеп, башлы-күҙле булып алғас, балаларыбыҙ, унан ейән-ейәнсәрҙәребеҙ өсөн борсола башлайбыҙ. Уларҙың иманлы, һәр йәһәттән яҡшы кеше булыуын, етеш, бәхетле ғүмер итеүен теләйбеҙ. Тағы бер аҙ олоғая төшөп, тәндәребеҙ йә бер, йә икенсе сиргә һабыша башлағас, һаулығыбыҙ өсөн хафаланыу килеп өҫтәлә. Шулай уҡ һәр кемебеҙҙең донъяуи бәхете илебеҙҙәге, донъя күләмендәге хәлдәр менән дә бәйле булыу сәбәпле, "Йорт-илдәр тыныс торһон, бер ҡасан да һуғыштар булмаһын", тип теләйбеҙ. Бәғзеләребеҙ теләктәребеҙҙе нәфсебеҙ ҡарамағына ла тапшырыусанбыҙ. Ҡасандыр берике бүлмәле фатир, иҫкерәк кенә бер ябай "Жигули" хаҡында хыялландыҡ. Артабан, Аллаһы Тәғәләнең ихтыяры менән шул теләгебеҙ тормошҡа ашҡас, өс-дүрт бүлмәле фатир, ике ҡатлы коттедж, ҡыйбатлы сит ил машинаһы хаҡында хыял итә башланыҡ. Шулай, кемдер әйтмешләй, хыялдарыбыҙҙың осо-ҡырыйы юҡ. Халҡыбыҙ шағиры Бабич үҙенең бер шиғырында: "...Форсат бирмә ҡорһаҡҡа, ҡорһаҡ туймаç һис саҡта", - тип әйткән.

Бына шундай бихисап теләктәрен күптәр Яңы йыл менән дә бәйләүсән. Йәнәһе лә, "йылды нисек ҡаршы алһаң, ул шулай үтәсәк" йәки "яңы йыл төнөндә ниндәйҙер теләктәр теләһәң - ҡабул буласаҡ" тигән һымағыраҡ ышаныуҙар арбай уны. Һәммәләребеҙҙең яҙмышы "әтәс" йә "үгеҙ", "йылан" йә "эт" һәм башҡа йыл билдәләренән торғанын юраусылар күп. Ырым-юрауҙарға ышаныуҙарҙы Аллаһ илсеһе Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм ҡәтғи тыйғанлығы, уларҙың ифрат та ҙур гонаһ икәне хаҡында белмәүселәр күп. Шул хаҡта иҫкәртеүҙәргә, үкенескә, иғтибар итеүселәр һирәк.

Хыялдарыбыҙҙы тормошҡа ашырыу ниәте менән теләктәр теләү мотлаҡ кәрәк, әлбиттә. Әммә барса теләгебеҙ фәҡәт Аллаһы Тәғәлә тарафына ғына йүнәлтелгән булырға тейеш, сөнки һәр нәмәнең тормошҡа ашыу-ашмауы Унан ғына тора. Тик теләктәр теләү өсөн тап Яңы йыл кисен генә һайларға тимәгән. Аллаһы Тәғәлә беҙҙе һәр саҡ һәм ниндәй генә көндә булһа ла ишетә. Ислам динен тотҡан боронғо ата-бабаларыбыҙ "Мин һиңә шуны теләйем", тип түгел, ә "Аллаһы Тәғәлә һиңә шуны насип итһен", йә иһә "Мин һиңә Алланан шуны-шуны һорайым" тип әйтер булған. Боронғо ҡартатайҙарыбыҙ бер ваҡытта ла үҙҙәренең балаларын Ҡыш бабайҙан ниҙер һорарға өйрәтмәгән. Алдағы киләсәк хаҡында һүҙ йөрөткәндә һәр саҡ ин шәә Аллаһ (ғәрәпсә - Аллаһ теләһә, бойорһа) тип әйтеү мотлаҡ.

Теләктәребеҙ, доғаларыбыҙ ҡасан һәм ниндәй осраҡтарҙа айырыуса ҡабул булыуы хаҡында ла өйрәткән Бәйғәмбәребеҙ. Аҙан менән кәмәт араһында, намаҙҙан һуң, йома көндәре, изге Рамаҙан айының Ҡәҙер төнөндә, ямғыр яуған мәлдә Раббыбыҙға йышыраҡ ялбарыу зарурлығы хаҡында ла Аллаһ илсеһенең хәҙистәре бар. Ата-әсәнең балалары өсөн ялбарыуы, мосафирҙың, шулай уҡ, нахаҡҡа рәнйетелгән кешенең доғаһы ҡабул булыусанлығы хаҡында ла, хәрәм ашаған һәм эскән кешенең (сусҡа, хәмер, һ.б.) доғаларына яуап булмау ихтималлығы тураһында ла Бәйғәмбәребеҙ иҫкәртә килгән. Раббыбыҙ тыйғандан тыйылмай, Яңы йыл, тип шампан шартлатып, тағы ниндәйҙер хәрәм эштәр менән булышып ултырып, үҙебеҙгә үҙебеҙ ололарҙан-оло ғәҙелһеҙлек ҡылмайыҡ, йәмәғәт. Яңы йыл менән!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# СӘЛӘМ БИРЕШӘЙЕК!



**Беҙҙең барлыҡ ғүмеребеҙ кешеләр менән осрашыуҙан һәм аралашыуҙан тора. Дуҫтарыбыҙ, таныштарыбыҙ менән осрашҡанда гел генә "Хәлдәр нисек?" тип һорайбыҙ. Дини китаптарҙа иҫәнләшеү тураһында бына ошолай тип яҙылған: "Кешенең хәлен һорашыу сауап һанала. Сәләмләгәндә һәм һөйләшкәндә һауалыҡ күрһәтергә ярамай. Ислам тормоштоң барлыҡ өлкәләрендә тыйнаҡлыҡ, түҙемлек, сабырлыҡ талап итә. Осрашҡанда, күрешкәндә кәйефегеҙҙең насар икәнен күрһәтмәй йылмайығыҙ".**

Бына шуның өсөн дә "Һаумыһығыҙ" тигән сәләмгә "Һаубыҙ әле" тигән яуапты ишетәһең, ә "Хәлдәр нисек?" тип һораһалар, бер кем дә, әгәр әҙәпле кеше булһа, "Хәлдәрем насар, һаулығым юҡ" тип зарланмай. Ислам һүҙе менән сәләм һүҙе икеһе бер тамырҙан, именлек, тыныслыҡ тигәнде аңлата. Мосолмандар бер-береһе менән осрашҡанда "Әссәләмүғәләйкүм", "Именлек булһын һиңә" тип сәләмләшәләр. Сәләм биргән кешегә "Вәғәләйкүмәссәләм" тип, йәғни "Һиңә лә именлек булһын" тип яуап ҡайтарырға кәрәк. Ә инде хәйерле кис, иҫәнме, нихәл һүҙҙәрен "Әссәләмүғәләйкүм" һүҙенән һуң ғына ҡулланырға ярай.

Ҡөрьәндә ошолай тип әйтелә: "Бер мосолман сәләмләгән ваҡытта һеҙ унан да яҡшыраҡ рәүештә сәләм бирегеҙ йәиһә уның биргән сәләме кеүек яуап бирегеҙ" (Ән-Ниса сүрәһе, 86 аят).

Сәләмләшеү - иң күркәм ғәҙәттәрҙең береһе. Өйҙә, урамда, эштә, магазинда йәки башҡа бер урында мосолман ҡәрҙәшебеҙ менән осрашһаҡ, уға сәләм биреү - беҙҙең дини вазифабыҙҙыр. Сөнки Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһи-үәссәләм: "Сәләм һүҙҙән дә, ҡәләмдән дә алдалыр", - тигән. Сәләмләүҙең төрлө формалары бар, уға милли үҙенсәлектәрҙең дә, дини йолаларҙың да һәм ғөрөф-ғәҙәттәрҙең дә йоғонтоһо бик ҙур. Милли йолалар бер-береһенән ныҡ айырылһа ла, сәләм биреүҙең халыҡ-ара ҡағиҙәләре кешеләрҙең бер-береһенә хәйерле иртә, көн, хеҙмәттә уңыш, сәләмәтлек, яҡшылыҡ һәм именлек теләүҙер. Һәр милләт үҙ телендә иҫәнләшһә лә, донъялағы бөтә сәләмләү һүҙҙәренең мәғәнәләре бер үк: тыныслыҡ һеҙгә, сәләмәтлек һеҙгә, уңыштар һеҙгә, эштәрегеҙ уңышлы булһын. Аралашыу оҫталығына өйрәнеү, кешенең эске донъяһын ихтирам итә белеү - ҙур һәләт. Был оҫталыҡҡа өйрәнеү ҡайһы бер ҡағиҙәләрҙе белгәндә әллә ни ҡатмарлы ла түгел. Сәләмләй, таныша, һөйләшә белгән, әңгәмәләшә, бәхәсләшә белеү оҫталығына эйә булған кеше менән, әлбиттә, аралашыуы күңелле.

Сәләм биреү тәртибе ошолайҙыр: йөрөгән йәки баҫып торған кеше ултырған кешегә сәләм бирә; аҙ кеше күп кешегә сәләм бирә. Мәҫәлән, кем дә кем урамда барғанда ике йәки күберәк кеше менән осрашҡанда һин үҙең башлап сәләм бирергә тейешһең; йәш кешеләр өлкәндәрҙе сәләм-

*ИҪКӘРТӘБЕҘ!*

**Бынан бер нисә йыл элек үк республика белем усаҡтарының береһендә директор булып эшләгән танышым: "Наркотиктар беҙҙең тупһаға уҡ килеп етте", - тип әсенеп һөйләгәйне. Бөгөн улар хатта мәктәптәргә лә үтеп ингән, әммә был хаҡта асыҡтан-асыҡ әйтергә генә ҡуркабыҙмы, әллә һаман да "ыңғай күрһәткестәрҙе боҙорға" теләмәйбеҙме - бындай мәғлүмәтте администрация аша түгел, ә балаларҙың үҙҙәренән һорашып ҡына белергә мөмкин.**

# ҺӘР КЕМГӘ ҠАҒЫЛА



Эйе, төрлө профилактик эштәр алып барылыуға, наркотиктарға ҡаршы саралар уҙғарылыуға ҡарамаҫтан, улар йәмғиәткә ныҡлы үтеп инә бара. Йәштәр араһында бөгөн бигерәк тә насвай киң таралған. Был төр наркотик менән сауҙа итеү закон тарафынан тыйылһа ла, уны таратыу, йәштәрҙең сәләмәтлеген, психикаһын ғына түгел, яҙмыштарын боҙоу һаман да дауам итә. Нимә һуң ул насвай? Ул Урта Азияла үҫкән махорка - тәмәке, һүндерелгән эзбиз, үҫемлектәр көлә, үҫемлек майы ҡатнашмаһы. Был составҡа шулай уҡ дөйә, тауыҡ тиҙәге, елем дә ҡушалар. Шуға күрә уны тартыу сәләмәтлеккә зыян килтермәй ҡалмай. Ҡулланғандан һуң шайыҡ ауыҙҙы яндыра, баш әйләнә, йөрәк болғана һәм ҡоҫҡо килә. Оҙайлы ваҡыттан һуң теш, ашҡаҙан-эсәк тракты ауырыуҙары, ауыҙ ҡыуышлығы һәм ҡыҙыл үңәстең яман шеш сире үҫешеүе ихтимал. Хайуан тиҙәктәре эсәк инфекциялары, паразиттар, шул иҫәптән вирусты гепатит менән зарарларға мөмкин.

Насвайҙы психотроп матдәләр иҫәбенә индерергә була, сөнки уны ҡулланыу психик үҫешкә йоғонто яһай - ысынбарлыҡты ҡабул итеү һәләте түбәнәйә, хәтер насарая, ярһыулыҡ барлыҡҡа килә. Башҡа тәмәке изделиелары кеүек үк насвай никотин бәйлелегенә килтерә, уны ҡулланыусы ваҡыт үткәс көслөрәк һәм ҡеүәтлерәк психоактив матдәләргә һәм наркотиктарға күсә.

Бөгөн инде мәктәптәргә наркотик хәүефе янамай, тип әйтеп тә булмай. Һуңғы көндәрҙәге ваҡиғалар бөтөнләй шаңҡытты: Ҡырмыҫҡалы районында һәм Стәрлетамаҡ ҡалаһында 11-12 йәшлек малайҙарға һағыҙ тип наркотиктың бер төрөн - снюс бирәләр. Һөҙөмтәлә улар ауыр хәлдә дауаханаға эләгә.

Ошо көндәрҙә Башҡортостан Эске эштәр министрлығы үткәргән матбуғат конференцияһында ла тап ошо мәсьәлә күтәрелә һәм журналистарҙы "Нимә ул снюс?", "Ул хәүефлеме?" "Балаларҙы уны ҡулланыуҙан нисек һаҡларға?" тигән һорауҙар борсой. Был һорауҙарға табиб-психиатр, юғары категориялы нарколог Азат Әсәҙуллин бына нимә тип яуап бирә: "Барлыҡ алдынғы илдәрҙә лә сигарет тартыу бер быуат самаһы инде тәмәке ҡулланыуҙың өҫтөнлөклө формаһы булып тора. Швецияла әлегә тиклем уны сәйнәйҙәр йәиһә ауыҙҙа имеп йөрөйҙәр. Һөҙөмтәлә швед ир-аты араһында үпкә яман шеше күрһәткесе һуңғы 50 йылда иң түбәне булһа, киреһенсә, ауыҙ ҡыуышлығы, бөйөр, бәүел ҡыуығы, ашҡаҙан аҫты бизе рагы уртаса Европа илдәре күрһәткесенән күпкә артыуҙа. Быға тиклем Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығында снюс ҡулланыу үҫмерҙәрҙә никотин бәйлелеген барлыҡҡа килтерә, уларҙың тәртибе үҙгәрә, агрессия күҙәтелә, йоҡолары насарая, тип белдергәйне. Сөнки мармелад йәки кәнфит рәүешендәге сағыу ҡаптарға төрәлгән матдә һурған (имгән) ваҡытта ҡанға эләгеп, интоксикацияға килтерә. Азат Әсәҙуллин да шундай уҡ фекерҙә. Был матдәнең еҫе булмағанлыҡтан, үсмерҙә ата-әсә һиҙеп ҡалыр, тигән ҡурҡыу булмай. "Күпме генә эҙләһәм дә, снюстың составы, концентрацияһы тураһында фәнни көнүҙәк мәғлүмәт таба алманым", - ти нарколог һәм был атама артында ауыр матдә йәшеренеү ихтималлығын белдерә. Әлегә тикшереүҙәр уның бары тик синтетик никотин һеҙерелгән түбән сифатлы тәмәке булыуын ғына фаразлай, әммә был версияны раҫлар өсөн дә ентекле тикшереүҙәр талап ителә.

Снюс шулай уҡ тыйылған матдәләр исемлегендә лә юҡ. Ә рәсми рәүештә наркотик тип таныу өсөн ул өс критерийға тап килергә тейеш: юридик (тыйылған матдәләр исемлегендә булырға тейеш), медицина (бәйлелек), социаль (халыҡтың киң ҡатламы ҡуллана). Шуға күрә әлегә снюс - Рәсәйҙә тыйылмаған никотин. Уны тыйыу өсөн тикшереп, формула сығарырға кәрәк, унда никотин булһа, сигареттарҙы ла тыйырға тура киләсәк. Евросоюзда снюс һатыу 1992 йылдан уҡ тыйылған, әммә уны ҡулланыу сикләнмәгән. Швеция менән Норвегияла иһә рөхсәт ителгән.

Бөгөн тыйыу индергәндә лә, кеше ҡанында эҙләнеү тигән һәләт бар һәм тағы бер йылдан икенсе атама аҫтындағы проблеманы күтәрергә тура килеүе ихтимал. Шуның өсөн белгестәр йәмғиәттә альтернатива - сәләмәт тормош рәүешен пропагандалау тәҡдим итәләргә, ә профилактика һәм тәрбиә ғаиләлә һалынырға тейеш, тип иҫәпләй.

Ошо көндәрҙә РФ Дәүләт Думаһы депутаттары вейп, кальян, электрон сигарет һәм башҡа шундай нәмәләрҙе үсмерҙәргә һатыуҙы тыйған һәм уларҙы рекламалауҙы сикләгән федераль закон ҡабул итте. Уларҙы Башҡортостан парламентарийҙары ла хупланы.

Республика Башлығы Радий Хәбиров иһә магазин кәштәләренә һатыуға ошо ағыуҙы ҡуйған магазин хужаларына бер тәүлек ваҡыт биреп, был тауарҙы алып ташларға ҡушты. 24 сәғәт үткәндән һуң был талапты сауҙа нөктәләренең 70 проценты үтәүе асыҡланды.

Ғәҙәттә, төрлө кире күренештәргә "Был минә ҡағылмай", тип битараф ҡалырға күнеккәнбеҙ. Әммә бәлә ағас башынан йөрөмәй һәм һорап та килмәй, шуға, балаларығыҙға, тирә-яҡтағыларға иғтибарлыраҡ булырға кәрәктер, моғайын.

**Зөмфира ХӘБИРОВА.**

---

ләй. Әммә карттар ҙа йәштәрҙе өйрәтер өсөн, башлап сәләм бирергә тейештәр; байлығы, малы, дәрәжәһе күп булған кеше башлап сәләм бирер. Мирғаж кисәһендә Аллаһы Тәғәлә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе үҙе башлап сәләмләгән; бер кеше йәмәғәткә сәләм бирһә, аранан береү уның сәләменә яуап ҡайтарһа, шул етәлер; ике кеше осрашҡанда алдан сәләм биреүсе өҫтөн булараҡ ҡабул ителер; әгәр мосолман уның сәләмен кемдер ишетмәне тип уйлай икән, ул ике йә өс тапҡыр ҡабатлай ала, әммә шунан да артыҡ түгел; бармаҡ, ус һәм баш хәрәкәттәре менән сәләмләшергә юл ҡуймау яҡшыраҡ.

Ислам дине ҡайһы бер осраҡтарҙа кешеләргә сәләм биреүҙе дөрөҫ һанамай: намаҙ уҡыған кешегә намаҙын бөтөрмәй тороп; хөтбә уҡыған кешегә; Ҡөрьән уҡыусы кешегә; вәғәз һөйләп торған имамға; вәғәз һәм Ҡөрьән тыңлаусыларға; аҙан әйтеүсе мәзингә; отошло уйын уйнап ултырыусыларға; ғәйбәт һөйләп тороусыларға; бәҙрәфтәге кешеләргә; ашап тороусыларға сәләм биреү ярамай.

Әгәр берәй кеше кемгәләр сәләм тапшырырға ҡушһа, ул сәләмде эйәһенә еткерергә тейешлебеҙ, сөнки сәләм - бер аманаттыр. Берәр кеше арҡылы ебәрелгән сәләмгә лә "Вәғәләйкүмәссәләм" тип яуап ҡайтарыу тейешле. Бер кешенең сәләмен алғанда йәиһә сәләмләшкәндә эйелеү-бөгөлөү дөрөҫ түгел. Динебеҙ Аллаһҡа ғына бөгөләргә ҡуша, кешенең кешегә бөгөлөүен теләмәй. Бәйғәмбәребеҙ ҙә "Бер-берегеҙ менән сәләмләшкәндә бөгөлмәгеҙ" тип бойорған.

Көндәлек тормошта сәләм урынына әйтелә торған һүҙҙәр ҙә бар, мәҫәлән, иҫәнме, нихәл, хәйерле иртә, хәйерле кис, хәйерле сәфәр, күрешкәнгә тиклем һәм башҡалар. Был һүҙҙәр халҡыбыҙҙың матур, әҙәпле, итәғәтле һүҙҙәрелер. Был һүҙҙәрҙе юғалтмаҫҡа, тормошта һәр ваҡыт ҡулланырға кәрәк. Ләкин "Әссәләмүғәләйкүм" тип сәләмләшеү бөтөн мосолмандар өсөн уртаҡтыр. Шуның өсөн иң элек "Әссәләмүғәләйкүм" әйтелер, унан һуң ғына иҫәнләшелер.

---

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 2-се идея: Һеҙҙе нимә тоткарлай?

Йәш саҡта китап йәки картина яҙыу, үҙ эшеңдә башлау йәки башҡа ижади эшмәкәрлек менән шөғөлләнеү тураһында мөһәбәт пландарығыҙ, бөйөк хыялдарығыҙ булдымы? Моғайын, булғандыр. Дөрөҫөн әйткәндә, күбебеҙҙең әле булһа был татлы хыялдары күңел төбөндә һаҡлана, әммә үҙ эшмәкәрһеҙлегебеҙҙе, башҡа бурыстар күп булыуына һылтанып, аҡлайбыҙ. "Мин рәхәтләнеп роман яҙыр инем дә, үҙемдең эшем менән шөғөлләнергә кәрәк шул". "Күҙем насар күрмәһә, бына тигән картина яҙған булыр инем" һ.б. Ҡыҫҡаһы, үҙебеҙҙе аҡлау өсөн буш һылтауҙар уйлап сығарабыҙ.

Ә беләһеңме, Юлий Цезарь үҙ комментарийҙарын төнөн, бөтә ғәскәр йоҡлаған саҡта, палаткала яҙған, ә иртә менән һалдаттарын һуғышҡа алып барған. Гендель үҙенең иң яҡшы музыкаль әҫәрҙәрен врачтар уға дауалап булмай торған сиргә дусар булыуын әйткәндән һуң яҙған, Бетховен бөтөнләй һаңғырауланғандан һуң да музыка ижад итеүен дауам иткән. Ә өс бөйөк шағир - Гомер, Мильтон һәм Данте - тома һуҡыр булғанлығы хаҡында уйланғаның бармы?

Ганнибал менән лорд Нельсонды иҫкә төшөрөгөҙ: улар һыңар күҙле кешенсә лә бөйөк полководецтар булған. Тома һуҡыр Френсис Джозеф Кемпбелл танылған математик һәм музыкант булған. Ниндәйҙер һылтауҙар табып, үҙеңә-үҙең: "О ю-ук, был минең хәлемдән килмәй. Мин бер ваҡытта ла теләгәнемде эшләй алмаясаҡмын", - тип әйтмә.

"Робинзон Крузо"ның авторы Даниэль Дефо тураһында уйла әле: был әҫәрҙе ул төрмәлә сағында яҙған. Джон Баньян "Пилигрим юлы"н рәшәткә артында яҙа. Лютер Библияны Вартбург һарайында тотконлоҡта сағында тәржемә иткән. Данте егерме йыл һөргөндә була, ә "Дон Кихот"ты Сервантес Мадрид төрмәһендә яҙа. Ихтимал, һин: "Былар барыһы ла бик шәп, әлбиттә, ләкин миңә эшләргә кәрәк бит", тиерһең. Яҡшы, улайһа, минең һеҙгә бер яңылығым бар. "Унесенные ветром" романының ниндәй ҡалынлыҡта икәнен беләһеңме? Маргарет Митчелл уны көндәр буйы гәзиттә эшләгәнендә яҙа. Һин үҙеңде физик кәмселектәрең арҡаһында шундай хәлдәмен тип уйлайһың. Ә беләһеңме, парламент ағзаһы лорд Кэвэно, аяҡһыҙ, ҡулһыҙ булыуына ҡарамаҫтан, парламентҡа тиклем үҙаллы күтәрелә. Мәктәптә уҡыу һәм яҙыуға ғына өйрәнгән Шекспир, үҙаллы уҡыуын дауам итеп, бөйөк әҙәбиәтсе булып китә. Күңелеңдә һаҡланған изге теләктәреңде тағы бер тапҡыр иҫеңә төшөр әле. Хыялыңды тормошҡа ашыра алмауыңды аҡлап, үҙең уйлап сығарған аргументтарҙы ҡабаттан тикшереп сыҡ. Шуны аңла, был аҡлауҙар ысынында иһә тик ялған бит. Уларҙы ситкә алып ырғыт та, теләктәреңдең барыны ла тормошҡа ашырылыҡ, бөтәһе лә үҙеңдән тороуын төшөн. Онотма: һине бер урында тоткарлаусы берҙән-бер кеше - һин үҙең.

**Роберт ЭНТОНИ.**

**(Дауамы бар).**



### 6 ЯНВАРЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30, 6.10 Х/ф "Безымянная звезда". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
8.00 Телеканал "Доброе утро".
10.10 Д/ф Премьера. "Иисус. Земной путь". [0+]
11.10, 12.10 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.25 Т/с Премьера. "Практика". Новый сезон. [12+]
15.25 Повтори! [16+]
17.30 "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
18.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.50 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.20 Т/с Премьера. "Зеленый фургон". [12+]
23.00 Х/ф "Бедная Саша". [0+]
1.00 Рождество Христово. Прямая трансляция из Храма Христа Спасителя.
3.00 Д/ф "Рождество в России. Традиции праздника". [0+]
3.50 Х/ф "Француз". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Начнём с утра!"
6.45 Т/с "Между нами девочками". [12+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Т/с "Нити судьбы". [12+]
16.00 Т/с "Тайны следствия". [12+]
20.30 Т/с "Крепостная". [12+]
22.55, 3.00 Т/с "Сваты". [12+]
1.00 Рождество Христово. Прямая трансляция торжественного Рождественского богослужения.

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.45, 19.00, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Сказание о Сельме". "Фиксики". [6+]**
**9.30 Т/с "Чужая милая". [12+]**
**10.30 "Детей много не бывает". [6+]**
**11.00 Звездная "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Умызрая". [0+]**
**12.00 "Әлләсе..." Новогодний выпуск. [6+]**
**12.45 Азбука. [0+]**
**13.00 "Күстәнәс". [12+]**
**13.30 "Дарю песню". [12+]**
**14.45 "Ете егет". [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - ЦСКА (Москва). КХЛ.**
**19.30, 22.00 "Йәшлек шоу". Концерт. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.45 Рождественское богослужение из Кафедрального собора Рождества Пресвятой Богородицы г. Уфа.**
**1.00 Д/ф "Святая заступница". [6+]**
**1.30 Х/ф "Добро пожаловать на Рождество". [16+]**
**3.30 Спектакль "Морозное дыхание метели". [12+]**
**5.45 "Орнамент". [6+]**
**6.00 "Историческая среда". [12+]**

### 7 ЯНВАРЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00, 12.00 Новости.
6.10 Х/ф "За пять минут до января". [12+]
8.00 Телеканал "Доброе утро".
10.05 Д/ф Премьера. "Дамир вашему дому". [16+]
11.10, 12.10 Видели видео? [6+]
13.25 Т/с Премьера. "Практика". Новый сезон. [12+]
15.25 Повтори! [16+]
17.30 "Угадай мелодию". Новогодний выпуск. [12+]
18.30 Большой рождественский концерт. [0+]
21.00 Время.
21.20 Т/с Премьера. "Зеленый фургон". [12+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.30 Д/ф "Элвис Пресли: Искатель". [16+]
2.25 Х/ф "Можешь не стучать". [16+]
3.35 Х/ф "Десять негритят". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Начнём с утра!"
6.45 Т/с "Между нами девочками". [12+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.20 Рождественское интервью Святейшего Патриарха Кирилла.
11.40 Т/с "Нити судьбы". [12+]
16.00 Т/с "Тайны следствия". [12+]
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Крепостная". [12+]
23.55 "Русское Рождество".
2.05 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.45, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Сказание о Сельме". "Фиксики". [6+]**
**9.30 Т/с "Чужая милая". [12+]**
**10.30 "Детей много не бывает". [6+]**
**11.00 Звездная "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Тайна Амангуль". [0+]**
**12.00 Рождественское послание митрополита Уфимского и Стерлитамакского Никона. [0+]**
**12.15 Д/ф "Мир - мозайка". [6+]**
**13.00 "Күстәнәс". [12+]**
**13.30 "Дарю песню". [12+]**
**14.45 "Ете егет". [12+]**
**16.15 "Дорога к храму". [0+]**
**16.45 Рождественский концерт. [12+]**
**17.30 "Тайм-аут". [12+]**
**19.00 "Уфимская волна-2019".**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.). [0+]**
**23.00 Яны йыл-караоке. [12+]**
**23.45 Фестиваль этнической музыки "Мусафир". [12+]**
**0.30, 4.00 Х/ф "Бестселлер по любви". [12+]**
**2.30 Спектакль "Зимние новогодние приключения". [12+]**
**3.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**
**6.00 "Историческая среда". [12+]**

### 8 ЯНВАРЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "За пять минут до января". [12+]
8.00 Телеканал "Доброе утро".
10.05 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.10 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.25 Т/с Премьера. "Практика". Новый сезон. [12+]
15.25 Повтори! [16+]
17.30 Премьера. "Спящая красавица". [6+]
19.25 "Лучше всех!" Новогодний выпуск. [0+]
21.00 Время.
21.20 Т/с Премьера. "Зеленый фургон". [12+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф "Элвис Пресли: Искатель". [16+]
1.55 Х/ф "Обезьяньи проделки". [12+]
3.30 Про любовь. [16+]
4.15 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Начнём с утра!"
7.00 Т/с "Между нами девочками". [12+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.20, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Т/с "Нити судьбы". [12+]
16.00 Т/с "Тайны следствия". [12+]
21.00 Т/с "Крепостная". [12+]
0.05 Х/ф "Женить миллионера". [12+]
3.10 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.45, 19.00, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Сказание о Сельме". "Фиксики". [6+]**
**9.30 Т/с "Чужая милая". [12+]**
**10.30 "Детей много не бывает". [6+]**
**11.00 Звездная "Гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Радость сильнее". [0+]**
**12.15 Байтус. [6+]**
**13.00 "Күстәнәс". [12+]**
**13.30 "Дарю песню". [12+]**
**14.45 "Бал джигитов". [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Локомотив" (Ярославль). КХЛ.**
**19.30 "Башкорт йыры-2019". [12+]**
**20.45 Д/ф "От Уфы до Хуаншаня". [6+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.00 Яны йыл-караоке. [12+]**
**23.45 Фестиваль этнической музыки "Мусафир". [12+]**
**0.30 Х/ф "Наследники". [16+]**
**2.45 Спектакль "Коварная любовь". [12+]**
**4.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**4.30 Д/ф "Назер". [12+]**
**5.00 "Земляки". [12+]**
**5.15 "Орнамент". [6+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**
**6.00 "Историческая среда". [12+]**

### 9 ЯНВАРЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Т/с Премьера. "Практика". Новый сезон. [12+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Зеленый фургон". [12+]
23.30 Х/ф "Красиво жить не запретишь". [16+]
1.10 Х/ф "Почему он?" [18+]
3.10 Х/ф "Ниагара". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 20.00 Вести.
11.25, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Т/с "Нити судьбы". [12+]
16.00 Т/с "Тайны следствия". [12+]
21.00 Т/с "Крепостная". [12+]
0.05 Т/с "Салями". [12+]
3.10 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Чужая милая". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).**
**14.30, 23.45 "Земляки". [12+]**
**14.45 "Ради добра". [6+]**
**15.00, 17.45, 20.30 "Интервью". [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Х/ф "Сладкая сказка". [0+]**
**18.00 Учим башкирский язык. [6+]**
**18.15, 20.45 "Инцидент-репортаж". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 "Республика Live. #Дома". [12+]**
**23.00 Д/ф "Крылатые дороги". [12+]**
**0.00 Х/ф "Принц и я-3: Медовый месяц". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Дальше тишина..." [12+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**
**6.00 "Историческая среда". [12+]**

### 10 ЯНВАРЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Т/с Премьера. "Практика". Новый сезон. [12+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Зеленый фургон". [12+]
23.30 "Что? Где? Когда?" Финал года. [16+]
1.00 Х/ф "Жги!" [16+]
2.50 Х/ф "Нет такого бизнеса, как шоу-бизнес". [12+]
5.00 Про любовь. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 Т/с "Нити судьбы". [12+]
16.00 Т/с "Тайны следствия". [12+]
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 "Аншлаг. Старый Новый год". [16+]
0.50 Х/ф "Княжна из хрущёвки". [12+]
4.00 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Х/ф "Балкас". [0+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00, 22.00 Точка Z. [12+]**
**12.30 Башкорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Детей много не бывает". [6+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45 "Интервью". [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Москва). КХЛ.**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 "Уфа. Живое". [12+]**
**0.15, 4.30 Х/ф "Гонка века". [16+]**
**2.45 Спектакль "Кадриль". [12+]**
**4.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**

### 11 ЯНВАРЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/с "Теория заговора". [16+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Т/с Премьера. "Практика". Новый сезон. [12+]
15.50 Повтори! [16+]
18.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.35, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
23.35 Х/ф Премьера. "Новогодний ремонт". [16+]
1.15 Х/ф "Логан: Росомаха". [18+]
3.35 Про любовь. [16+]
4.20 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота. [12+]
8.35 "По секрету всему свету".
9.30 "Пятеро на одного".
10.20 Сто к одному.
11.10 Смеяться разрешается.
13.50 Х/ф "Родные пенаты". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести.
20.30 Х/ф "Музыка моей души". [12+]
23.55 "Необыкновенный Огонёк-2020".
2.10 Х/ф "Гадкий утёнок". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха. [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 Новогодний звон "Сулпылар". [0+]**
**12.00 "Күстәнәс". [12+]**
**12.30 100 имен Башкортостана. [12+]**
**13.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**13.15 "Земляки". [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Автограф. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 "Полезные новости". [12+]**
**20.15 "Ради добра". [6+]**
**20.30 "Байык" представляет... [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.15 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 Фестиваль этнической музыки "Мусафир". [12+]**
**0.45 Х/ф "Мир будущего". [18+]**
**3.00 Спектакль "Лекарство от смерти". [12+]**
**4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.45 Д/ф "Мир - мозайка". [6+]**

### 12 ЯНВАРЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.25, 6.10 Х/ф "Золотые рога". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Х/ф "Женщины". [6+]
15.55 Д/ф "Валентина Теличкина. Нефертити из провинции". [12+]
16.50 Точь-в-точь. [16+]
19.25, 21.30 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. Финал. [16+]
21.00 Время.
22.55 Новогодняя ночь на Первом. [16+]
0.45 Х/ф "Как выйти замуж за миллионера". [12+]
2.30 Х/ф "Река не течет вспять". [12+]
3.55 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.45, 1.30 Х/ф "Обратный путь". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.30 "Устами младенца".
10.20 Сто к одному.
11.10 Т/с "На краю". [16+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 Звездная "Гора новостей". [6+]**
**10.30 "Бирешмә!" [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 Концерт. [12+]**
**15.15 Башкорттар. [6+]**
**15.45 "Дорога к храму". [0+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Рига). КХЛ.**
**19.00 "Полезные новости". [12+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [12+]**
**20.30 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.00, 22.30 "Республика Live. #Дома". [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 "Специальный репортаж". [12+]**
**22.45 "Красная кнопка". [16+]**
**23.30 "Байык" представляет... [12+]**
**0.30 Х/ф "Амун". [12+]**
**2.00 Спектакль "Эти свободные бабочки". [12+]**
**4.30 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.30 "Историческая среда". [12+]**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ҒИНУАР ЮБИЛЯРҘАРЫ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**52-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Василий. Лар. Бивак. Мәте. Пикачу. Пакт. Ант. Киви. Күк. Илсе. Клаус. Ноэль. Йөгәяҡ. Ниманд. Мотоцикл. Ураҡ. Рагу. Алоэ. Чума. Аҙау. Нева.

**Вертикаль буйынса:** Паккайне. Микулаш. Ом. Сенат. Бефана. Олатай. Немец. Сильвестр. Крэчун. Көрәк. Дала. Йоулупукки. Йыулувана. Сегацу. Аниме. Увгун. Ҡыяҡ.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Ғинуар (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (11) дүшәмбе | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:33 | 17:03 | 18:33 |
| 7 (12) шишәмбе | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:34 | 17:04 | 18:34 |
| 8 (13) шаршамбы | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:36 | 17:06 | 18:36 |
| 9 (14) кесе йома | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:37 | 17:07 | 18:37 |
| 10 (15) йома | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:39 | 17:09 | 18:39 |
| 11 (16) шәмбе | 8:07 | 9:37 | 13:30 | 15:40 | 17:10 | 18:40 |
| 12 (17) йәкшәмбе | 8:06 | 9:36 | 13:30 | 15:42 | 17:12 | 18:42 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

# ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

**Фейерверк, салют, шапылдатҡыс, бенгал уттары тоҡандырғанда хәүефһеҙлек техникаһы ҡағиҙәләрен теүәл үтәргә кәрәк икәнен онотмағыҙ.** Балаларға янғын сығыу ҡурҡынысы булған әйберҙәрҙе үҙаллы тоҡандырырға рөхсәт итмәгеҙ. Пиротехниканы торлаҡ йорттарҙа, уның эргәһендә, балкон, ҡыйыҡ, лоджия, машина эргәһендә һәм янғын сығыу ҡурҡынысы булған объекттар, электр линияһы, концерт һәм тамаша сәхнәләрендә, мәҙәни мираҫ объекттары, ҡурсаулыҡтар һәм милли парктар территорияһында ҡулланмағыҙ. Ҡаты ел булғанда ла салют аттырыуҙан тыйылығыҙ. Петарда тәү тапҡырҙан эшләмәһә, уны ҡулға алып, тағы берҙе тоҡандырып ҡарарға ярамай. Шулай уҡ пиротехник изделиеларҙың хәүефлелек радиусы төрлө булыуын да иҫтә тотоғоҙ: **1 класс** - бенгал уттары, **2** һәм **3 класс** - ҡеүәтлерәк изделиелар, уларҙы бина эсендә ҡулланыу ҡәтғи тыйыла, сөнки янғын сығыу һәм ҡоролмалар емерелеү ҡурҡынысы янай, **4** һәм **5 класс** - тик махсус лицензияһы булған профессионалдарға ғына ҡулланырға рөхсәт ителгән пиротехника.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6 ғинуар** 11.00, 13.00 **"Үҙ йөрәгеңде тыңла"** (Х. Шәмсетдинов, Г.-Х. Андерсен әҫәре буйынса), әкиәт. 0+

**"Бомба"** (С. Әбүзәр), комедия-фарс 16+

**7 ғинуар** 11.00, 13.00 **"Үҙ йөрәгеңде тыңла"** (Х. Шәмсетдинов, Г.-Х. Андерсен әҫәре буйынса), әкиәт. 0+

**"Әбейүшкә@түщкә.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия. 12+

**8 ғинуар** 11.00, 13.00 **"Үҙ йөрәгеңде тыңла"** (Х. Шәмсетдинов, Г.-Х. Андерсен әҫәре буйынса), әкиәт. 0+

**"Эҙләнем, бәғерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**6 ғинуар** 10.00, 12.30 **"Айболит и Бармалей"** Яңы йыл әкиәте. 0+

10.30, 13.00, 15.30 **"Новогодний переворот"** Яңы йыл әкиәте. 0+

**7 ғинуар** 11.00 **"Синяя птица"** Раштыуа әкиәте (М. Метерлинк) 6+

12.30, 15.00, 17.00 **"Сундучок Деда Мороза"** (Д. Голубецкий), Яңы йыл әкиәте. 0+

**8 ғинуар** 11.00 **"Сундучок Деда Мороза"** (Д. Голубецкий), Яңы йыл әкиәте. 0+

12.00 **"Пеппи Длинныйчулок"** (А. Линдгрен) 0+

**"Үәт, исмаһам, ахырызаман!"** (М. Багаев), комедия. 18.00 16+

**9 ғинуар** 12.00 **"Сундучок Деда Мороза"** (Д. Голубецкий), Яңы йыл әкиәте. 0+

12.00, 19.00 **"Алые паруса"** (А. Решетникова, А. Грин повесы буйынса), романтик фантазия. 12+

**10 ғинуар** 12.00 **"Новогодний переворот"** Яңы йыл әкиәте. 0+

**11 ғинуар** 12.00 **"Аладдин"** (И. Казакова), мажаралы әкиәт. 12.00 0+

**12 ғинуар** 12.00, 14.00 **"Золушка"** (Г. Корнелиссон), әкиәт. 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**6 ғинуар "Рождественский soundtrack-концерт"** (эстрада-джаз оркестры). 18.00 6+

**11 ғинуар "Маленький принц"** (Антуан де Сент-Экзюпери) 18.00 6+

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Оҙаҡ йылдар буйы "Киске Өфө" гәзитенең ижад майҙанындағы ҡомарҙы бүлешкән хеҙмәттәшебеҙ, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры, талантлы яҙыусы-шағир-журналист

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙы**

60 йәшлек юбилейы менән ҡотлайбыҙ. Ижад ғәли йәнәптәре һине тағы ла юғарыраҡ үрҙәргә илтһен, уҡыусыларыңды күңел елкетер, уйландырыр, ғәмләндерер әҫәрҙәрең менән ҡыуандырыуҙы дауам ит, бәхет ҡапҡаларың шар асыҡ булһын, тигән ихлас теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ.

* * *

Хеҙмәттәшебеҙ, гәзитебеҙҙең яуаплы сәркәтибе

**Ләйсән Даян ҡыҙы Нафиҡованы**

Әсәй тигән бөйөк дәрәжәгә эйә булыу шатлығы менән ҡотлайбыҙ.

Ҡыҙың Сәлимә үҙегеҙгә иш булып, бәхетшатлыҡҡа сорналып, игелекле һәм иманлы бала булып үҫһен. Ғаиләгеҙгә именлек һәм игелектәр теләйбеҙ.

**"Киске Өфө"ләр.**

*Һиңә берәһе лә бурыслы түгел, быны ла хәтереңдә тот. Дәүләт тә, атай-әсәйең дә, йәмғиәт тә һине тәьмин итергә тейеш түгел. Үҙең эшләп тапмаһаң, бер нәмә лә ҡулыңа буштан төшмәҫ.*

*ЙОЛА ТОТҠАН ЯҘЛЫҠМАҪ!*

# ТҮҢГӘҮЕР ХӘСИТӘҺЕ СЫҢЫ



**Хафиза апай Амантаева Өфөләге Бөтә Рәсәй Халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһенә был юлы Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан "урман шәле", "сана шәле" , "ауыл шәле", "оло шәл" тигән дебет шәлдәрен алып килгәйне.**

Тәүҙән үк Хафиза апайҙың шау тәңкәнән торған түшелдерегенә күҙ төштө. "Ҡара әле, был беҙҙең түңгәүер хәситәһе! Матурмы? Күргәнең булдымы? Юҡтыр. Һынташтағы бер боронғо апайҙың тағы ла боронғораҡ фотоһынан ҡарап эшләнек", - тийә һалды түшелдерегенә иғтибарҙы шәйләгәс. Хафиза апай Республика халыҡ үҙәге ойошторған "Селтәр" милли биҙәүестәр клубына йөрөп, өйрәнеп, лицензиялар алып ҡайтып, бөгөн үҙ төбәгендәге ағинәйҙәргә, ҡатын-ҡыҙҙарға өйрәтеүсе, кәңәшсе, төҙәтеүсе бурысын йөкмәгән. "Фольклор белгесе Гөлгөнә Баймырҙинаға рәхмәт. Белмәгәнемде өйрәттеләр, инде белгәнемде башҡаларға таратмаҡ булып сығып киттем ауыл буйлап, район буйлап, ил буйлап..." - тине ағинәй һәм үҙ ауылында үҫәргән, түңгәүер ырыуы кейемдәрен тергеҙеү менән бик яуаплы шөғөлләнеүе тураһында бик ентекләп һөйләп китте. Махсус курста уҡыу унын күҙен асҡан, ышанысын нығытҡан, "Һәр кем ошондай яуаплылыҡ һәм дәрт менән тотонһон ине милли кейем үрнәктәрен тергеҙеүгә", тигән теләген дә еткерҙе ул.

-Октябрьский ҡалаһында йәшәгән ҡыҙыма хәл белешергә барһам, ул яҡтың ҡатын-ҡыҙҙары ла милли биҙәүескә йәбешкән икән, - тип һөйләп китте тағы ла. - Эй өйрәнгеләре килә, үҙҙәре яһап таҡҡылары килә, рәхмәт төшкөрҙәр. Сәмле-ғәмле булғандарына иҫем ҡороно - барыбер беҙҙең башҡорт халҡы утта янмай, һыуҙа батмай; ҡайҙа түгел, айҙа йәшәһә лә, донъя матурлығынан төңөлмәй, биллиһи-ғазим шөкөр! "Беҙ - йылан ырыуынанбыҙ, - тиҙәр, - эске йылан, урман йылан, тышҡы йылан, ҡыр йылан тигән тармаҡтарыбыҙ бар. Боронғо төп башҡортлармыҙ. Тарихыбыҙ әллә ҡайҙа тамырланған, ете быуын менән генә буйламалы түгел шәжәрәләребеҙ: тәрәнлеге - меңъйыллыҡтарҙа! Иллә мәгәр тамғаларыбыҙҙы белмәйбеҙ..." Бына шуға уфтаналар. Тамға теле лә бик көслө, мәғәнәле бит, шуны уйлайҙар. Бына беҙҙең үҫәргән тамғаһы - ярым ай. Ул тамғаны эйәргә ҡуйыу - дөрөҫ. Әммә ҡашмауға ҡуйыу ярамайҙыр. Бындай ваҡлау тамға ҡеүәтен тарҡата. Ырыу тамғалары онотолған, юғалған - уны ир-егет ҡоралына, аты өҫтөнә япҡан сергетышҡа, бал ҡортон япҡан солоҡ умартаға, таш ҡаяға йә ҡәбер ташына сүкегәндәр. Ырыу тамғаһы бик ҡиммәтле билдә бит ул. Ҡатын-ҡыҙҙың еләнитәгенә, башлыҡ-таҡыяһына ҡуйыу ҙа хилаф кеүек. Тамға баһаһын белмәгәндәр, аңлап етмәгәндәр күп, тимәк, тамғаға тотонмаҫҡа кәрәк...

Шулай итеп, Хафиза апай Амантаева янынан әллә күп уй-һорау йөкмәп киттелде. Яуаптарын бергә эҙләйек әле, йәмәғәт.

**Сәрүәр СУРИНА.**

*ӘЙҘӘ...*

# ҒҮМЕРЕҢДЕ ЗАЯҒА ҮТКӘРМӘ!

**Тиҙҙән Яңы 2020 йыл етә һәм миңә 40 йәш туласаҡ. Йыш ҡына үҙемә: "20 йыл элек бөгөнгө аҡылым булһа, тормошом ниндәйерәк булыр ине икән?" тигән һорауҙы бирәм. Эйе, 20 йыл элек мин былар тураһында уйламай ҙа инем, ә хәҙер башҡаларға кәңәш итә алам.**

**Эсмә, тартма, ҡалғанына өлгәшеп була!** Ысынлап та, тап шулай. Алкоголь, наркотиктар тураһында уй бөтөнләйгә башыңа инеп тә сыҡмаһын.

Сиктән тыш ауыр ваҡыттарҙан тыш, **бер ҡасан да үтескә аҡса алма.** Шәхси эшҡыуарлыҡ башлауға ла, машинаға ла, телефонға ла, яҡын кешеңә бүләк эшләү өсөн дә. Аҡса юҡ икән - уны эшләп табыуҙың башҡа юлдарын эҙлә, йәки бөтөнләйгә ҡул һелтә. Кредит - хәйерселеккә илткән беренсе һәм иң ҙур аҙым. Сараһыҙҙан алғанда ла тиҙерәк кире ҡайтар һәм бүтән үтескә һорамаҫҡа тырыш.

**Һиңә берәһе лә бурыслы түгел,** быны ла хәтереңдә тот. Дәүләт тә, атай-әсәйең дә, йәмғиәт тә һине тәьмин итергә тейеш түгел. Үҙең эшләп тапмаһаң, бер нәмә лә ҡулыңа буштан төшмәҫ.

**Үҙеңде сикләй бел.** "Был ғүмерҙә бер тапҡыр йәшәйбеҙ!" тигәнгә оҡшаш бөтә һүҙҙәр ялған, улар артына хурлыҡ һәм унан да ауырыраҡ эҙемтәләрҙән башҡа бер ниндәй ҙә мәғәнә йәшерелмәгән. Кредитҡа алынған аҡсаға айфон һатып алмаһаң йәки Яңы йылда ҡайҙалыр сит илгә барып ҡайтмаһаң да бер ни булмаҫ. Ҡулланыусылар ҡарашынан баш тарт, аҡыллыраҡ бул.

**Үҙеңде ихтирам ит.** Ялған ҡиммәттәргә алданма, маҡтанма, алдашма. Үҙ баһаңды белеү телефон маркаһына, ҡиммәтле кейем-һалымға йәки машинаға бәйле булмаһын. Шул осраҡта ғына ниндәй шарттарҙа ла һине хөрмәт итерҙәр.

**Намыҫ һәм абруй төшөнсәләрен берәү ҙә юҡҡа сығармаған.** Һәр осраҡта ла кеше булып ҡала бел, выжданыңды һатма. Хаҡлыҡ һинең яҡта икән - бер низән дә ҡурҡма.

**Башҡа кешеләрҙе ихтирам ит.** Хатта кемдер быға лайыҡ түгел булып тойолһа ла, хөрмәт күрһәтеү - тәртипле кешегә хас һыҙат.

**Эшеңә яуаплы ҡара.** Бөйөк ҡаҙаныштар юлы хеҙмәттән башлана, йыш ҡына түбән хаҡлынан. Бындай эште илке-һалҡы ғына башҡарырға ярай, тип уйлама. Яуаплылыҡтан тыш бер ниндәй артыҡ яғы булмаған кешеләрҙең юғарыға үрләүенә шаһит булғаным бар, ундайҙар бик аҙ һәм юғары баһаланалар.

**Үҙеңде ҡулда тота бел.** Итәғәтле, тыныс һәм әҙәпле була белеү бөйөклөктөң төп билдәһе. Был сифаттар шәхси эшҡыуарлыҡта ла ярҙам итә.

**Кәрәкмәгән әйберҙәр һатып алыуҙан тыйыл,** аҡсаң әлегә артығы менән етһә лә йыйып бар. Был һаранлыҡты аңлатмай, ни бары ошо әйберҙе һатып алырға кәрәкме-юҡмы - шуны алдан уйла.

**Аҡсаңды нимәгәлер һалырға тырыш.** Пирамида һәм дуҫтарыңдың "стартап"тарына түгел. Күсемһеҙ милек, ҡиммәтле ҡағыҙҙар, банкыла депозитҡа, мәҫәлән. Тиҙ генә байып китеү юлдарын эҙләмә, улар хәйерселеккә йә төрмәгә илтеүе бар.

**Белем ал.** Интернет бының өсөн уғата уңайлы. Аҡса телен аңларға өйрән (быны өсөн бухгалтерҙар курсын үт), бизнес өлкәһен энәһенән ебенә тиклем төшөнөп өйрән. Хатта бөйөрөк һатырға ғына йыйынһаң да быны кәрәге тейер. Күберәк белгән һайын мөмкинлектәрең дә артыуын иҫеңдә тот.

**Ялҡауланма.** Буш ваҡытыңды уйындар һәм интернетта үткәреүҙе туҡтат, быны урынына берәй китап уҡы, балыҡ тоторға бар йә саф һауала йөрөргә сыҡ, бассейнға булһа ла барып кил. Бер ваҡытта ла ялҡауланма, юғиһә, 20 йылдан япа-яңғыҙ ҡалырға ҡурҡасаҡһың.

**Бер ваҡытта ла бизнесты "нулдән" башлама.** Бер нәмә лә белмәй тороп, фараздарға ғына нигеҙләнеп, тиеүем. Үҙең бер-нисә йыл эшләгән һәм яҡшы белгән өлкәлә бизнес башлау иң отошлоһо. Әммә икенсе пунктта әйтелгәндәрҙе иҫтә тот: аҡсаң етмәйерәк тора икән - эшләп тап, быға ваҡытың бар әле.

**Ваҡыт - хазинаға тиң.** Йәшәргә өйрәнгәнсе ғүмер уҙып та китә. Төп байлыҡ машиналар, фатирҙар, банктағы шәхси иҫәп тә түгел һәм улар 40 йәшкә еткәс, мөһимлеген дә юғалта. Хобби, туғандарың өсөн ваҡытыңды йәлләмә.

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Был ун биш кәңәште тулыһынса үтәп йәшәүгә ышаныуы ауыр, беләм. Әммә тормошҡа ашырыр ниәттәрең, сәмең бар икән - тырышлыҡ һалып ҡара. Кәңәштәремде тотҡан берәү ҙә үткән ғүмеренә зарланып ултырмаҫ, тип вәғәҙәләйем.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# НАМЫҪЛЫ ДОШМАН...

## намыҫһыҙ дуҫтан артығыраҡ

Йүнле ҡатын-ҡыҙ биографияһы - ул утыҙ йәшкә тиклем хронологиянан, утыҙҙан һуң мифологиянан тора.

**(Дон-Аминадо).**

Уңышҡа юл ирҙәрен алға табан төрткөләгән ҡатын-ҡыҙҙар менән тулы.

**(Томас Дьюар).**

Йөрәктең һәм аҡылдың бары тик тауыш биреү хоҡуғы ғына бар. Барыһын да... тән хәл итә.

**(Поль Жеральди).**

Беҙгә дуҫлыҡ һәм изгелек етмәй, тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ, дуҫлыҡҡа һәм изгелеккә беҙ етмәйбеҙ.

**(Марсель Жуандо).**

Беҙҙең кисәге дошмандар бөгөн шундай матур хәтирәләргә әйләнә.

**(Кароль Ижиковский).**

Әгәр ҙә уҡыусы яҙыусыны белмәй икән, бында уҡыусы түгел, яҙыусы ғәйепле.

**(Илья Ильф).**

Баланың холҡона тәьҫир итеү өсөн иң ҡулай ваҡыт - ул тыуғанға тиклемге йөҙ йыл.

**(Уильям Индж).**

Ерҙә үк үҙ ожмахын төҙөргә маташҡан кешенең тормошонда бынамын тигән тамуҡ барлыҡҡа килеүе лә мөмкин.

**(Поль Клодель).**

Тәнҡитселәр һәр ваҡыт сағыштыра. Ә сағыштырып булмағанды улар күрмәй.

**(Жан Кокто).**

Йәшлек - ул ҡулдан ысҡындырылған мөмкинлектәр дәүере.

**(Колетт).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Берәү күршеһенә кәңәш һорап ингән. Әммә күршеһе уны тыңларға ла теләмәгән.**

**- Үҙеңә башҡа кәңәшсе эҙлә, күршем, - тигән ул. - Һиңә шулай яҡшыраҡ булыр, сөнки мин һинең аҫтыртын дошманың, ә дошманлыҡ - насар кәңәшсе. Ана, дуҫтарыңдың береһенә кәңәш ит, улар һиңә яҡшы кәңәш бирер.**

**- Һинең һүҙҙәреңдән мин шуны аңланым, күршем, - тигән кәңәш һораусы. - Һин, ысынлап та, миңә аҫтыртын дошманһың. Әммә был хаҡта һин миңә үҙең әйтәһең икән, тимәк, һин намыҫлы кешеһең. Ә намыҫлы дошман намыҫһыҙ дуҫтан мең тапҡыр артығыраҡ ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 30 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3707
Заказ - 2613/12